ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

18-24 август (урағай) 2018

№33 (815)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иреркле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Хәүефһеҙ мөхит...**
һәр мәктәптә булдырылһын



5

**Башҡорт атын...**
милли брендыбыҙ итеп таныйыҡ



7

**Салауат эҙҙәре буйлап,**
Өфөнән Палдискиғаса



8-9

**Дүрт Фәриҙә менән Нурия...**
ауылыбыҙға ҡот бирә



12-13

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Эргә-тирәләге таныштарығыҙға, туғандарығыҙға иҫкәртегеҙсе: 2018 йылдың икенсе яртыһы өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө"гә яҙылып өлгөрмәһәләр, әле лә һуң түгел - 20 августа тиклем яҙылһалар, гәзитебеҙҙе сентябрҙән алдыра башлаясаҡтар. Шулай уҡ июль-август айҙарында элекке хаҡ менән, йәғни 560 һум 82 тингә, 2019 йылдың беренсе яртыһы өсөн дә гәзитебеҙгә яҙылып була. Ошо арауыҡта гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең кемдәрелер, ғәҙәттәгесә, матур китапҡа өмөт итә ала.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Һуңғы ваҡыт халыҡ кәсепселегә тармағы әүҙем тергеҙелә. Оҫталар етештергән тауарҙар һорау менән файҙаланамы, улар беҙҙең көнкүрештә ҡулланыу табамы?

*Сәрүәр СУРИНА, тележурналист, яҙыусы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, З.Биишева, Аҡмулла, Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге премиялар лауреаты:* Иң тәүҙә шуны тәкрарлап китеү кәрәктер, тием. Ҡул эше оҫтаһы, дөрөҫөн әйткәндә, халыҡ араһынан меңгә берәү генә килеп сыға. Ауылда улар берәү йә икәү генә була. Башҡалар инде уға эйәреп алып китәләр һәм үҙҙәренән сығып, яңы биҙәктәр өҫтәй башлайҙар, шуның менән зауыҡ тигәнде лә онотоп ебәреүҙәре ихтимал. Ә оҫталар иһә - ысын ижадсы, боронғо традицияларҙы төплө белгән кешеләр. Үҙ эштәрендә улар төп өс тәжрибәгә таяна. Иң беренсеһе - боронғолоҡ традицияларын һаҡлайҙар. Икенсеһе - зауыҡ самаһын һәм өсөнсөһө - ижад емештәренең ҡулланылыш өлкәһен белеүҙәре менән айырылып торалар.

Ҡул эштәре оҫталары, тигәндән, беҙ, ғәҙәттә, теләһә ниндәй әйберҙе күҙ алдында тотабыҙ. Эшем буйынса ағас, тимер, таш, йөн, еп, дебет һәм төрлө буяуҙар менән эш иткән кешеләрҙе күп күрәм. Шуларҙан, мәҫәлән, кейеҙ баҫыу, шәл бәйләү, ағасты юнып-ырыуҙар һ.б. Был әйберҙәр бөгөн һорау менән файҙалана һәм, әлбиттә, көнкүрешебеҙҙә бик кәрәк. Бөтмәй торған, һәр саҡ кәрәкле эштәр улар. Яңы технологиялар ҡулланып, тәбиғи таш, ағас, йөн, еп кеүек сеймал беҙҙең көнкүрешебеҙгә, күнелебеҙгә бик яҡын. Боронғолоҡҡа, асылыбыҙға кире ҡайтыу күренеше лә был. Кәсепселек, ҡул эштәре күргәҙмәләрендә шуларҙың, ғәҙәттә, иң зауыҡлылары еңеүсе булып таныла. Милли кейемдәр һәм биҙәүестәр өлгөләрен генә алайыҡ. Бөгөнгө көнгә яраҡлаштырып, үҙҙәре белгәнсәрәк арзан һәм ялтыр-йолтор менән биҙәп эшләнгәндәре уларҙың өй араһында, уйынға йә һыуға барғандамы кейелә икән, әйҙә, кейә бирһендәр, бынан бер зыян да юҡ. Бындай ҡул эштәренә күҙ өйрәнде, уға артыҡ иғтибар ҙа бирер бармайбыҙ. Шул уҡ ваҡытта боронғо кейемдәрҙең иң зауыҡлылары ғына оҫталыҡ сәнғәте юғарылығын билдәләүен дә аңлайбыҙ һәм күрәбеҙ. Бындай елән, селтәр, ҡашмауҙарҙы элек ата-бабаларыбыҙ өләсәйҙәр өсөн йылҡы малы, һыйыр, бура йә бик күп аҡса түләп кенә һатып алыр булған. Әсмә Усманова тигән апай һөйләүе буйынса, картатаһы шулай оҫтаға заказ бирер, елән әҙер булғанға тиклем кәләшен (йәғни Әсмә апайҙың өләсәһен) оҙатып ала алмай ике йыл буйы көтөргә мәжбүр булған. Ысынлап та, әлеге әйткәнемде ҡабатлап, боронғо традицияға ярашлы һәм зауыҡлы еләндәр бер-ике айҙа ғына ашыҡ-бошоҡ тегелмәгән шул, тием. Ана шундай еләндәр биҙәп тора ла бөгөн Санкт-Петербургтағы һәм үҙебеҙҙең Милли музейыбыҙ түрҙәрен! Бөгөнгө көн ана шундай оҫталарыбыҙ үҫеп сыҡһын инде, тип бик көтәбеҙ. Һуңғы йылдарҙағы ҡул эштәренә ылығыу, милли кейемдәребеҙҙе тергеҙеү, кейеҙ баҫыу, тирмәләр эшләү, тире, күн эшкәртеү кеүек кәсепселек төрҙәре асылыбыҙға ҡайтыу рәүешен кәүҙәләндереп, артабан да дауам итһен, ул тауарҙар ҡулланылышҡа индерелһен, әйҙә, тик уларҙы эшләгәндә тарихи дөрөҫлөк боҙоп күрһәтелмәһен бер үк, самалар төп традицияларыбыҙҙан, зауыҡ сиктәренән ашып китмәһен, тимәксемен.

**(Дауамы 2-се биттә).**



12+

✓ *Махсус күргәҙмәләрҙә был турала хәбәрҙар кеше мотлаҡ кейеҙҙән эшләнгән әйбер эҙләй. Ағас һауыт-һаба менән дә бик ҡыҙыҡһыныусылар бар, сөнки билдәле: ул экологик таҙа, ҡулланыуҙа сәләмәтлек өсөн хәүефһеҙ.*



## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ҮҘЕҢДӘН БАШЛА

***Зариф ҒАРИПОВ, Учалы район советы секретары:*** Һәр кемдең үҙенең проблемалары бар, әлбиттә, айырым кешенеке лә, ғаиләнеке лә, йәмғиәттеке лә. Иң мөһиме, һәр кем иртән уянғас та: "Мин нимә эшләргә тейешмен?" - тип уйланһын ине. Әгәр ҙә һәр кем: "Илем, ауылым, ғаиләм, үҙем өсөн нимә эшләһәм, йәшәйешем яҡшырыр?" - тип уйланһа, тормош ҡырҡа үҙгәрер ине ул. Ә бөгөн кеше күберәк: "Минең өсөн нимә эшләргә тейештәр әле?" - тигән уйҙа йөрөй һымаҡ. Ниндәй мәсьәлә килеп сыҡһа ла, тормошҡа оптимистик күҙлектән ҡарарға кәрәк. Сөнки элек тә еңел булмаған бит, беҙҙең бала саҡты ғына хәтерләгәндә лә, әллә күпме ауырлыҡтар ишерелгәйне атай-әсәйҙәр елкәһенә. Бөгөн беҙ йыш ҡына, тормошобоҙ ауыр, ти ҙә зарланабыҙ. Ауырлыҡтар булһа ла, ауыр уйҙарға бирелеп китһәк тә, яҡты киләсәккә ышанып, тормошто яйға һалырға тырышып, донъя мәшәҡәттәрен тыныс ҡабул итеп, бөгөнгө көнгә ҡыуанып, киләсәккә пландар ҡороп йәшәргә кәрәк.

Эйе, етәкселәрҙең дә иғтибары, хәстәрлеге һәр кемгә барып етмәйҙер. Бына беҙ, район етәкселәре, мәҫәлән, йыш ҡына ауылдарға сығабыҙ, халыҡ менән осрашып һөйләшәбеҙ. Ауылдарҙың һәр береһенең үҙ тарихы, йолалары, көнкүреш үҙенсәлектәре бар һәм халыҡ унда үҙенсә йәшәп ята. Тик район етәкселәренең дә, республика кимәлендәге чиновниктарҙың да һәр саҡ ваҡыт яғы самалы була: улар һәр эште ҡабаландырырға, тиҙ һөҙөмтә алырға, эште тиҙ генә ослап ҡуйырға тырыша. Ә бит ауыл кешеһе элек-электән уйлап эшләргә өйрәнгән, ул бер-ике көн фекер туплап йөрөй, ололар менән кәңәшләшә, ҡор йыйып һөйләшә, шунан ғына үҙенең ҡарарын иғлан итә. Беҙ йыш ҡына ер кешеһенең ошо фиғелен аңлай белмәйбеҙ ахыры ул. Ғөмүмән, ябай халыҡ һәм етәкселек бер-береһен бер һүҙҙән аңларға өйрәнергә тейеш.

Йәштәрҙе тәрбиәләү буйынса мине борсоған күренештәр ҙә бар. Хеҙмәткә өйрәтмәйбеҙ балаларҙы. Беҙ ҙә йәш саҡта төрлө байрам сараларында, киске уйындарҙа йөрөнөк, һуңға тиклем йөрөп ҡайтһаҡ та, иртәгәһенә ҡара тандан бесәнгә барырға тип, йә көтөү ҡыуырға тип, һикереп тороп ултыра инек. Ә хәҙер бала төндә ҡайтһа, төшкә тиклем йоҡлай бирһен, тип, үҙебеҙ шым ғына баҫып йөрөйбөҙ. Был бөгөн әллә ниндәй ҙур проблема булып күренмәйҙер ҙә, ләкин ҡурсыуға, ялҡаулыҡҡа өйрәнгән баланың үҫә килә хаталары ла ҙурая барасаҡ бит.

Ғөмүмән, бөгөн заманға һылтанып ултырырға түгел, барыһын да үҙеңдән башларға кәрәк, шул саҡта үҙеңдең генә түгел, киләсәк быуындарыңдың да, йәмғиәттең дә проблемалары үҙенән-үҙе яйлап юҡҡа сығыр.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Һуңғы ваҡыт халыҡ кәсепселегә тармағы әүҙем тергеҙелә. Оҫталар етештергән тауарҙар һорау менән файҙаланамы, улар беҙҙең көнкүрештә ҡулланыу табамы?

**(Башы 1-се биттә).**

***Кәримә КАЙДАЛОВА, Республика халыҡ ижады үҙәгенең "Урал" художество галереяһы мөдире:*** Бөгөн тормош-көнкүрешебеҙҙә этника ифрат та модала һәм шунлыҡтан халыҡ оҫталарының боронғоса итеп эшләнгән ҡулланыу тауарҙарына, һәр төрлө сувенирҙарға һорауы ҙур. Әйтәйек, ҡунаҡҡа, ниндәйҙер тантанаға йыйынаһығыҙ икән, бүләккә ғәҙәти булмаған берәй ғәжәйеп әйбер алып ҡыуандырғы килә бит яҡындарыбыҙҙы һәм дуҫтарыбыҙҙы. Бында инде күп тә уйлап тормаҫтан, халыҡ оҫталары эшенә мөрәжәғәт итһәгеҙ, бер ҙә отолмаясаҡһығыҙ. Дебет шәлме ул, станокта һуғылған күҙ яуын алырҙай баласмы, сигеүле таҫтамал, япмалар йә булмаһа боронғо стилдә эшләнгән биҙәнеү әйбереме - бөтәһе лә күңелгә яҡын һәм ҡыуаныс килтерерҙәй бүләктәр буласаҡ. Ә ситтән килгән туристар нисек ихлас һатып ала халыҡ кәсепселегә тауарҙарын! Мәҫәлән, улар араһында хәҙер башҡорт милли кейемендәге ҡупшы ҡурсаҡтар ҙур һорау менән файҙалана. Элек башҡорттарҙың тормош-көнкүрешендә кейеҙ әйберҙәр киң таралған булған: түшәк булһынмы ул, өҫ йә аяҡ кейемеме - улар бик йылы, шул уҡ ваҡытта дауалау сифатына эйә булған. Махсус күргәҙмәләрҙә был турала хәбәрҙар кеше мотлаҡ кейеҙҙән эшләнгән әйбер эҙләй. Ағас һауыт-һаба менән дә бик ҡыҙыҡһыныусылар бар, сөнки билдәле: ул экологик таҙа, ҡулланыуҙа сәләмәтлек өсөн хәүефһеҙ. Ә һуңғы ваҡытта башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары араһында ҙур һорау менән файҙаланыусы милли биҙәнеү әйберҙәрен генә алайыҡ, булмаһа. Дөрөҫөн әйткәндә, селтәр, түшелдерек һәм уларҙың кесерәйтеп, стилләштерелгән өлгөләрен һылыуҡайҙарыбыҙ рәсми тантаналарға ла, театр-концерттарға ла, ҡунаҡҡа ла ҙур ғорурлыҡ менән кейеп бара. Был матур ғәҙәт, үҙенә күрә йолаға әүерелде - шуныһы ҡыуаныслы.



*Ағинәйҙәр селтәр-ҡашмауҙы башҡаларға ла тәҡдим итә...*

***Ғәлинур ЗАРИПОВ, Миәкә районы Миәкә ауылы оҫтаһы:*** Ошо райондың Биҡҡол ауылында тыуып, Илсеғолда үҫтем, шунда урта мәктәп тамамланым. Артабан Башҡорт дәүләт педагогия институтының художество-графика факультетында юғары белем алдым. Бында мин рәсем, һыҙма һәм хеҙмәт дәрестәре бүлегендә декоратив - ҡул эштәре сәнғәте йүнәлешендә уҡыным. Дөрөҫ, мәктәптә ярты йыл ғына эшләп алдым, унын ҡарауы, үҙемдең педагог түгеллегемде төшөндөм. Ижад өлкәһендә үҙ юлымды тапҡым килде. Шулай бер ваҡыт, ун йылдар самаһы элегерәктер, инглиз телендәге сайттарҙы гиҙә торғас, инглиз һәм французларҙың тирмәләр эшләү менән шөғөлләнеүе хаҡында белеп ҡалдым да сәмләндем: ә ниңә, беҙ ҙә эшләй алмайбыҙмы ни үҙебеҙҙең башҡорт тирмәләрен? Юғиһә, ғәҙәттә, мәҙәни сараларҙа, бигерәк тә һабантуйҙарҙа "Ағиҙел" фирмаһы етештергән тирмәләр ҡулланыла. Ә уларҙы тирмә тиһәң, хәтере ҡалыр, тигәндәй, шартына килтереп эшләнмәй. Тоттоҡ та улым менән ағастан матур итеп тәүге тирмәбеҙҙе эшләп тә ҡуйҙыҡ. Үҙебеҙгә бик оҡшаны ул: эсе иркен, сөнки уртаһында бер ниндәй ҙә терәү юҡ. Тирмә эшләүҙең боронғо ысулдарын ныҡлы күҙәтеп, ҡаты ағастан: имән, саған, йыланан, хатта дардарҙан (ҡорос ағасы) бөгөп яһайбыҙ унын конструкцияларын. Яңы урында йорт һалып инергә булғас, ваҡытлыса әлеге тәүге тирмәбеҙҙә йәшәп тә алдыҡ. Аҙаҡ йорт алдыбыҙҙа торған еренән күршебеҙ уны күреп ҡалды ла, ай-вайыбыҙға ҡуймай, һатып алды ла ҡуйҙы. Шулай итеп, тирмәгә әлегә ҙур булмаһа ла һорау барлығы асыҡланды. Яйлап етештереү күләмен арттыра барҙыҡ, эшләгән береһен һатып ала торҙолар. Бөгөнгө көнгә сама менән 150-ләп тирмә эшләп һаттыҡ. Тимәк, бындай кәсепселек төрөнә ихтыяж бар, кеше һатып ала һәм көнкүрешендә ҡуллана уларҙы. Һабантуйҙар, "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" һәм башҡа байрамдар үткәргәндә лә бик кәрәк улар. Һәм, ғөмүмән, тирмәләр генә түгел, ағас эше оҫталары етештергән ҡулланыу тауарҙарына ла һорау ҙур икәнен күреп беләм. Өфөлә йыш үткәрелеп торған халыҡ кәсепселегә тауарҙары күргәҙмәләрендә күҙәткәнем бар: ҡул оҫталарының сынъяһау һандыҡ, ултырғыс, ағас һауыт-һабаларын, үрелгән кәрзиндәрҙе тиҙүк һатып алып та бөтәләр. Ә инде ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың күҙ нурҙарын түгеп бәйләгән селтәрле-биҙәкле шәлдәре, һуғылған келәмдәре, ҡорамаһы-башҡаһы! Юғары зауыҡ, сәнғәт оҫталығы кимәлендә башҡарылған халыҡ кәсепселек тауарҙары һәр саҡ һорауҙа бөгөн. Ә инде ағастан ырып, семәрләп эшләнгән сувенирҙар һәм картиналарҙы һәр башҡорт өйөнөң тип әйтерлек түрендә күрергә тура килә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов "Рәсәй дәүләт цирк компанияһы"ның генераль директоры Дмитрий Иванов менән осрашты. Өфө дәүләт циркын реконструкциялау, төбәктә цирк сәнғәтен үҫтереү мәсьәләләре тикшерелде. Дмитрий Иванов республика етәксеһенә цирк бинаһын өҫтәмә тикшерергә йүнәлтелгән финанс ярҙамы өсөн рәхмәт белдерҙе. План буйынса 2020 йылдың аҙағында - 2021 йылдың башында яңыртылған Өфө циркы файҙаланыуға тапшырылырға тейеш.

✓ Дәүләт Думаһының Мәғариф һәм фән буйынса комитеты башлығы урынбаҫары Борис Чернышов (ЛДПР) Рәсәйҙә мәктәп формаһына бер төрлө хаҡ билдәләргә тәҡдим итте. Форма кластарҙа социаль ҡатламдарға бүленеү кимәлен кәметә, тип иҫәпләй парламентарий. "Уҡыусылар бер үк кейенһә, кемдең нимәһе яҡшыраҡ булыуына бәйле һорау булмай", - тип белдерҙе Чернышов. Берҙәм мәктәп формаһын Владимир һәм Псков өлкәләрендәге фабрикаларҙа тегергә мөмкин, тип билдәләне депутат.

✓ Август уртаһына сәсеү майҙандарының биштән бер өлөшөндә уңыш йыйып алынған, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығынан. Был - яҡынса 380 мең гектар иген һәм ҡуҙаҡлы культуралар. Ошо мәлдә игендең уртаса уңышы былтырғынан гектарынан 1,4 центнерға аҙыраҡ һәм гектарынан 21,3 центнер тәшкил итә. Ведомство 3 миллион тоннанан ашыуыраҡ ашлыҡ йыйып алырға ниәтләй. 2017 йылда урып-йыйыу кампанияһында 3,9 миллион тонна уңыш йыйылған.

✓ Берҙәм тауыш биреү көнөндә Өфө һәм Бәләбәй ҡалаларында, шулай уҡ Стәрлетамаҡта һәм Белоретта һуҡыр һәм насар күргән һайлаусылар өсөн махсус участкалар ойошторола. Махсус тауыш биреү урындары йүнәлтеүсе таянғыстар, пандустар менән йыһазландырылған. Күреү һәләте боҙолған һайлаусыларға тауыш биреү өсөн махсус трафареттар һәм лупалар тәҡдим ителә.

✓ "Китап" нәшриәте Мостай Кәрим әҫәрҙәренең тулы йыйынтығының һуңғы, 10-сы томын сығарырға йыйына. Уға көндәлек яҙмалар һәм хаттар туплана. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Мостай Кәрим әҫәрҙәре йыйынтығының беренсе томы 2009 йылда шағирҙың 90 йыллығына донъя күргәйне. Күп томлыҡ әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы булып тора.

✔ *Әммә тын алырға ла өлгөрмәнек, тиерлек, киләһе "ҡунаҡ" - участка милиционеры килеп, оҙон итеп акт яҙып китте. Магазиныбыҙҙы, кәрәкле ойошма менән договор төҙөп, һаҡҡа ҡуйырға кәрәк булған икән.*



*ЗАМАН ҒӘЛӘМӘТТӘРЕ*

# АЛЫПҺАТАР БУЛЫП ҠАРАНЫМ,

## йәки Был эш һәр кемдең дә ҡулынан килмәйҙер шул

**"Киске Өфө" гәзитендә әленән-әле шәхси эшҡыуарлыҡ, алыпһатарлыҡ хаҡында һөйләгән мәҡәләләрҙе күреп ҡалғылайым. Йәшәйешебеҙҙең ошо яғын яҡтыртҡан, әллә ни ҙур ҙа булмаған мәҡәләләрҙең барыһында ла тиерлек уңышлы эшләп киткән яҡташтарыбыҙ хаҡында бәйән ителә. Ә минең иһә, бына ошо мәсьәләнең икенсе яғын бер аҙ әйләндереп ҡурһәтергә ниәтем.**

Әлегерәк, һәр төрлө магазиндар, хатта киоск асып, шунда һатыу иткән шәхси эшҡыуарҙарға (халыҡта уларҙы алыпһатарҙар тип йөрөтә торғайнылар) ҡарап: үәт, бар бит донъяла рәхәт йәшәгән кешеләр, тип уйлай торғайным. Берәүҙәрҙән түбән хаҡҡа һатып алынған тауарыңды икенселәргә ҡыйбат хаҡҡа һат та, әйҙә, "май эсендә" генә кеүек йәшә лә йәшә! Хөрриәт бит!.. "Буштан ғына килгән аҡсаға маз булып" йәшәгән байҙарға ҡарата шундай фекерҙә мин генә лә булмағанмындыр әле. Тик аҙаҡ, һәр нәмәнең эсенә инеп ҡарамайынса, уның нескәлектәрен белеү мөмкин түгел икәнлегенә тағы бер тапҡыр ышандым. Был мәҡәләм менән яңы эш асырға теләүселәрҙе татлы хыялдарынан төңөлдөрөргә теләмәйем, әммә, тәүҙә был хаҡта тәжрибәле, оло ағайҙар һәм апайҙар менән кәңәшләшергә тәҡдим итәм.

Оҙайлы хәрби хеҙмәтемде тамамлап ҡайтҡас, тыштан ҡарағанда ифрат та еңел булып тойолған ана шул алыпһатарлыҡ кәсебе менән шөғөлләнергә ҡарар иттем. Шәхси эш асырға дәрт иткәс, бер бүлмәле фатирымды һатып, улыма тукталыштағы бер павильонды һатып алып бирҙем дә, ҡала уртаһында, кеше-мәҙәр ҙа күпләп йөрөгән күҙаллап, ифрат та йәтеш булыр, тип фаразлап, шул һатыу нөктәһенә ҙур һына өмөт бағлап, ҡыуанып, дәртләнеп эшкә тотондоҡ. Тотондоҡ, тиеүем - ул үҙем хаҡлы ялдағы кеше буларaҡ, улыма аҙым ярҙам итергә керешеп киттем. Өҫтәүенә, улымдың автомобиле лә юҡ ине. Фатир һатҡан аҡса павильон алыуға ғына түгел, ә башланғыс капиталға, йәғни, һатырға тейешле булған тәүге аҙыҡ-түлек тауарҙары, һыуыҡтыс, туңдырғыс, кәштә-мөштә, үлсәгес, касса аппаратына ла етте. Бурысҡа батып, берәүҙән дә аҡса-мазар алып торорға тура килмәне хатта. Хәҙер инде, әйҙә, эшлә лә эшлә... Хакимиәт йортона барып, һалым органдарында тейешенсә документтарҙы яһатып, санэпидстанциянан да кәрәкле ҡағыҙҙар алып, тулы хоҡуҡлы эшҡыуар булып киттек. Ер комитетына тейешле һалымды павильон ултырған ер өсөн генә түгел, ә тротуарҙары менән, автобус тукталышының бөтә майҙаны өсөн түләргә тейешлегебеҙҙе белгәс тә кәйефебеҙ төшмәне. Ул ғына ла түгел, ҡала халҡы файҙаланған тукталышты ремонтлап, буяп та ҡуйҙыҡ хатта.

Тәүҙәрәк, клиенттарҙы йәлеп итеү өсөн, тауарҙарға хаҡты башҡа киоскыларға ҡарағанда түбәнерәк итеп ҡуйып, эшебеҙҙе башлап ебәрҙек. Кешеләр килеп "Һеҙҙә ҡыйбат түгел икән..." тип маҡтап та китәләр. Тауарҙы ала башланылар. Кәйеф шәп! Әммә тәүге көндөң аҙағында уҡ күрше бер киоскының хужаһы килеп: "Тауарыңа хаҡ өҫтә, әгәр ҙә дошмандарың күп булыуын теләмәһәң", - тип, ҡәтғи "кәңәш" бирепсыкты. Был беҙҙең өсөн, әлбиттә, әллә ни көтөлмәгән хәл түгел ине. Хаҡтарҙы шул уҡ кис төҙәтеп тә ҡуйҙыҡ. Ә кешеләр шулай ҙа килә, һатып ала. Эштәр ал да гөл һымаҡ китте.

Аҙна-ун көн тирәһе һатыу иткәс, буласаҡ килемдең әллә ни насар булмаҫын иҫәпләп сығарып, шатландыҡ. Сөнки, әле генә эшләй башлауыбыҙға ҡарамаҫтан, килем аҡсаһы айлыҡ түләп тора торған һалымды, ер арендаһын ҡаплар һымаҡ. Үҙебеҙ өсөн "таҙа аҡса"ны әлегә әллә ни арттыра алмаһаҡ та, артабан һатырлыҡ тауар ассортиментын әкренләп үҫтерергә һәм байытырға етер һымаҡ тойолдо.

Бер нисә көндән магазинға (беҙ эш урыныбыҙҙы хатта "магазин" тип тә атап йөрөтә башлағайныҡ) электр селтәре вәкиле килде. Документтарҙы магазиндың тәүге хужаһы исеменән үҙебеҙгә күсертеп яҙҙырыуыбыҙҙы талап итте. Беҙ, тәжрибәһеҙ кешеләр, ысынлап та, уны-быныһын белмәгәнбеҙ икән. Әлбиттә, шулай булырға тейеш! Шунда уҡ хатабыҙҙы төҙәтергә тип электр селтәрҙәре ойошмаһына киттек. Беҙҙән ғариза ғына яҙырып алып, үҙҙәренең кәрәкле ҡағыҙҙарында магазиндың яңы хужаһының, йәғни, улымдың исемен генә яҙып ҡуйырҙар һәм шуның менән эш тә бөтөр тип уйлағайныҡ. Тик беҙгә, ни өсөндөр, электән үк булған электр бәйләнешен, ҙур ғына сумаға, баштан алып аҙағынаса, өр-яңынан монтажлап эшләргә тәҡдим иттеләр. "Беҙҙә электр бар бит, - тибеҙ. - Яңыһы кәрәкмәй". "Юҡ, шулай тейеш", - ти хужалар. "Ә элеккеһен шул килеш ҡалдырып, яңынан яһаған итеп күрһәтә алмайһыҙмы? - тип һораным аптырағас. - Магазин инде нисә көн эшләп тора бит..." Тегеләр риза булды. Документтар буйынса, беҙгә электр тогын "өр-яңынан һуҙҙылар" һәм аҡсаһын, әлбиттә, шуның өсөн тулыһынса алдылар. Быға, беҙҙән алдағы хужабикә эшләгән саҡта һәр ваҡыт нормаль булған йәшен ҡайтарғыс, "заземление"лар, ни өсөндөр, боҙоҡ тип табылды һәм уларын ҡабаттан эшләп ҡуйҙылар, әлбиттә, бушлай түгел. Ярай, быныһы менән дә килешеп, тынысландыҡ, буғай...

Әммә тын алырға ла өлгөрмәнек, тиерлек, киләһе "ҡунаҡ" - участка милиционеры килеп, оҙон итеп акт яҙып китте. Магазиныбыҙҙы, кәрәкле ойошма менән договор төҙөп, һаҡҡа ҡуйырға кәрәк булған икән. "Бәлки, кәрәк түгелдер?..." тибеҙ. "Юҡ, мотлаҡ!" - ти участка кесе лейтенанты ҡәтғи рәүештә. Бер ай ваҡыт бирҙе. "Һаҡ", тигән нәмәләре һаҡсылар үҙеге менән тоташтырылған автоматик сигнал бирә торған ҡиммәтле генә аппарат алып ҡуйҙырыуҙы ла үҙ эсенә ала икән. Ул ғына ла түгел, ай һайын билдәле бер сумманы уларға түләп торорға тейешбеҙ. Быныһын да эшләттек. Әйҙә, һаҡлаһындар, әгәр шулай тейеш икән.

"Һаҡсылар" менән бер үк ваҡытта тиерлек янғын һүндереүселәр ҙә килеп, акт төҙөнөләр һәм күпмелер хаҡҡа янғын хаҡында иҫкәртә торған сигнал биреүсе аппарат һатып алып ҡуйырға бойорҙолар. Югиһә, байтаҡ ҡына сумма штраф буласағы хаҡында ла иҫкәрттеләр. Янғын ваҡытында кешеләрҙе эвакуациялау тураһында схема ла эшләтергә ҡуштылар. Уныһы өсөн дә түләргә кәрәк икән! "Был киосҡыға барыһы өс-дүрт кеше генә һыя, инергә лә, сығырға ла бер генә ишек бит, уныһы нимәгә инде тағы?" - тип ҡарайым. "Так надо!" тиҙәр. "Ярай, надо так надо", - тинек...

(Дауамы 6-сы биттә).

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*



## КҮҘӘТЕҮҘӘР

***54-се күҙәтеүем.*** Әрмелә саҡта "Литературная газета"ла бер авторҙың шиғыры (авторын онотҡанмын) баҫылып, бер уҡыуҙа ятлап алғайным. Бына ул:

*Шел по лесу паренек,*
*Паренек кудрявый.*
*Споткнулся и упал*
*Об пенек корявый.*
*И про это про пенек,*
*Про пенек корявый.*
*Высказал он все что мог*
*Паренек кудрявый.*
*Раньше этот паренек*
*Говорил коряво.*
*Научил его пенек*
*Говорить кудряво.*

Ошо шиғырмы? Әллә һүҙ уйнатыуымы? Ҡыҫҡаһы, ҡайһы берәүҙәрҙең фекеренсә, бер-ике уҡыуҙа ятланған шиғыр ғына шәп шиғыр була. Киреһенсә лә булыуы бар бит. Әгәр ҙә шиғырҙың һәр юлында һөкләндерғыс, таң ҡалырлыҡ образдар, фекерҙәр булһа, уҡыусы шуларҙың йөгөнтөһөнә бирелеп, ҡалған юлдарын онотоуы ла бар бит. Әллә мин яңылышаммы? Әйткәндәй, иң аһнат ятланғаны - таҡмаҡтар.

***55-се күҙәтеүем.*** Бөгөн "Юлдаш" радиоһы егеттәре автомобилгә бәйле әңгәмә ҡорҙо. Элек машинаны йыуғандан һуң уның двигателе шәп эшләй башлағанын күреп аптырап торғайным. Өлкәндәр: "Машина шулайтып йыуыуыҫыға рәхмәтен белдерә, ҡыуанысынан шәп эшләй", - тип аңлата ине. Хәҙер инде был күренештең сәбәптәрен икенсе төрләрәк уйлайым. Машинаны йыуған саҡта уның моторына, кузовына йәбешеп ҡалған һыу бөртөксәләре двигатель ҡыҙыулығы, ҡояш нуры аҫтында тиҙ генә парға әйләнә, был осраҡта ниндәйҙер кимәлдә һыуҙың кислородҡа һәм водородҡа бүленеү процесы ла бара. Тимәк, машина тирәһендә үҙенсәлекле микрофлора барлыҡҡа килеп, һауаны таҙартыусы фильтр аша двигателгә кислород һәм водород барып эләгәләр. Ә кислород менән водородтың ниндәй яғыулыҡ икәнен беләбеҙ. Уларҙан хатта шартлатҡыс бомба яһайҙар. Әйткәндәй, һыу менән йөрөүсе автомобилдәр ҙә шул принцип буйынса эшләй, йәғни унда махсус ҡоролма һыуҙы ($H_2O$) водородҡа һәм кислородҡа айыра һәм двигателгә яғыулыҡ итеп бирә. Тағы ла ямғыр ваҡытында машинағыҙҙың тартыу көсө артҡанын тойғанығыҙ бармы?

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

**(Дауамы бар).**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔ Республика Хөкүмәте бойороғо буйынса, Башҡортостанда 2018 йылдың 31 декабренә тиклем өс балалар йортон үҙгәртеп ҡороу тамамланырға тейеш. Баҫылып сыҡҡан документҡа ярашлы, Стәрлетамаҡ, Белорет һәм Өфө балалар йорттарын бер дәүләт бюджет һаулыҡ һаҡлау учреждениеһына берләштерәләр. Үҙгәртеп ҡороу эше бюджет аҡсаһын тотоноуҙың һөҙөмтәлелеген арттырыу маҡсатында уҙғарыла, тиелгән хәбәрҙә. Шулай уҡ бойороҡта Өфөлә урынлашасаҡ яңы Республика махсуслаштырылған балалар йортоноң штаттағы хеҙмәткәрҙәр һаны билдәләнгән - 503,25 берәмек.

✔ Республиканың юғары уҡыу йорттары Ҡытай Халыҡ Республикаһы менән әүҙем эшмәкәрлек алып бара. Атап әйткәндә, һүҙ Башҡорт дәүләт университеты тураһында бара. Вузда Рәсәй-Ҡытай бизнес-инкубаторы булдырылған. Унда студенттар бизнес төҙөү буйынса Ҡытай алымдарын өйрәнә, Ҡытай Халыҡ Республикаһында стажировкалар ҙа ҡаралған.

✔ Салауат башҡорт драма театрының тарихы тураһында "Ете ҡыҙ театры" фильмы Benicia Film Festival кинофестивалендә (Бениш, Калифорния, АҠШ) еңеүсе булды. Режиссер Кирстен Гайнеттың эше "Best Art in Film"/ "Сәнғәт тураһында иң яҡшы фильм" номинацияһында иң яҡшыһы тип танылды. Тасманы ҡарау 2018 йылдың 1 сентябрендә Benicia Veteran's Hall уҙа. Бер йыл эсендә фильм 10 наград алды һәм 23 фестивалдә (Ҡазан, Һиндостан, Төркиә, Америка) ҡатнашты.

✔ Башҡортостандың йәш дизайнерҙары Һамарҙа "IVOLGA Fashion Fest" фестивалендә үҙҙәренең коллекцияһын күрһәтте һәм уңышҡа өлгәште. Финалға 14 коллекция ғына саҡырылғайны, уларҙың икәүһе - республикабыҙҙан: Учалынан Лира Аллаярованың "Бәхет нуры" кейеҙ коллекцияһы һәм М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты студенттары Ильмира Моталованың һәм Тәнзилә Байсуринаның "Сафлыҡ" коллекцияһы.

✔ Америка дарыуҙары Рәсәйҙең яуап итеп импорт һалымдары индереләсәк тауарҙар исемлегенә инмәй, тип аҫыҡлыҡ индерҙе иҡтисади үҫеш министры Максим Орешкин. Һалым Рәсәй баҙарында аналогтары булған тауарҙарға ғына ҡағыла, тип айырып әйтте министр. Өҫтәмә һалым һалынасаҡ Америка тауарҙары исемлеген Иҡтисади үҫеш министрлығы яҡын көндәрҙә әҙерләй.

***✓ Ағиҙел яры төҙөлөшө ваҡытынан алда бара. "Унда тәжрибә участкаһы эшләнеп бөткән - бик ҡыҙыҡлы, матур, хатта урыны менән һоҡланғыс тиер инем. Үҙенең атмосфераһы барлыҡҡа килгән", - тип белдерҙе Рөстәм Зәки улы.***



БАШ ҠАЛАМ

**Нисектер сәйерерәк яңғырай, ҡолаҡҡа ла ятышлы түгел һымаҡ. Ә шулай ҙа, быйыл беренсе тапҡыр Өфөлә ойошторолған тарихи мөхитте тергеҙеү фестивале - үҙе бер мөғжизә донъяһы ул.**

# ТАРИХИ МӨХИТ...

## тергеҙелә

2015 йылда Һамар ҡалаһында барлыҡҡа килгән сара, ниһайәт, Өфөгә лә килеп етте һәм үҙенең эшен башланы. Әйтергә кәрәк, ул ирекмәндәр башланғысында тормошҡа ашырыла һәм бер нисә, шул иҫәптән ҡала халҡының тарихи-мәҙәни ҡиммәткә эйә объекттарҙы һаҡлау процесына йәлеп итеү маҡсатын алға ҡуя. Әлеге көндә "Том Сойер Фест - Өфө" баш ҡаланың Гоголь урамындағы 24-се ағас йортто тергеҙеү менән шөғөлләнә. Эштәр кискеһен һәм ял көндәрендә башҡарыла. "Беҙ ирекмәндәр менән беренсе осрашыуҙа исемлек төҙөнөк һәм барлыҡ пункттар буйынса үтеп, үҙ көсөбөҙ һәм үҙ ҡулыбыҙ менән тергеҙә алған объектҡа туҡталдыҡ. Тарихсы Владимир Захаров йорттоң беренсе хужаһының хәҙер Мәскәүҙә йәшәгән варистарынан элекке фотографиялар һорап алды. Ошо фотолар һәм Өфө ғалимдарының крайҙы өйрәнеү буйынса хеҙмәттәре нигеҙендә фасадтың архитектура-колористика биҙәлешен эшләнек", - ти фестивалдең координаторы Мария Тарасенко.

Ирекмәндәр көсө менән тергеҙелгән йорт элек статский советник Николай Рябининдың усадьбаһы була. Ул XX быуаттың беренсе яртыһында төҙөлгән һәм баш ҡаланың ағастан төҙөлгән биналарының өлгөһө булып тора. Активистар декорҙың юғалған элементтарын тергеҙергә, серегән таҡталарҙы яңыларына алыштырырға һәм өйҙө элекке төҫөнә - ҡыҙғылт-көрәнгә яҡын төҫкә буятырға ниәтләй.

Ә бит, уйлап ҡараһаң, шәп фестиваль! Бары тик был эшкә башҡорт ирекмәндәренә лә ҡушылырға, башҡорт халҡына, уның тарихына, билдәле шәхестәренә бәйле тарихи йорттарҙы күркәмләндерә башларға ғына кәрәктер, моғайын.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҠАЛАБЫҘ ҮҪҺЕН...

**Өфөлә ҡаланы үҫтереү инициативаларына арналған форум үтте. Уның эшендә республика Башлығы Рөстәм Хәмитов, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай Рәйесе Константин Толкачев, ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов, республика парламенты депутаттары, эре сәнәғәт предприятиелары, фән, мәҙәниәт, йәмәғәт структуралары ойошмалары вәкилдәре ҡатнашты.**

"Өфө - административ үҙәк кенә түгел, Башҡортостан иҡтисадының, фәненең, мәғарифының һәм мәҙәниәтенең төп көсө лә. Биш йыл эсендә республика билдәле ҡаҙаныштарға өлгәште: тулайым төбәк продукты 1,5 триллион һумға етте, инвестициялар күләме 1,5 триллион һумдан артып китте", - тип билдәләне Рөстәм Зәки улы.

Төбәктә хеҙмәт баҙары тотороҡлана, агрокомплекс үҫешә, бюджеттың өстән ике өлөшө социаль мәсьәләләрҙе хәл итеүгә йүнәлтелә. Һуңғы йылдарҙа мәктәпкәсә белем биреү селтәре киңәйә, 3 йәштән ете йәшкә тиклемге балалар өсөн балалар баҡсаларына сират бөтөрөлгән. Былтыр Башҡортостан мәктәптәрендә 12 мең урын сафҡа индерелһә, быйыл тағы ла 9 мең өҫтәләүе көтөлә. 2025 йылға мәктәптәр тулыһынса бер сменалы уҡытыуға күсәсәк. Дауаханалар, фельдшер-акушер пункттары ремонтлана, сафҡа индерелә. Йәш, күп балалы ғаиләләргә ярҙам күрһәтеү ысулдары киңәйтелә, тыуым дәртләндерелә.

Рөстәм Хәмитов һаулыҡ һаҡлау мәсьәләһенә айырым иғтибар бүлде. Мәҫәлән, быйыл Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһына яңы поликлиника төҙөлә башлаясаҡ. Республика кардиология үҙәгендә лә заманса техника менән йыһазландырылған яңы корпустар төҙөлгән. Онкология диспансерында яңы корпус сафҡа индерелгән. Республика Башлығы велоюлдар төҙөү программаһын да хупланы. "Программа ресурстар талап итә. Ҡала хакимиәте башлығының бер нисә йөҙ миллион һорап яҙған хаты бар, әйҙәгеҙ, төҙәйек, бер ҡаршылығым юҡ. Тик проекттар ентекле әҙерләнгән, ныҡлап иҫәпләнгән һәм анализланған булһын", - тине ул.



Ағиҙел яры төҙөлөшө ваҡытынан алда бара. Темптар яйлатылмаһа, объектты килһе йыл һуңына тапшырыу мөмкинлеге бар. "Унда тәжрибә участкаһы эшләнеп бөткән - бик ҡыҙыҡлы, матур, хатта урыны менән һоҡланғыс тиер инем. Үҙенең атмосфераһы барлыҡҡа килгән", - тип белдерҙе Рөстәм Зәки улы. Был объект республика ойошторолоуҙың 100 йыллығына арналған юбилей төҙөлөштәре исемлегенә инә.

Нуғай ауылы эргәһендә тимер юл аша сыға торған ерҙә транспорт сиселешен төҙөү үтенесе менән бик күп мөрәжәғәттәр килә, тип билдәләне төбәк етәксеһе һәм тиҙ арала яңы, оптималь, һәйбәт проект эшләү бурысын ҡуйҙы. Шулай уҡ Өфөлә яңы футбол стадионы төҙөү мәсьәләһе лә көн үҙәгендә тора. Бөгөн Түбәнге Новгородта, Саранскиҙа, Волгоградта икенсе лига командалары суперзаманса стадиондарҙа уйнай, унда 20-40 мең тамашасы килә. "Өфө" футбол клубы өсөн яңы стадион проектын Белоруссияла "ҡарап ҡайткандар". Ул 15-16 мең тамашасыны һыйҙырыр тип күҙ уңында тотола. Проекттың хаҡы 3-4 миллиард һумға баһалана - был Рәсәй ҡалаларында футбол буйынса донъя чемпионаты уңайынан төҙөлгән стадиондарҙан биш тапҡырға осһоҙораҡ. "Республика ошондай объекттар төҙөү мөмкинлегенә эйә, - тине Рөстәм Хәмитов. - Проект һәм пландар бар, беҙ уларҙы бойомға ашырырбыҙ тип ышанам".

# БЕҘ КОРРУПЦИЯҒА ҠАРШЫ

**Башҡортостан Башлығы Хакимиәтендә Коррупцияға ҡаршы эш итеү идаралығы булдырылды. Тейешле Указға Рөстәм Хәмитов ҡул ҡуйҙы.** Шулай итеп, властың төрлө кимәлдәрендә коррупцияға ҡаршы көрәш буйынса эш көсәйтелә. Был республикала ошо йүнәлештәге тәүге аҙымдар түгел. Әйтәйек, бер нисә республика законына үҙгәрештәр индерелде, уларға ярашлы муниципаль хеҙмәткәрҙәр Башҡортостан Башлығына килемдәре һәм сығымдары тураһында мәғлүмәттәр бирергә тейеш. Хоҡуҡ боҙоуҙар асыҡланһа, төбәк етәксеһе урындағы үҙидара органына дөрөҫ булмаған мәғлүмәттәр тапшырған чиновниктың вәкәләттәрен ваҡытынан алда туҡтатыу тураһында ғариза менән мөрәжәғәт итергә тейеш. 2017 йыл йомғаҡтары буйынса, 33 граждан һәм 133 муниципаль хеҙмәткәр яуаплылыҡҡа тарттырылған. Атап әйткәндә, муниципаль вазифаларҙы һәм муниципаль хеҙмәт вазифаларын биләгән 30 кеше ышанысты юғалтыу менән бәйле эшенән бушатылған. Тикшереү һөҙөмтәләре буйынса республиканың төрлө райондарында бер нисә ауыл советы башлыҡтары һәм депутаттары үҙ вәкәләттәрен юғалтҡан.

# ҠОРБАН БАЙРАМЫ ЕТӘ

**Зинино ауылы эргәһендәге "Каруан" сауҙа үҙәге территорияһында Өфө ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов етәкселегендә Ҡорбан байрамына әҙерлек буйынса кәңәшмә ултырыш үтте.**

Сара барышында ҡала территорияһына рөхсәте булмаған ҡорбанлыҡ малдарҙы индереүҙе тыйыу, "Каруан" сауҙа үҙәгенән Өфөнөң төп мәсеттәренә тиклем йәмәғәт транспортының маршрутын ойоштороу, ҡорбанлыҡ малдарҙың биологик ҡалдыҡтарын утилләштереү, йәмәғәт тәртибен тәьмин итеү, йәмәғәт туҡланыуы нөктәләрен, тиҙ ярҙам хеҙмәтенең эшмәкәрлеген ойоштороу мәсьәләләре ҡаралды. Баш ҡаланың 13 мосолман дини ойошмаһы берҙәм майҙансыҡта ҡорбан саласаҡ. Уға тиклем улар өсөн ғәмәли семинар ойоштороласаҡ.

# БАЛАЛАР ҘА ЭШЛӘЙ

**Муниципалитетта Өфө ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов рәйеслегендә балиғ булмағандар эштәре һәм уларҙың хоҡуҡтарын һаҡлау буйынса комиссияның ултырышы үтте.**

Йәйге осорҙа балиғ булмағандарҙы эш менән тәьмин итеү былтырғы кимәлдә һаҡлана, килешеүҙәр нигеҙендә 4548 бала эшкә урынлашҡан, ҡала мәктәптәрендә баҡытлыса 4000 самаһы уҡыусы эшләгән. Эшкә урынлашыу һәм хеҙмәт баҙары мәсьәләләре буйынса шәхси кәңәш һорап, 4202 кеше мөрәжәғәт иткән, 3833 йәш граждангә эшкә урынлашыуҙа ярҙам күрһәтелгән. Йәштәрҙе эш менән тәьмин итеү үҙәге белгестәре 1900 кешегә оҫталыҡ дәрестәре, семинарҙар үткәргән, 840 кеше вакансиялар йәрминкәһендә ҡатнашҡан. Уҡыусылар, студенттар һәм үҫмерҙәр клубтары тәрбиәләнеүселәре араһында "Иң ҡыҙыҡ һөнәр" ҡала конкурсы үткәрелгән. Кәңәшмә барышында шулай уҡ балиғ булмағандар тарафынан енәйәт ҡылыу торошо мәсьәләһе лә ҡарала. Йылдың 7 айында балиғ булмағандар тарафынан йәки улар ҡатнашлығында 140 енәйәт ҡылынған, был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 4,1 процентҡа кәмерәк. Сынтимер Биктимер улы белдереүенсә, был мәсьәләләр муниципалитеттың даими контролендә тора һәм яуаплы белгестәр ошо эшкә айырым иғтибар бүлә.

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Өфөлә тәүге тапҡыр "Ҡымыҙсылар-2018" фестивале ойошторола. Фестивалдә Башҡортостандың төрлө райондарынан 15-тән ашыу ҡымыҙ етештереүсе үҙ ҡымыҙын тәҡдим итә. Фестиваль 19 августа Якутов исемендәге паркта старт ала. Иртәнге 11-ҙә ҡымыҙ йәрминкәһе башлана, ул кискә ҡәҙәр дауам итә. Сараны рәсми асыу тантанаһы сәғәт 4-кә билдәләнгән. Унда республиканың төрлө мөйөштәренән килтерелгән ҡымыҙҙың тиҫтәләгән төрөн тәмләп ҡарарға мөмкин.

✓ Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамблен кем етәкләйәсәге билдәле булды. Конкурс йомғаҡтары буйынса директор вазифаһына быға тиклем директор урынбаҫары булып эшләгән Хәлимов Рәфис Иҙиәт улы еңеүсе булды.

✓ 18 августа, Башҡортостандың баш ҡалаһында бал йәрминкәһе уҙғарыла. Өфөләрҙең һәм ҡала ҡунаҡтарының республиканың төрлө райондарынан килтерелгән татлы ризыҡ һатып алыу мөмкинлеге бар. Теләге булған һәр кемде иртәнге сәғәт 9-ҙан Якутов исемендәге паркта көтәләр.

✓ Өфөлә 2018 йылдың 28-30 ноябрендә V "Өфө-Ладья. Арт. Кәсептәр. Сувенирҙар" күргәҙмә-фестивале үтә. Тейешле бойороҡ рәсми хоҡуки мәғлүмәт интернет-порталында баҫылып сыҡҡан. Район хакимиәттәренә оҫталарға һәм халыҡ художество кәсептәре ойошмаларына сарала ҡатнашыуҙа булышлыҡ итергә кәңәш бирелә. Экспозиция ВДНХ-Экспо майҙансығында урынлашасаҡ. Баҫылған саралар планына ярашлы, күргәҙмә даирәләрендә фольклор фестивале һәм "Оҫта - алтын ҡулдар" конкурсы була.

✓ Башҡортостанда Социаль торлаҡ программаларын тормошҡа ашырыу буйынса идаралыҡ төҙөргә күҙаллайҙар. Башҡортостандың Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитеты рәйесе урынбаҫары Егор Родин һүҙҙәренсә, идаралыҡ хеҙмәткәрҙәре граждандарҙы социаль торлаҡ программаларына тороу мәсьәләләре буйынса мәғлүмәт һәм кәңәш бирәсәк, шулай уҡ документтар менән эштә ярҙам итәсәк.

✓ 2030 йылға Берҙәм дәүләт имтиханы эштәрен тикшереүҙе компьютерға ҡушыуҙары ихтимал. Был ваҡытҡа яңалма интеллекттың үҫеше уҡыусыларҙың тулы яуаптарын баһаларға мөмкин булған кимәлгә етер тип көтөлә. Әле Рәсәйҙә имтихандарҙы 40 мең белгес тикшерә, ә яһалма интеллект уларҙың эшен еңеләйтә алыр ине.

*КӨНАУАЗ*

**Ошо көндәрҙә Өфөлә мәғариф буйынса республика август кәңәшмәһе уҙғарылды. Төшкә тиклем кәңәшмәлә ҡатнашыусылар алты фекер алышыу майҙансығында төрлө темалар буйынса эшләне һәм пленар ултырыш барышында һығымталар менән танышты. Педагогтарҙың август кәңәшмәһендә быйыл БР Башлығы Рөстәм Хәмитов, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев, БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов, БР мәғариф министры Гөлназ Шафиҡова, РФ Мәғариф һәм фән министрлығы вәкиле Лариса Фальковская, район хакимиәттәре башлыҡтары һәм уларҙың урынбаҫарҙары, мәғариф хеҙмәткәрҙәре, педагогтар ҡатнашты.**

# ХӘҮЕФҺЕҘ МӨХИТ...

## һәр мәктәптә булдырылһын



Быйылғы август кәңәшмәһенең төп темаһы "Заманса хәүефһеҙ белем биреү мөхитен булдырыу" тип билдәләнгәйне. Был тема беренсе фекер алышыу майҙансығында ҡаралды һәм унда үткән уҡыу йылы барышында республикала мәғариф учреждениеларын заманса шарттарға яраҡлаштырып төҙөкләндереү, яңы биналарҙы ҡулланыуға индереү өсөн бүленгән аҡса күләме, эштең һөҙөмтәләре тураһында һүҙ барҙы. Кәңәшмәнең башҡа фекер алышыу майҙансыҡтарында ла көнүҙәк мәсьәләләр буйынса тынәрәк ҡорҙар ойошторолдо. "Белем биреү мөнәсәбәттәренең нисек тулы хоҡуҡлы ҡатнашыусыһы булырға?" тигән фекер алышыу майҙансығын, мәсәлән, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты Эльвира Айытҡолова алып барҙы, ул "Мәғарифты үҫтереү" милли проекты тураһында һөйләне. Артабан РБ Мәғариф министрлығы эргәһендәге Йәмәғәт советы рәйесе, Профессиональ кадрҙарҙың квалификацияһын үҫтереү институты ректоры Лида Исарғакова төрлө дәүләт учреждениелары эргәһендә булдырылған Йәмәғәт советтары тураһында мәғлүмәт еткерҙе.

Был ойошмалар мәғариф, мәҙәниәт, социаль хеҙмәтләндереү өлкәһенә ҡараған учреждениеларҙағы шарттарға бойондороҡһоҙ баһа биреү өсөн ойошторола. "Нескәлеге шунда: мәғариф өлкәһендәге Йәмәғәт советы составына педагогик белемлеләр инә алмай. Иң мөһиме, ата-әсәләр мотлаҡ рәүештә ошо Йәмәғәт советтарында булырға тейеш, сөнки улар ошо процестың тулы хоҡуҡлы ҡатнашыусылары", - тине Лида Сәғит ҡыҙы сығышында. Билдәләнеүенсә, мәғариф өлкәһенә ҡағылышлы булмаған кешеләр белем усағындағы шарттарҙы ғына баһаларға тейеш, белем биреү сифатын түгел. Ә шулай ҙа мәктәп эшендә ата-әсәләрҙең роле ниндәй булырға тейеш, улар мәктәп коллективы алдына ниндәй талаптар ҡуя ала, уларҙың был тәңгәлдә ниндәй хоҡуҡтары бар? Ошондайыраҡ һорауҙарға яуап алғы килгәйне, әлбиттә. Фекер алышыуҙа бындай мәғлүмәттәр яңғырамаһы. Ни тиһәң дә, мәғариф учреждениеларында булдырылған шарттарҙы контролдә тотоп һәм баһалап ҡына (тукланыу, синыфтарҙың төҙөклөгө, таҙалыҡ һ.б.) күп мәсьәләләрҙе хәл итеп булмай бит.

БР мәғариф министрының беренсе урынбаҫары Илдар Мәүлетбирҙин алып барған "Һәр баланың һәләтен һәм талантын асыҡлау һәм үҫтереүгә ярҙам итеүҙең һөҙөмтәле системаһын формалаштырыу" тигән майҙансыҡта талантлы уҡыусыларҙы олимпиада, ярыштарға ҡатнаштырыу, мәктәп һәм вуздарҙың бергә эшләүен яйға һалыу, уҡытыу эшенә финанс грамоталылығын индереү кеүек мәсьәләләр тураһында әңгәмә ҡорҙолар. "Талантлы балаларҙы асыу, һәр яҡлап та үҫешкән шәхес тәрбиәләү маҡсаты күптән, совет заманынан билдәләнгән, - тине Республика политехник лицей-интернаты директоры Римма Ғөбәйҙуллина фекер алышыу тамамланғас. - Бер осор балаға белем биреүҙе генә алға ҡуйып, тәрбиәне онотоп торҙолар ҙа, хәҙер кире шуға ҡайтабыҙ. "Предуниверсариум" тигән яңы терминға килгәндә, был мәктәп һәм вуздың тығыҙ хеҙмәттәшлек итеүе. Беҙ 2016 йылдан алып Өфө дәүләт авиация техник университеты менән бәйләнеш тотабыҙ һәм уларҙың уҡытыусылары беҙҙең уҡыусыларға дәрестәр үткәреп тора, шуға был тәңгәлдәге эш тә әллә ниндәй билдәһеҙ нәмә түгел. Ғөмүмән, әле ҡор барышында телгә алынған бөтә йүнәлештәр буйынса ла эштең нигеҙе бар, тик ҡайһы өлкәгә ныҡыраҡ иғтибар бүлеү кәрәклеген билдәләү фарыҙ..."

Август кәңәшмәһенең пленар ултырышы фекер алышыу майҙансыҡтарындағы эштәр тамамланғас башланды. БР Хөкүмәте Башлығы Рөстәм Хәмитов үҙ докладында 2023 йылға ил тулыһынса цифрлы уҡытыу-методик комплекстар системаһына күсергә, ә Президенттың май указына ярашлы, 2024 йылға Рәсәй технологик грамоталылыҡ йәһәтенән алдынғылар рәтенә инергә тейешлеге тураһында һөйләне. Был йүнәлештәрҙә республикала эштәр тейешле кимәлдә алып барылмай, тип билдәләне ул. Республикала техник йүнәлештә әлеге көндә уҡыусыларҙың ни бары 10 проценты ғына етди шөғөлләнә һәм өс кенә балалар технопаркы эшләй.

- Күптән түгел муниципаль райондарҙың береһендә эш сәфәрендә булдым. Унда нимә күреп ҡайттым? Хакимиәт башлығы: "Беҙҙең сығарылыш уҡыусылары күрше республикаларға уҡырға китә", - ти. "Ә һеҙ беҙҙең университеттарҙың ректорҙары менән бәйләнешкә индегеҙме?" Уларҙы районға саҡырығыҙ, уҡыусылар алдында сығыш яһаһындар, университеттары тураһында һөйләһендәр, унда ниндәй эштәр алып барылыуын күрһәтһендәр", - тип әйткәс, "Юҡ, улай итеп ҡарағаныбыҙ юҡ", - тип яуап бирҙе. Ни өсөн? Мин тағы бер тапҡыр ректорҙарға мөрәжәғәт итәм. Әгәр ҙә беҙ райондарҙағы уҡыусыларҙың 50-60 проценты ситкә уҡырға китеүен күҙәтәбеҙ икән, был һеҙҙең эшләп еткермәүегеҙ тип баһалана. Шулай уҡ муниципалитеттарҙың да етешһеҙлеге был, - тигән тәнҡит һүҙҙәрен еткерҙе Рөстәм Зәки улы кәңәшмә барышында. Артабан билдәләнеүенсә, Хөкүмәт технопарктар, лабораториялар, инновацион майҙансыҡтар төҙәү өсөн бөтә шарттар булдырырға әҙер, ни бары вуздарҙан тәҡдимдәр кәрәк. Йәштәр һөнәр үҙләштереүгә етди ҡарашта булһын өсөн Республика Башлығы стипендияһын колледж уҡыусыларына 2300 һумға тиклем, вуз студенттарына 5750 һумға, аспиранттарға 7000 һумға тиклем арттырыу ҡаралған. Республика Хөкүмәте ошо рәүешле төбәк өсөн йәш кадрҙарҙы мәктәп эскәмйәһенән тәрбиәләү, үҙебеҙҙә сифатлы белем биреү, һөнәри йәһәттән үҫтереү йәһәтендә ҙур ярҙам күрһәтергә әҙер. Ни бары инициатива түбәнге звенонан килергә тейеш, шул саҡта эш тә һөҙөмтәлерәк буласаҡ.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Август кәңәшмәһенән бер көн алда башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары, мәктәп етәкселәре менән берлектә милли мәғарифҡа арналған "Туған тел: уҡытыу тәжрибәһе һәм уҡытыу методикаһын камиллаштырыу" донъяуи кафе форматындағы матур сара уҙғарылғайны (ул турала гәзиттең 32-се һанында мәҡәлә баҫылды). Шуғамылыр, пленар ултырышта бөгөн һәр кемдең телендә булған милли мәғариф темаһы бер һөйләм менән түгел, бер һүҙ менән генә лә телгә алынманы. Үҙе лә милли мәғарифҡа арналған фекер алышыу майҙансығында ҡатнашҡан БР мәғариф министры үҙ докладында ошо эштең һөҙөмтәһе тураһында иҫкә алып үтһә, бер ҙә хилаф булмаҫ ине лә бит. Бөгөн педагогик берләшмәләрҙә йәш быуындың тәрбиәүи аспекттары, психологик сәләмәтлеге, рухиәте борсоуға һала икән, уның нигеҙе туған телде белеүгә, ғаиләтәрбиәһенә бәйле булыуын аңлау кәрәктер шулай ҙа...**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Гайморит

❖ 1-әр балғалаҡ Вишневский майы, бал, шулай уҡ һуған, каланхоэ, алоэ һуты алып, шуға 1 балғалаҡ цикламен тамыры һуты өҫтәргә. Мамыҡты манып, ярты сәғәткә танау тишектәренә ҡуйырға. 20 көн дауаланғандан һуң гайморит ҡыуышлығы таҙара.

### Һыуыҡ тейгәндә

❖ Яран гөләнөң 1 ҡалаҡ сәскәһе һәм япраҡтарына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 7-8 сәғәт төнәтергә. Һөҙөргә һәм көнөнә 2-3 тапҡыр танау ҡыуышлығын сайырға. Тамаҡ шешһә, тамаҡты сайҡатырға ла була. 2-3 көндән сир үтә.

### Аҡ балсыҡ

❖ Тын ҡыҫылғанда, ашҡаҙан-эсәк тракты, ашҡаҙан аҡты, боғаҡ биҙҙәре шешкәндә аҡ балсыҡ ярҙам итер. 2 балғалаҡ балсыҡҡа ярты литр ҡайнаған һыу ҡойоп, яҡшылап болғатырға, көн дауамында тигеҙ өлөштәр менән 2-3 тапҡыр эсергә. Эсер алдынан төнәтмәне болғатырға. Көн һайын яңынан әҙерләргә.

### Петрушка

❖ Стенокардия, аяҡтар шешеүенән дауа: 2 ҡалаҡ кипкән петрушка йәки петрушка тамырына ярты литр һыу ҡойоп, 5 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 2-шәр ҡалаҡ эсергә. Дауаланыу курсы - 1 ай. Дауаланыу курстарын көҙ һәм яҙ үткәреү яҡшыраҡ. Төнәтмәне һаҡлап булмай, көн һайын яңыһын әҙерләгеҙ.

### Атеросклероз

❖ Әстерхан сәтләүеген ярып, уның бүлкәләрен алығыҙ. 1 стакан сырыеға ярты литр араҡы өҫтәргә, 2 аҙна бүлмә температураһында ҡараңғы урында тоторға, һөҙөргә. 10 тамсы төнәтмәне көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1 стакан һыуға өҫтәп эсергә. Дауаланыу курсы - 10 көн. Йылына 3 курс үтергә. Был төнәтмә баш мейеһе ҡан тамырҙарының ҡапыл ныҡ ҡыҫылыуы һөҙөмтәһендә көсләо баш ауыртыуынан да файҙалы.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ "Элек рэкеттарға күпмелер сумма бирһәк, улар, үҙҙәре әйткән ваҡыты килеп етмәйенсә, башҡаса борсоп та йөрөмәй торғайнылар. "Охрана" вазифаһын да үтәнеләр... Хәҙер барса яҡтан ҡыҫтылар, хатта тын алырға ла ирек юҡ...



*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# БӘЙҒӘМБӘРҘӘР

## Мусаның Фирғәүенде еңеүе

Осрашыу билдәнгән көнгә Фирғәүен иң көслө сихырсыларын саҡыра, ләкин Муса уларҙы, фокустарығыҙ фаш ителәсәк, өмөттәрегеҙ аҡланмаясаҡ, тип иҫкәртә. Сихырсылар көстәрен күрһәтеү өсөн ҡулдарындағы бауҙарҙы һәм таяҡтарҙы ергә ырғыта.

Улар быларҙың сихырына буйһоноп, йыландай борғолана. Мусаның күңелен шом баҫа, сөнки ул сихыр менән Алла билдәләрен кешеләр айыра алмаҫ, сихырсылар халыҡты үҙҙәре ягына ауҙарып, имандан аҙҙырыр, тип ҡурҡа. Шунда Бөйөк Илаһ Мусаға: "Ҡурҡма, һин уларҙың алдауын еңәсәкһең! Уң ҡулыңдағы таяғыңды ергә ырғыт, ул тегеләрҙең сихыры барлыҡҡа килтергән нәмәләрҙе йотасаҡ. Сихырсыға бөхет юлдаш түгел", - тип тынысландырған.

Сихырсылар үҙҙәренең көсһеҙлеген аңларға мәжбүр була һәм Алла билдәһе барлығына ышана. Улар шунда уҡ үҙҙәренең ялған аллаларға табынып, көсһеҙҙәрҙе кәмһетеп йәшәп үткәргән ҡылыҡтарынан баш тартып, бер Алла ғына булыуын таный.

Фирғәүен Мусаның динен ҡабул иткән кешеләрен, ошоға тиклем үҙенә буйһонһалар ҙа, Муса менән бер һүҙле булыуҙа ғәйепләй. Асыуынан ярһып, үкенеүселәрҙе хыянатта ғәйепләп, быныһ өсөн ҡаты язаға тарттырыу менән янай. Ҡулдарын, аяҡтарын киҫеп, иң яуыз юлбаҫар кеүек тәрегә ҡағып үлтертәсәкмен, тип ҡурҡыта. Ләкин тегеләр нык тора һәм Алланың үҙҙәренә ошо ауыр мәлдә сабырлыҡ һәм тоғролоҡ ебәреүен ялбарып доға ҡыла. Ибн-Аббас раҫлауынса, был мәл көндөң тәүге яртыһында тылсым көсөнә эйә сихырсылар дингә ышаныуы өсөн төштән һуң ғазап сигеүселәргә әүерелә.

Фирғәүен Мусаның халыҡты иманға саҡырыуын төрлөсә инҡар итергә тырыша. Исраил халҡы варисҭарын ҡаты язаға дусар итеп, уларҙы ҡырып бөтөрөргә уйлай. Исраилдар үҙҙәренең байрамын үткәреү өсөн ҡаланан сығырға рөхсәт һорағас, теләмәй генә ризалыҡ бирә. Ә уның иҙеүенән ыҙаланған Исраил халҡы ҡаланан төндә генә китә һәм был ерҙәрҙән бөтөнләй ҡасырға ҡарар итә. Быны белеп ҡалған Фирғәүен ажар йыртҡыстай ярһый һәм уларҙы тотоп, иң ҡаты язаға тарттырырға бойора. Фирғәүен ғәскәре Исраил варисҭарын диңгеҙгә ҡыҫырыҡлаған иң хәүефле мәлдә, барыһы ла ҡаушап ҡала, ләкин Мусаға юғарынан: "Таяғың менән икегә ярылғансы диңгеҙгә һуҡ", - тигән фарман килә. Ул һуға һәм диңгеҙ ҡап уртаға бүленеп, халыҡҡа юл асыла. Исраил кешеләре икенсе ярға сығып бөткәнсе тауҙай бейек ике тулҡын стена кеүек ҡалҡып тора. Шулай итеп, Алланың ҡөҙрәте менән Исраил халҡы ҡотола, - мәкерле Фирғәүендең ғәскәре диңгеҙгә батып үлә.

Шулай итеп, ошоноң менән бәйғәмбәрҙәр тарихын тамамлайбыҙ. Бәйғәмбәрҙәрҙең һәм илселәрҙең барлығына ышаныу - ислам диненә ышаныуҙың алтынсы терәге тиҙәр. Кеше уларҙың барлығына ышанмай тороп, Аллаһҡа ышанам тип әйтә алмай. Аллаһы Тәғәләнең бәйғәмбәрҙәренә һәм уларҙың иң һуңғыһы Мөхәммәт бәйғәмбәр алып килгән ҡанундарға ышанмайынса, бәрәү ҙә үҙен хаҡ диндәмен тип таный алмаясаҡ. Ҡөрьәндә: "Бәйғәмбәребеҙ һәм динлеләр Аллаһҡа ышандылар һәм Аллаһ тарафынан ебәрелгән бар нәмәне ҡабул ҡылдылар. Уларҙың барыһы ла Аллаһҡа, Уның фәрештәләренә, Уның бәйғәмбәрҙәренә ышанды", - тиелә. Бәйғәмбәрҙәр тормошо тасуирланған хикәйәттәр ғилемле кешеләр өсөн рухи аҙыҡ ул. Был хикәйәттәр йөрәктәрҙе дауалай, изге эштәргә дәртләндерә, ваҡиғалар һәм күренештәрҙең асылын аңларға, рухи мираҫты хәтерҙәребеҙҙә тоторға ярҙам итә. Аҡылы булғандар уларҙан оло фәһем алыр, тип ышанабыҙ.

(Аҙағы).

*ЗАМАН ҒӘЛӘМӘТТӘРЕ*

# АЛЫПҺАТАР БУЛЫП ҠАРАНЫМ,

## йәки Был эш һәр кемдең дә ҡулынан килмәйҙер шул



*Мин дә, атайым кеүек, оҫта ҡуллы булырмын...*

**(Башы 3-сө биттә).**

"Магазиныгыҙҙа бушаған ҡатырға ҡумталарҙы, сүп-сарҙы ҡайҙа түгәһегеҙ?" - тип һораны тағы бер вәкил. "Машинамдың багажнигына һалып, өйөмә алып ҡайтам", тинем. "Ә артабан нишләтәһегеҙ?" "Өй янына килгән ҡый түккес машинаға тейәп ебәрәм"... Ҡыҫҡаһы, улай ярамаған булып сыҡты. Улар менән дә рәсми килешеү төҙөп, ай һайын билдәле бер сумма взнос түләп, магазиндан аҙ-маҙ ғына булһа ла сыға торған сүп-сарҙы ошонан алыҫ булмаған урында торған контейнерға һалып йөрөргә тейешбеҙ икән. Касса аппаратының да, үлсәгестең дә йыш ҡына "дөрөҫлөгөн тикшертеп" торорға кәрәк икән дәбаһа, ауыҙыңа май булғыры! Әлбиттә, бушлай түгел...

Бер ҡап шырпы һатып алһалар ҙа касса аппаратынан "чек" сығарып бирергә бурыслыһың. Бер һалым органы вәкиле килеп, үҙенең кемлеген белгертмәй генә, ниҙер һатып алды. Касса аппаратына баҫып тормай, автобусҡа ашыҡҡан икенсе берәүҙе хеҙмәтләндерә башлағас, быныны танытмаһын сығара һалып күрһәтте лә, әлеге лә баяғы, тағы акт төҙөргә тотондо (тауар чегы бирмәгән өсөн). Был хәл штраф менән тамамланды. Тик һаман да аңлап етмәйем, "берҙәм һалым" тип аталған системала, күпме суммаға тауар һатһаң да, һалым бер үк күләмдә түләнә лә баһа! Бында касса чегы ниндәй роль уйнай икән?.. Һалым органдары шулай штраф һалып тора алһындар өсөн уйлап сығарылған системалыр, тип аңланыҡ...

Хаҡтар йәбештереп, тәҙрәнән урам тышына ҡаратып ҡуйған "витрина"ларҙағы тауарҙарҙы һәр ваҡыт алыштырып йөрөмәҫ өсөн, һатыу срогы сыҡҡандарын шунда теҙеп ҡуйғанды ғына көтөп торғандай, "...надзор" вәкиле лә әллә ҡайҙан пәйҙә булды. Ундағы тауарҙарҙы беҙ, әлбиттә, кешеләргә һатырға һис тә йыйынмағайныҡ. Һәр бер тауарҙы тышҡа күрһәтеп ҡуйырлыҡ муляждар етешмәгәндән генә шулай иткәйнек. Павильон тәҙрәһендәге "иҫке" тауарҙар өсөн тағы ла акт төҙөлдө. Штрафын ваҡытында ғына түләп ҡотолдоҡ.

Күп тә үтмәй, ҡала хакимиәтенән тағы бер ханым килеп етте ("ҡарар" тотоп). Илебеҙҙәге бихисап байрамдарҙың ниндәйҙер береһе етеп килә икән (хәҙер модаға инеп киткән "ҡала көнө" ине буғай). Шул айҡанлы ҡала масштабында үткәреләсәк дөйөм сара өсөн һәр бер "ИП"нан (индивидуаль предпринимателдә) менәр тәңкә аҡса йыялар, имеш. Әле генә эш башлағандар өсөн дә һис бер ташлама юҡ. Унынһын биреп ҡотолдоҡ тигәндә генә, күрше киоск хужаһы "тиҙҙән етәсәк Конституция көнөнә лә, унан, Яңы йылға ла, шулай уҡ йыйсаҡтар", тип "һөйөнсөләне". Байрамдарҙа киоск, павильондарҙы биҙәп ҡуйыу мотлаҡлығы хаҡында ла әйтте.

Бына шул ваҡытта, электән, үҙгәртеп ҡороу башланғас та шәхси эш башлаған, хәҙер инде әллә нисә "һатыу нөктәһе" булған бер ағай үҙенең эс сере менән бүлеште. "Элек рэкеттарға күпмелер сумма бирһәк, улар, үҙҙәре әйткән ваҡыты килеп етмәйенсә, башҡаса борсоп та йөрөмәй торғайнылар. "Охрана" вазифаһын да үтәнеләр... Хәҙер барса яҡтан ҡыҫтылар, хатта тын алырға ла ирек юҡ... Әүәлге рэкеттарың ары торһон..." - тигәйне. Ысынлап та, бына ошолай итеп, беҙ, әле генә эш башлаған кешеләр, өс-дүрт ай тирәһендә ниндәй генә ҡыйынлыҡтар менән осрашманыҡ. Фатир һаткан аҡсанан тауар ассортиментын әкренләп үҫтерерлек бер аҙ сумма кеҫәлә ҡалыуына тәүҙәрәк булған шатлығыбыҙ оҙаҡҡа һуҙылманы: аҡсабыҙҙың ҡалғаны "беҙҙең именлегебеҙҙе ҡайғыртыусыларға" китеп тә бөттө. Тауар әйләнеше әллә ни зарланырлыҡ та түгел һымаҡ ине, әммә айлыҡ килем тик ана шул юғарыла килтерелгән (әле былар - иҫемдә ҡалғандары ғына...) шаҡы-шоҡоға китеп бөтә торҙо. Улымдың тауар ташығыс машина һатып алам тигән хыялы, нисек итеп теге йәки был "йыртыҡ"ты ҡапларға, тигән уйҙарға алышынды.

Ә эшебеҙҙең бер файҙалы яғын күрҙек, шулай ҙа: өйөбөҙ һәр төрлө аҙыҡ-түлектәр менән тулды. Ул үҙ ғүмеребеҙҙә бер ҡасан да күрмәгән майонез сорттары, кетчуп, һәр төрлө минераль һәм газлы һыуҙар, һуттарҙың, колбасаларҙың ниндәйен генә татып ҡараманыҡ! Сөнки магазинда срогы сығып, "списать" ителгән тауарҙарға өйҙәге һыуытҡыста хатта урын да етмәй ине. Ташларға йәлке, сутики...

Шулай булыуына ҡарамаҫтан, һыр бирмәҫкә тырышып, ике йылдан ашыу эшләп ташланыҡ. Әммә машинама һаман да пенсия аҡсаһынан бензин ҡойҙороп, ҡайҙа, кемгә һәм нимә өсөн түләргә, тип унда-бында сабыулап йөрөү, йомшаҡ ҡына итеп әйткәндә, ялҡытты. Тағы бер "нөктә" асырға, тигән хыялыбыҙ ҙа күптән баштан һелкенеп төшөп ҡалды. Шул мәл беҙгә, ахырҙа, оло бәхет йылмайҙы: яңы эш баштарға хыялланған, ҙур теләк менән янған бер егеткә тауары-ние менән павильонды арзан ғына хаҡҡа һатып шатландыҡ. Улым хөкүмәт ҡарамағындағы бер ойошмаға эшкә төштө. Хәҙер мин үҙемдең яҙасаҡ васыятымда, киләсәк быуын бала-сағаларыма бер ҡасан да алыпһатарлыҡ эше менән булашмағыҙ, тигән оло кәңәш тә ҡалдырмаҡсымын. Бәлки, эшебеҙ барып сыҡмауына тик үҙебеҙ генә ғәйеплебеҙҙер, йәғни, миндә лә, улымда ла эшҡыуарлыҡ һәләте булмағандыр, тигән фекер ҙә юҡ түгел. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, бына ошо хаҡта яҡташтарым менән ҡасандыр бүлешергә уйым бар ине. Яңы эш башлаған эшҡыуарҙарға тәүге өс-дүрт йыл тирәһе бөтөнләйгә теймәй торһалар, бәлки, күптәренең ҡанаттары нығынып, эшләп тә китә алырҙар ине, тигән теләгем дә бар. Хәйер, һуңғы осорҙа, хөкүмәт органдары кесе эшҡыуарлыҡҡа ҙур иғтибар бүлә, уларға яҡшыраҡ ҡарай, тип тә ишеткеләйем. Бик хуп. Әммә улым менән мин хәҙер был хаҡта ҡыҙыҡһынмайбыҙ. Ул ғына ла түгел, эшҡыуарлыҡҡа беҙҙең аллергия, буғай...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Шул ваҡыттарҙан алып, күп йылдар уҙҙы. "Кеше хәлен кеше белмәй, үҙ башына төшмәһә", тип тә йырлайҙар бит әле халыҡта. Ә урыҫтарҙа "Век живи, век учись", тигән мәҡәл дә йөрөй. Башыбыҙҙан да үткәрҙек, күп нәмәгә лә өйрәндек, тигәндәй. Хәҙер улым да, үҙем дә һәр төрлө эшҡыуарҙарға, алыпһатарҙарға хөрмәт менән генә ҡарайбыҙ, уларҙы эшсәндәрҙән эшсән, тырыштарҙан тырыш, түҙемлеләрҙән түҙемле кешеләр тип һанайбыҙ. Үҙебеҙ һатып ебәргән шул павильонға, ошоғаса, үткән-сүткәндә иғтибар иткеләп йөрөнөм. Бәгзе ваҡыт ул яҡшы ғына эшләп тә тора (тыштан ҡарағанда, башҡа һәммә кешегә шулай тойола), ә ҡайһы бер мәлдәрҙә "Павильон продается" тигән иғлан да йәбештерелгән була. Беҙҙән һуң килгән хужалар ҙа унда әлләнән-әле алмашынып, "аҡылға ултырып" китеп торҙолар, ахыры, тип уйлай инем. Ошо көндәрҙән беребеңдә... әлеге магазиныбыҙҙың бөтөнләйгә урынында юҡ икәнен күргәс, әллә ни аптыраманым. Сираттағы хужа, нәҡ беҙҙең кеүек үк, унан ҡотолғанлығына шатланалыр, тип уйланым...**

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ТӘҠДИМ БАР!

# БАШҠОРТ АТЫН...

## милли брендыбыҙ итеп таныйыҡ

**Башҡортто атһыҙ күҙ алдына килтереп булмай. Ул үҙен тарихта ат менән бергә таныта. Ҡайһы бер тикшеренеүселәр раҫлауынса, хәҙерге Башҡортостан ере атты ҡулға эйәләштергән донъялағы иң боронғо урын булып тора. Быны боронғо кеше йәшәгән урындарҙа табылған ат һөйәктәре һәм йылҡысылыҡ менән бәйле башҡа әйберҙәр раҫлай. Иң тәүге арба ла Уралда табылған, ә Шүлгәнташ мәмерйәһендәге киң билдәле ат һәм башҡа хайуандар һүрәттәренә, ғалимдар әйтеүенсә, 18 мең йыл тирәһе. Тимәк, башҡорт аты республикабыҙҙы донъяға таныткан брендтар рәтендә мотлаҡ булырға тейеш.**



Мәшһүр "Урал батыр", "Аҡбуҙат" һәм һуңғараҡ тыуған башҡа эпостарҙа, риүәйәттәрҙә ат менән башҡорттоң айырылғыһыҙ бер бөтөн икәнен асыҡ күрәбеҙ. Халҡыбыҙ үҙен белә-белгәндән алып был изге мал уның юлдашы ла, ярҙамсыһы ла, ашатыусыһы ла булған, бергә утты-һыуҙы кискән, яу яланында ауған, еңеүҙән йөрәкһегән, юғалтыуҙан әсе йәшен түккән, донъяһының ҡотона, табыныу объектына әүерелгән.

Хәҙерге башҡорт аттары Көньяҡ Урал тарпандарының тән төҙөлөшө үҙенсәлектәрен генә түгел, уларҙың ауыр тәбиғәт шарттарына яраҡлашып йәшәй алыу һәләттәрен дә һаҡлаған. Башҡорт аты - Европалағы йорт хайуандары араһында ҡарау талап итмәгән, йыл әйләнәһенә тибенлектә йөрөп йән аҫрай ала торған берҙән-бер хайуан. Кәүҙәгә ҙур булмауына ҡарамаҫтан, иҫ киткес көслө, сыҙам, ышаныслы, тоғро, батыр йөрәкле. Тағы ла бер бик үҙенсәлекле яғы - башҡорт тоҡомло аттарҙың һөтө лә, ите лә, тиреһе лә аллергия тыуҙырмай. Шуның менән ул балалар аҙығы етештереүҙә ҡиммәтле сеймал булып тора.

19-сы быуаттан башлап совет осоронда ла әле башҡорт атын эреләтеү маҡсатында уны башҡа эре тоҡомдар менән ҡушыу саф башҡорт атын юҡҡа сығарыу сигенә алып килә. Айырым ғалимдарҙың фиҙаҡәрлеге менән генә көньяҡ райондарҙа ҡалған саф башҡорт тоҡомло аттарҙы үрсетеп, тоҡом сифаттарын тағы ла яҡшыртыуға ирешәләр. 1990 йылда башҡорт аты, халыҡ селекцияһы менән тыуған тоҡом статусын алып, илдең селекция ҡаҙаныштары дәүләт реестрына индерелә.

Әлеге ваҡытта Башҡортостан йылҡы һаны буйынса илдә Саха (Яҡут) Республикаһынан ҡала икенсе урында килә, иң күп ҡымыҙ ҙа беҙҙә етештерелә. Республикала был йүнәлештә биш тоҡомсолоҡ заводы, ун репродуктор эшләй, әммә улар башҡорт атын бренд булараҡ үҫтереү мәсьәләһен хәл итмәй.

Быны өсөн, тәү сиратта, булған бөтә мөмкинлектәрҙе файҙаланып, башҡорт атын популярлаштырыу өҫтөндә эшләү кәрәк. Һүҙ ҡуйыртыуҙың бөтә сәбәбе лә - ошо тәҡдимде еткереү: тәғәйен бер көндө Башҡорт аты көнө тип билдәләү. Ошоно республикала иғлан итеп нығытҡас, Рәсәй кимәленә сығарырға тырышырға кәрәк буласаҡ. Башҡорт аты быға лайыҡ. Рәсәйҙең сиктәрен һаҡлауҙа, ул алып барған һуғыштарҙа аттарыбыҙ яугирҙарға ҡарағанда ла күберәк булған, сөнки һәр бер яугир икешәр ат менән киткән. Хужалыҡ эштәрендә ҡулланыуға тип элек-электән һәм әле лә башҡорт аттарын Рәсәйҙең үҙәк өлкәләренә, күрше төбәктәргә, Ҡаҙағстанға күпләп һатып алалар. Атһөйәрҙәр форумдарында яҙыуҙарынса, мәғлүмәттең, йәғни пиарҙың етерлек булмауы башҡорт атының хаҡын төшөрә, шулай уҡ ҡымыҙының шифаһы хаҡында ла белеп бөтмәйҙәр.

Төрлө илдәрҙә ат көндәре үткәреү традицияһы бар. Мәҫәлән, Италияла, Испанияла был көн ат сабыштары, йәрминкәләр, театрлаштырылған тамашалар, бейеүҙәр менән үрелеп, оло байрамға әйләнә. Венгрия, Монголия, Нидерландтар, Болгарияла ат байрамдары ерле халыҡта ғына түгел, туристарҙа ла ҙур популярлыҡ яулаған.

Рәсәйҙә ат көнө изге ыҙа сигеүселәр, йорт хайуандарын һаҡлаусылар (покровитель) Фрол һәм Лавр хөрмәтенә 31 августа билдәләнә. Борон был көндө аттарҙы эшкә екмәгәндәр, иң яҡшы аҙыҡ ашатып, сиркәүгә алып барғандар, изге һыу бөрккәндәр, кисен ат күргәҙмәләре, бәйгеләр ойоштороғандар.

Быларҙан айырмалы рәүештә, Башҡорт аты көнө рәсми рәүештә милли байрам статусын алырға тейеш. Шул ваҡытта ғына уға тейешенсә иғтибар бүленеп, был ғәжәйеп тоҡомдо һаҡлап ҡалыу ғына түгел, туризмды үҫтереү, халыҡ шөғөлдәренә юл асыу кеүек маҡсаттарға ла ирешергә мөмкин буласаҡ.

Глобалләштереү осоронда үҙҙәренә иғтибар йәлеп итеү, күберәк халыҡты ҡыҙыҡһындырыу өсөн туризм менән йәшәгән илдәр нимә генә уйлап сығармай ҙа, ниндәй генә хеҙмәт тәҡдим итмәй, бары килһендәр, һатып алһындар ғына. Ә беҙҙең аҙым баҫҡан һайын легенда, ауыл һайын оҫталар, тәбиғи милли аш-һыу, үҙенсәлекле мәҙәниәтебеҙ бар - беҙ донъяға шуның менән ҡыҙыҡ та инде. Беҙҙең милли ҡиммәттәребеҙ Ер шарының башҡа бер мөйөшөндә лә юҡ, ҡабатланмаҫ һәм шуның менән оло баһаға лайыҡ та инде. Башҡорт атының статусын күтәреп, уның тирәләй генә лә әллә күпме саралар үткәрергә була, фантазияң ғына етһен.

Халҡыбыҙҙың даны, ҡото булған атыбыҙ хаҡында дәүләт кимәлендә әле хәстәрлек күрмәһәк, тиҙҙән ҡайһы бер йылғыр күршеләребеҙҙең беҙҙең атты егеп йөрөүен тамаша итергә тура килмәгәйе. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ, мөхтәрәм йәмәғәт?

**Гөлдәр НУРИЕВА.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Хәмит АЛҒАР*

# ҺУҢҒЫ БӨЙӨК ШӘЙЕХ

Зәйнулла Шәйех киләсәкте ошондай өмөт тыуҙырырлыҡ итеп күҙаллаһа ла, был өмөттәрҙең совет режимы замаһында ғәмәлгә ашыуы мөмкин түгел ине. Ғәлимйән Баруди һәм Ризаитдин Фәхретдиновтың инҡилабтан һуң булған эшмәкәрлеге менән сағыштырғанда, Абдрахман Рәсүлев һәм Шакир Хыялетдиновтың Диниә назаратында уңышлы идара итеүен Зәйнулла шәйехтең рухи мираҫын тәбиғи дауам итеү, тип ҡарап булмай. Шуға ҡарамаҫтан, 1941 йылдан алып 1974 йылға тиклем Диниә назараты башында Зәйнулла шәйехкә яҡын булған шәхестәр тороуы сәбәбен, совет власы етәкселәренең, Абдрахман Рәсүлев һәм Шакир Хыялетдиновтың мосолман мөхитендәге абруйын иҫәпкә алып, тап уларҙы назарат (ДУМЕС) башлығы вазифаһына тәҡдим итергә мәжбүр булыуы менән аңлатырға була.

Ғилми эшмәкәрлеген совет сығанаҡтарын өйрәнеүгә арнаған Александр Бенигсен һуңынанырак, Нәҡшбәндиә туғанлығы Дағстан һәм Чечнялағы кеүек тормошсанлыҡҡа эйә булмағас, суфыйсылыҡ татар һәм башҡорт ерләгендә бөтөнләйгә юҡҡа сыҡҡан, тигән фекерен бер нисә тапҡыр ҡабатлай. Әммә биш йөҙ йыл буйына дауам иткән традиция, репрессияларҙың ниндәй көслө булыуына ҡарамаҫтан, етмеш йыл эсендә генә юҡҡа сыҡҡанға оҡшамай. Бынан башҡа, татар һәм башҡорт мөхитендә суфыйсылыҡ тарихы буйынса хәҙерге осорҙа яҙылған хеҙмәттәрҙең күп булыуы был мәсьәләнең бөгөнсөл әһәмиәте юғалмауын белдереп тора.

Волга-Урал төбәгендә Хәлидиә-Нәҡшбәндиә суфыйҙары туғанлығының инҡилабтан һуң кисергән, әлегә билдәле бер баһа биреп булмай торған яҙмышынан айырмалы рәүештә, шәйех Зәйнулла Рәсүлевтың тормошо һәм эшмәкәрлеге бер нисә йүнәлештә даими ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыуын дауам итә. Уның карьераһы Урта Азияла йәшәүсе төрки халыҡтары араһында Ислам белемен һәм йолаларын таратыуҙа суфый туғанлыҡтарының йоғонтоһо дауамлы икәнен күрһәтеп тора. Артабан, беҙ шәйех Зәйнулла йөҙөндә Хәлидиә туғанлығының ни рәүешле йәҙитселәр менән уртаҡ тел табып, ҡәҙимге Бохара шәйехтәренең күбеһенә хас булған, иҫке ҡалыпҡа ҡоролған фекерләү ысулынан ҡотолоп, татар һәм башҡорт халыҡтарын мәҙәни тергеҙеүгә индергән лайыҡлы өлөшөн күрәбеҙ. Зәйнулла ишандың эшмәкәрлеге, большевиктар режимы Рәсәй мосолмандарын ҡараңғылыҡта һәм айырылып йәшәүгә дусар иткән осорға тиклем башҡорт һәм татар ғалимдары, дин эшмәкәрҙәренең, остаздары ойошторған формаль булмаған халыҡ-ара селтәргә инеп, донъя мосолмандарының дөйөм эштәрендә әүҙем ҡатнашыуын асыҡтан-асыҡ дәлилләп тора.

**(Аҙағы).**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ӘЛМИСАҠТАН...



➔**1773 йылдың 9 ноябре** - Салауат Юлаев Ырымбурҙы һаҡлап ярҙамға барыусы башҡорт командаһын баш күтәреүселәргә ҡушылырға өндәй. Ноябрь ахырында Пугачев Салауатҡа полковник чины биреп, тыуған яҡтарында халыҡты көрәшкә күтәрергә ебәрә.

➔**1773 йылдың ноябре** - башҡорттар Өфөнө ҡамай.

➔**1773 йылдың декабре** - Крәҫтиәндәр һуғышы Көньяҡ Урал һәм Кама буйы заводтарын солғап ала.

➔**1774 йылдың ғинуары** - баш күтәреүселәр Красноуфимскиҙы ала, 23 ғинуарға Көнгөрҙө ҡамай.

➔**1774 йылдың ғинуар-феврале** - һуғыш Урал аръяғына тарала. Белобородов һәм башҡа атамандар ғәскәрҙәре Екатеринбургты ҡамай.

➔**1774 йылдың 8 феврале** - И. Грязнов отряды Силәбене яулай.

➔**1774 йылдың 24 мартында** И. Чика-Зарубин менән И. Губанов язалана.

➔**1774 йылдың 13 апреле** - Е.И. Пугачев Белорет заводына килә.

➔**1774 йылдың 2 июне** - Ҡыйғы ауылы янында Емельян Пугачев менән Салауат Юлаев ғәскәрҙәре осраша. 3-5 июнь улар менән Михельсондың язалау отряды араһында ҡаты һуғыш була. 5-6 июндә Пугачев Исәт старшинаһы, Закон сығарыу буйынса комиссия депутаты Баҙарғол Юнаевҡа - фельдмаршал, Салауатҡа - бригадир, Юлай Аҙналинға - Себер даруғаһының баш атаманы, Нуғай даруғаһы Боҙаяҙ ауылы мишәре сотник Ҡәнзәфәр Усаевҡа - баш полковник, тағы бер нисә кешегә полковник чины бирә.

➔**1774 йылдың ноябре** - генерал-поручик А.В. Суворов биш көнгә Өфөгә килә.

**Дәүләт МӘҺӘҘИЕВ төҙөгән.**
**(Дауамы бар).**

✓ ***"Был сиркәүҙең архитекторы кем икән?" тип һораһаҡ, теге: "Говорят, его Салават строил", - ти. Әлбиттә, бындай бер документ та юҡ, әммә халыҡ араһында йөрөгән легендаларҙан был көндәргә шундай мәғлүмәттәр килеп еткән.***

# САЛАУАТ ЭҘҘӘРЕ

**Өфөнән**

**Башҡортостандан бер төркөм Рәсәй һәм Эстония буйлап Салауат Юлаев эҙҙәренән йөрөп ҡайтты. Рогервик ҡәлғәһенә мәңгелек һөргөнгә ҡыуылған Салауат һәм атаһы Юлай Аҙналин үткән был юлдарҙағы һәр ҡалала Башҡортостан хаҡында, Салауат Юлаев тураһында нәфис һәм документаль фильмдар күрһәтелгән, милли кейем, фото күргәҙмәләре ойошторолған, тарихсы-ғалим сығыш яһаған, ҡурай моңо тыңлатылған. Һәм быларҙың барыһы менән ҡушар сәйәхәт буйынса кинофильм төшөрөп барылған.**
**Был проекттың идея авторы һәм етәксеһе, БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, С.Юлаев ордены кавалеры Фәрит Ғәбитов менән фильмдың режиссеры Таңсулпан Бураҡаева редакциябыҙҙа булып, сәйәхәттә алған тәьҫораттары менән уртаҡлашты. Уларҙы гәзит уҡыусыларға ла еткерәбеҙ.**

**Беҙҙең әлегә тиклем милли батырыбыҙ хаҡында донъя кимәленә, улай ғына ла түгел, бөгөнгө йәш быуынға танытып күрһәтерлек кинофильм юҡ, шулаймы?**

**Фәрит Ғәбитов:** Заман өсөн яраҡлы фильм юҡ, тип төҙәтәйек. Сөнки үткән йылдарҙа Салауаттың үҙенә үк арналған булмаһа ла, уның хаҡында мәғлүмәт биргәндәй фильмдар була. Пугачев хаҡындағы 1937 йылда донъя күргән кинола Салауат та үҙәк урындарҙың береһендә. Унда батыр ролен Ленинград актеры Константин Мухутдинов башҡара. Ваҡытында ул бик танылған актер була. Ленинград театрҙарында эшләй, һуғышта булып ҡайта, күп кенә фильмдарҙа уйнай.

Икенсе фильмды 1940 йылда Степан Злобин әҫәре буйынса Яков Протазанов төшөрә. Был кино Башҡортостан ерлегендә, элекке Маҡар, хәҙерге Ишембай районында төшөрөлөүе һәм шул быуын халҡы өсөн батыр образын тыуҙырырлыҡ булыуы менән үҙенсәлекле.

Әлбиттә, бөгөнгө ҡараштан ул киноларҙың сәйәсәте лә, идеяһы ла иҫкергән кеүек. Тик ул фильмдар ваҡытында әллә күпме сит халыҡтарға беҙҙең милли батырыбыҙ тураһында, милләтебеҙ тураһында мәғлүмәт бирҙе. Бөгөн иһә массалы, хәрби күренештәр менән тулы нәфис фильм тураһында һүҙ алып барыуы ла ауыр. Әммә мөмкин булмаған хәл түгел. Бары был тәңгәлдә етәкселектең етди ҡарашы ғына кәрәк.

**Һеҙ әле башҡарып йөрөп ҡайтҡан эштәр хаҡында ишетәйек әле. Нимәнән башланды барыһы ла һәм нисек үтте?**

**Таңсулпан Бураҡаева:** Башҡортостан кинематографистары союзы башҡорт киноһы тарихында беренсе тапҡыр БР Мәҙәниәт минстрлығы, "Урал" хәйриә фонды, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы, "Башҡортостан" киностудияһы һәм БР Милли музейы булышлығы менән Президент гранттары фондынан Федераль грант алыу бәхетенә өлгәште. Был "Салауат эҙҙәре буйлап" тип аталған бик масштаблы проект. Рәсәйҙең 9 һәм Эстонияның 3 ҡалаһы аша үтеп, батыр тотҡонлоҡта йәшәгән Рогервик ҡәлғәһенә етеп туҡтаныҡ. Йәғни, беҙҙең маршрут "Өфө - Палдиски - Өфө" булды. Фильмды төшөрөү Салауат районынан башланып киткәйне. Салауаттың тыуған ауылы Тәкәйҙән тупраҡ алып, Рогервиктағы һәйкәленә алып барып һалдыҡ. Башта юлда саҡта юл иҫкәрмәләре генә яҙып барырға тип планлаштырғайныҡ та, материалдар шундай күп һәм бай булып, хеҙмәтебеҙ тулы метражлы документаль фильм булып килеп сыҡты. Бөтөн был сәйәхәт өс аҙна ваҡытты алды. Белеүегеҙсә, төркөмдө Фәрит ағай Ғәбитов етәкләне. Беҙҙең менән шулай уҡ ғалим, Салауат шәхесен, тормошон һәм яу юлын иң шәп белеүсе Мирас ағай Иҙелбаев һәм тағы ла режиссер, композитор, сценарий авторы, оператор, фотограф һәм дизайнер булған 17 кеше сәйәхәт итеп ҡайтты. Төркөмдәге һәр кем үҙ урынында кәрәкле һәм файҙалы булды.

Рәсәй буйлап сәйәхәт иткән "Салауат юлы буйлап" тигән яҙыулы автомобиль күптәрҙең иғтибарын йәлеп итте. Һәр туҡтаған урында осрашыуҙар, һөйләшеүҙәр, фильмдар күрһәтеү ойошторолдо. Илеш районының Иҫке Йәркәй ауылы, унан Миңзәлә, Ҡаҙан, Чебоксар, Түбәнге Новгород, Владимир, Мәскәү, Тверь, Бөйөк Новгород, Псков, Тарту, Таллин һәм Эстонияның Палдиски ҡалаларында батырыбыҙҙың эҙҙәрен юллап йөрөнөк. Тәьҫораттарҙы һүҙ менән генә әйтеп аңлатыуы ла ауыр...




***Палдискиҙың китапханаһына ла индек. Ярай, китапханасының Салауат тарихын белеүенә аптыраманыҡ, ә бына үҙ йомоштары менән ингән осраҡлы китап уҡыусыларҙың да милли батырыбыҙ хаҡында китаптар уҡыуына ғорурландыҡ та, хисләндек тә. Унан һуң, Салауат тураһындағы документтарҙың төп нөсхәләрен тотоп ҡараныҡ. Күҙ алдына килтерегеҙ әле! Иҫкә төшһә, һаман күңел нескәрә...***

**Күптән түгел күңелһеҙ хәл булып, берәҙәк бер мәҙәксе тарафынан Салауатыбыҙға "бандит" тигән яла яғылды... Ә заманында батыр ҡаршы сыҡҡан дәүләт власы уға ҡарата был әшәке һүҙҙе ҡулландымы икән? Һәм был проект, үҙенә күрә, бөтөн шул йәмһеҙ күренештәргә яуап та кеүек, шулай бит?**

**Фәрит Ғәбитов:** Юҡ, ундай әшәке яланы хатта батша власы ла ҡулланмаған. "Злодей, изменник, бунтовщик" тип әйтелә, әммә "бандит" тигән һүҙ булмай. Һәм бөгөн дә урыҫтар беҙҙең милли батырға хөрмәт менән ҡарай. Ә наҙан, аң кимәле түбән әҙәмдәр беҙҙең арала ла, урыҫ араһында ла, башҡа милләт халыҡтары араһында ла бар инде ул.

Салауаттың исеме тыйылған заманда ла, уның хаҡында беренсе булып урыҫ телле яҙыусы Филипп Нефедов яҙып сыға. "Салауат тупаҫ яугир ғына түгел, ул ғалим һәм шағир. Ул Ҡөрьәнде, шәриғәт закондарын белә. Егет алдында ололар ҙа хөрмәт менән баш эйә, уҡымышлылығына муллалар ғына түгел, ахундар ҙа аптырай..." тип яҙа ул.

Был проект үрҙә телгә алынған ваҡиғаға яуап итеп эшләнмәне, был күптәнге хыял һәм бер нисә йыл әүәл башланған хеҙмәт. Әммә ул шулай тура килде һәм ысынлап та бик урынлы булды. Әйткәндәй, ошо проектты тормошҡа ашырғанда ла Федераль кимәлдәге бик күп башҡа милләт кешеләре ярҙамға килде. Улар беҙҙең милли батырыбыҙҙы шулай онотмай, ололап, уның исемен ғорурлыҡ менән телгә алыуыбыҙға һоҡланыу белдерҙе. Һәм, ысынлап, үҙ шәхестәребеҙҙе беҙ бары тик үҙебеҙ күтәрә һәм үҙебеҙ генә юҡҡа сығара алабыҙ. Быларҙы башҡа халыҡтар йәки милләттәр эшләй алмай. Заманында батша власы, совет иле һәм хәҙер килеп Рәсәй хөкүмәте һанлаған батырыбыҙҙы айырым әҙәмдәрҙең генә хәбәре ҡаралай алмай. Беҙ быға юл ҡуймайбыҙ ҙа.

**Батырҙың һуңғы төйәге булған эстон ерендә уның хаҡында беләләрме, иҫләйҙәрме? Һеҙҙе нисек ҡабул иттеләр?**

**Фәрит Ғәбитов:** Бөтә ерҙә лә беҙҙе яҡшы ҡаршы алып торҙолар, теләктәшлек күрһәттеләр. Музейҙарға, хатта Кремлгә инергә мөмкинлек булдырҙылар. Ҡайһы урындарҙа кино төшөрөүгә лә рөхсәт кәрәк булды, шуларҙы хәл иттеләр. Оҙатып йөрөүселәр, музей хеҙмәткәрҙәре, осрашыуға килгән халыҡ беҙҙең кемдең эҙҙәрен юллап йөрөүебеҙҙе белә, аңлай ине. Берәү ҙә "Кем ул Салауат? " тип һораманы.

Эстонияла ла шундай уҡ йылы мөнәсәбәт менән осраштыҡ. Унда ла Салауатыбыҙҙы "Башҡорттоң милли геройы" тип белеп торалар. Уның хаҡында легендалар, тарихтар йәшәй. Хатта беҙ туҡланып йөрөгән таверна хужабикәһе Салауатҡа арнап шиғыр яҙған да, шуны бик хисләнеп, ярһып, уҡып күрһәтте. Ә уның кейәүе "Салауат Балтик диңгеҙе ярында" тигән ҙур картина эшләгән. Беҙҙең музейҙарға ла бүләк иткән уны.

Шундай ҡыҙыҡ ҡына хәл дә булды. Яр буйындағы сиркәүҙе асып-ябып йөрөгән ҡарсыҡ менән һөйләшкәйнек. Сиркәүҙең батюшкаһы үлеп ҡалған да, Аллаһ йортон ошо апай тәрбиәләп йөрөй икән. Ә бина шундай мөһабәт, таштарҙан ғына йәбештерелеп, нисектер, үҙенсәлекле итеп төҙөлгән. "Был сиркәүҙең архитекторы кем икән?" тип һораһаҡ, теге аптырамай ҙа: "Говорят, его Салават строил", - тип яуаплай. Әлбиттә, бындай бер документ та юҡ, әммә халыҡ араһында йөрөгән легендаларҙан был көндәргә шундай мәғлүмәттәр килеп еткән. Икенселәре уны төҙөүҙә Салауат ҡатнашҡан, хатта аҡса ла ҡушҡан, тиҙәр. Һәр хәлдә, унда Салауат хаҡында шундай төрлө тарихтар йәшәй. Ә бит һәр тотҡон тураһында телдән-телгә, быуындан-быуынға хәбәр күсермәйҙәр. Һәм мине тулҡынландырған тағы ла бер нәмә бар: Салауатты ана шул сиркәүҙең "святойҙары" теҙмәһенә индергәндәр икән.

Палдискиҙың китапханаһына ла индек. Ярай, китапханасының Салауат тарихын белеүенә аптыраманыҡ, ә бына үҙ йомоштары менән ингән осраҡлы китап уҡыусыларҙың да милли батырыбыҙ хаҡында китаптар уҡыуына ғорурландыҡ та, хисләндек тә. Унан һуң, Салауат тураһындағы документтарҙың төп нөсхәләрен тотоп ҡараныҡ. Күҙ алдына килтерегеҙ әле! Иҫкә төшһә, һаман күңел нескәрә...

**Палдиски ихтилалсы тотҡондар өсөн ҡәлғә булған, шунлыҡтан, унда башҡа халыҡтарҙың да тотҡондары аҙ булмағандыр. Әлеге мәлдә йәки быға тиклемге тарихта беҙҙең милләт Салауаттың эҙҙәрен эҙләп йөрөгән кеүек, үҙ батырҙарын юллап йөрөгәндәр бармы, булғанмы?**

**Таңсулпан Бураҡаева:** Беҙгә күп урындарҙа "Һеҙ ҡайһылай хөрмәтле, хәтерле халыҡ" тип әйттеләр. Һәм был ысынлап та шулай. Әлеге Палдискиҙа ла күп йылдарҙан һуң милләттәштәре килеп, эҙҙәрен юллап йөрөгәндәй Салауат кеүек батырҙар ҙа булмаған. Бөгөн беҙ уны үҙебеҙҙе берләштерә торған символға әүерелдергәнбеҙ.

Бөтөн ошо күргән, ишеткәндәрҙән һуң, Салауат тураһындағы фильмдар ваҡыты-ваҡыты менән сығып торорға тейеш, тигән ныҡлы һығымтаға килдем. Әле беҙ төшөргән фильм Салауат тураһында ғына түгел, ә Салауатты өйрәнеүсе беҙҙең үҙебеҙ тураһында ла. Тағы ла егерме йылдан һуң ошо көндәр тарихта ҡаласаҡ һәм киләсәк быуын беҙҙең яҙмаларҙан кәрәкле мәғлүмәттәрҙе табып аласаҡ. Һәр башҡорт режиссерының милли батырҙарыбыҙ, шәхестәребеҙ тураһында фильмдар төшөрөп ҡалдырырға хаҡы ғына түгел, бурысы ла барҙыр, тип уйлайым мин. Һәр яҙыусының, һәр шағирҙың Салауат хаҡында әҫәре бар, композиторҙың йыры бар. Һәм булһын да, күберәк булһын. Был беҙҙең милли код.

**Өлкән быуын вәкилдәренең күҙ алдында Салауат образы Арыҫлан Мөбәрәков төҫө менән ҡалған, шулай бит? Батырҙың скульптураһы ла шул төҫ аша сағыла. Ә бөгөнгө быуын вәкилдәренә уны ниндәй итеп күҙ алдына килтерергә?**

**Фәрит Ғәбитов:** Әлбиттә, беҙҙең Салауат образын яңыртыуға мохтажлыҡ бар. Был, моғайын, күптәрҙең хыялылыр. Һуғыштан алдағы йылдарҙа донъя күргән фильмды күргән кешеләргә лә бөгөн илле йәштән кәм түгел. Әммә шундай хәлдә лә бөгөнгө йәштәребеҙ уны милли символ кимәленә күтәргән бит. Хатта ул инде ниндәйҙер ҡиәфәттә ҡабул итеү кимәленән үткән, изгеләштерелгән, тиергә лә була. Әммә нәфис фильм кәрәк, кәрәк, уныһы менән килешәм. Бөгөн беҙҙең белемле кешеләр, тарихсылар, эшҡыуарҙар етерлек, бары матди хәлебеҙ генә тота беҙҙе яңы фильм төшөрөүҙән. Бер заман булыр бындай мөмкинлек, тип ышанам.

*✓ Кино геройҙары була алырлыҡ шәхестәребеҙ, тарихыбыҙ, халыҡ ижадыбыҙ бар. Әммә быларҙы сәнғәт итеп күрһәтер мөмкинлектәребеҙ генә сикле. Шуға ла был өлкәгә хөкүмәт тарафынан етди иғтибар булырға тейеш, тибеҙ.*



# БУЙЛАП, Палдискиғаса

**Бөгөн тарих ентекле өйрәнелә һәм Кәрҫтиәндәр һуғышында Салауат кеүек 90-лап полководец һәм шундай уҡ батырҙар ҙа булған, тип яҙыла. Ихтилалдан һуң унын кеүек һөргөнгә ебәрелгән, язаланған-аҫылған ир-егеттәр ҙә аҙ булмаған. Һәм ни өсөн тап Салауат беҙҙең милли батыр, нисек уйлайһығыҙ?**

**Таңсулпан Бураҡаева:** Салауат Юлаев ябай полководец, ябай яугир һәм ябай батыр ғына булмаған. Халыҡты бит тарихта билдәле булған 90 полководец эйәртмәгән, ә тап Салауат күтәргән. Тимәк, унын ялҡынлы һүҙ әйтерлек тә, ышандырырлыҡ та йоғонтоһо ҙур булған. Ул Крәҫтиәндәр һуғышының күп кенә хәл иткес ваҡиғалары менән етәкселек итә, егерменән ашыу алышта ҡатнашып, үҙен һәләтле башлыҡ, яугирҙарҙы рухландыра алырлыҡ етәксе итеп күрһәтә. Шулай уҡ унын, 22 йәшлек егеттең, 175 тапҡыр ҡамсы менән һуҡтырыуҙы, 339 көн һорау алыуҙарҙы, танауын йолҡоп алып, битенә тамғалар баҫыуҙы һәм тыуған иленән ситтә, ауыр тотҡонлоҡта тағы ла ярты быуат көн итеүҙе күтәрә алыуы ла күп нәмә хаҡында һөйләй бит. Шунлыҡтан, Салауат урынында башҡа кемдер була алыр ине, тигән уй ҙа булыуы мөмкин түгел.

**Һеҙҙең фильмда Салауат ролен кем башҡарҙы һәм ул Салауатты ниндәй юҫыҡта аса?**

**Таңсулпан Бураҡаева:** Был фильмға, бюджет ҡыҫынҡы булғанлыҡтан, беҙ ике генә актер алдыҡ. Салауатты һәм унын атаһы Юлай Аҙналинды уйнаусы Морат Рафиҡов һәм Илдар Ғүмәров ролгә бик ихласлап, тулҡынланып тотондо. Фильм төшөргән ваҡытта ҡулдарына, аяҡтарына ысын бығау һалдыҡ, яланаяҡ таштарҙан йөрөттөк. Ҡыйынға тура килде, шуға ваҡыты-ваҡыты менән: "Үтә ныҡ ыҙаланмайһығыҙмы, бер аҙ ял итәһегеҙме?", - тип һораһам: "Салауат түҙгән бит, беҙ ҙә түҙербеҙ", - тип яуаплайҙар. Ысынлап та, егеттәр ниндәйҙер бер эмоциональ хәлгә инеп, үҙҙәрен үҙҙәре онотоп китеп уйнаны. Әле актерҙар фильмдың артабанғы съемкаларына әҙерләнә, тик уларҙы үткәрер өсөн әлеге-баяғы аҡса кәрәк.



*Беҙ әле грант ярҙамында эшләнек фильмды, унда ла 80 процентын Рәсәй Президент фонды бирә, ҡалған 20 процентын үҙебеҙ табырға тейеш инек. Ҡайҙа ғына хаттар яҙманыҡ, кемгә генә мөрәжәғәт итмәнек. Башҡорт ерҙәренең елеген һурып йәшәүсе газ, нефть йәмғиәттәренә лә өндәштек. Тик улар - ләм-мим. Бары тик "Урал" хәйриә фонды ғына ярҙам ҡулы һуҙҙы, рәхмәт төшкөрө. Бына шул ярҙам менән барып еттек маҡсатҡа.*

Беҙ әле грант ярҙамында эшләнек фильмды, унда ла 80 процентын Рәсәй Президент фонды бирә, ҡалған 20 процентын үҙебеҙ табырға тейеш инек. Ҡайҙа ғына хаттар яҙманыҡ, кемгә генә мөрәжәғәт итмәнек. Башҡорт ерҙәренең елеген һурып йәшәүсе газ, нефть йәмғиәттәренә лә өндәштек. Тик улар - ләм-мим. Бары тик "Урал" хәйриә фонды ғына ярҙам ҡулы һуҙҙы, рәхмәт төшкөрө. Бына шул ярҙам менән барып еттек маҡсатҡа.

**Башҡорт киноһының киләсәген нисек күҙаллайһығыҙ? Бармы унын киләсәге?**

**Фәрит Ғәбитов:** Тормошта бөтә нәмә лә үҙгәреүсән һәм алға тәгәрәп китеп бара. Теләйһеңме һин, теләмәйһеңме, донъя заман ҡуласаһында әйләнә бара. Былар ыңғайына кино сәнғәте лә үҙгәреп, үҫешеп, яңы формаларға инеп, ҡулайлашып килә. Бынан бер нисә йыл элек кенә беҙ кино төшөрөүҙәге ҡайһы бер мөмкинлектәр хаҡында уйларға ла ҡыймай инек. Бөгөн уларҙы ҡыйыу ҡулланабыҙ. Ниндәйҙер темаларҙы ҡуҙғытыу тыйыла ине, хәҙер ниндәй юҫыҡта теләйһең, шулай яҡтырт. Ҡасандыр башҡорт фильмдары хаҡында һүҙ генә бар ине, хәҙер темалар төрлөләнгәндән-төрлөләнә. Яңынан-яңы режиссерҙар, актерҙар, сценаристар үҫеп тора. Башҡорт кинематографияһының да мөмкинлектәре киңәйгәндән-киңәйә. Был өлкә беҙҙә яңы оло юлға баҫа һәм, уйлауымса, киләсәге лә матур буласаҡ. Сөнки беҙҙә тотонолмаған, тапалмаған, асылмаған хазиналар күп. Кино геройҙары була алырлыҡ шәхестәребеҙ, тарихыбыҙ, халыҡ ижадыбыҙ бар, тәбиғәтебеҙ бай. Әммә быларҙы сәнғәт итеп күрһәтер мөмкинлектәребеҙ генә сикле. Шуға ла был өлкәгә хөкүмәт тарафынан етди иғтибар булырға тейеш, тибеҙ. Тел, ер, миллилек кеүек рухи ҡиммәттәр теҙмәһенә башҡорт киноһын да индереү кәрәк, сөнки ул да яҡлауға һәм аманат итеп тапшырылыуға мохтаж.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА әңгәмәләште.**

УЙЛЫҒА - УЙ

# ЯҘМЫШТЫ КЕМ БИЛДӘЛӘЙ,

## йондоҙҙармы, әллә үҙебеҙме?

**Япон яҙыусыһы Рю Муракаминың "Дети из камеры хранения" исемле китабын уҡығанда түбәндәге сюжетҡа тап булдым. Таксист йәш кенә бер ҡыҙҙы эшенән алып ҡайтып бара. Урта йәштәге ирҙең төшөнкөлөккә бирелеп йөрөгән ауыр осоро була. Ҡапыл иртән радио аша ишеткән йондоҙнамә иҫенә төшә. Эргәһендәге сибәр ҡыҙға йондоҙҙар уға бөгөн бик мөһим осрашыу һәм яҙмышының көтөлмәгән яҡҡа боролоуын вәғәҙә итеүен һөйләй башлай. Хәҙер үк, ошо урында барыһын да үҙгәртеп, һинең менән ер сигенә китергә әҙермен, тип, таксист машина ишеген бикләп, ҡайҙалыр йүгерә. Бер аҙҙан ҡурҡыуға ҡалған ҡыҙ янына килеп, ер сигенә китер өсөн дуҫынан аҡса һорауы, уныһы бирмәгәс, тегене үлтереүе хаҡында хәбәр һала. Уны йондоҙҙарға ышаныу шул рәүешле харап итә.**

Тормошта ла ошоға оҡшаш хәлдәр юҡ түгел. Күрше фатирҙа йәшәүсе танышым үҙе гәзит алдырмаһа ла, почта килгән көн беҙгә йүгереп инеп, матбуғат биттәрендә яҙылған йондоҙнамәне балаларса тулҡынланыу менән уҡып сыға. Һәр һөйләменә түгел, һәр өтөрөнә тиклем ышана. Был иллене үткән ағай бер көндө шулай тип аптыратты: "Йондоҙҙар миңә күптән күрергә теләгән танышыңды осратырһың, тип вәғәҙә иткәйне. Кисә ҡапҡа төбөндә көтөп, таң атҡансы ултырҙым, тик берәү ҙә килеп сыҡманы". Беҙҙе институтта уҡытҡан билдәле ғалим да күк есемдәренең кеше яҙмышына йоғонтоһо тураһында бер секундҡа ла онотмай ине. Әгәр йондоҙҙар бөгөнгө көндә ҙур эштәр атҡарыуҙы тыя икән, тимәк, деканат тарафынан билдәләнгән имтихан икенсе уңышлыраҡ көнгә күсерелә ине.

Йондоҙнамә буйынса йәшәү яҡшымы, әллә насармы? Астрология менән ҡыҙыҡһыныу бер бөгөн барлыҡҡа килмәгән. Боронғо заманда бөтөн ил башлыҡтары тормошон йондоҙнамәгә ярашлы итеп ҡорған. Мәҫәлән, Екатерина Медичи ниндәйҙер ҡарарға килер алдынан һәр ваҡыт Нострадамус менән кәңәшләшкән. Людовик XYI астрологы унын үлем көнөн 21 ғинуарҙы дөп-дөрөҫ әйтеп биргән. Ләкин король унын һүҙенә ҡолаҡ һалмай һәм тап ошо көндә язаға тарттырыла. Аналитиктар билдәләүенсә, ябай халыҡтың 56 проценты йондоҙнамәгә тулыһынса ышана. Улар бигерәк тә астрологтарға Яңы йыл алдынан йыш мөрәжәғәт итә.

Һорау тыуа: ни өсөн беҙ, алдынғы ҡарашлы кешеләр, йондоҙҙар менән бәйле мистикаға ышанабыҙ һуң? Психологтар күрһәтеүенсә, быға бик күп етди сәбәптәр бар. Халыҡ һуғыш, сәйәси һәм иҡтисади тотороҡһоҙлоҡ осоронда күпләп сихырсыларға, бағыусыларға, астрологтарға мөрәжәғәт итә. Ә беҙҙең илдә, белеп тораһығыҙ, бөтәһе лә ал да гөл, тип әйтеп булмай.

Йондоҙнамә - ул психотерапияның бер төрө. Улар кешелә өмөт яңырта, тынысландыра, үҙ көсөнә ышанысты нығыта. Йондоҙнамәгә күберәк йыш депрессияға дусар булған, шикшөбһәле шәхестәр ышаныуы билдәле.

Йондоҙнамәләр кешенең үҙ-үҙенә булған баһаһын арттыра. Уларҙа бер ваҡытта ла кешенең кире сифаттары күрһәтелмәй. Күптәр йондоҙлоҡтарында бирелгән мәғлүмәткә ярарға ынтылып, йыш ҡына үҙен яҡшы яҡҡа үҙгәртә икән. Сөнки кеше психологияһында насарлыҡты кире ҡағып, яҡшылыҡҡа ынтылыу теләге тыумыштан һалынған.

Шул уҡ ваҡытта йондоҙнамәгә ышаныуҙың кире яҡтары ла бар. Ни тиһәң дә, йондоҙнамәлә аныҡлыҡ юҡ. Мәҫәлән, йондоҙнамәнең ун ике билдәһе тураһында мәғлүмәтте уҡып сыҡһаң, һәр береһендә лә һиңә генә хас сифаттар бар кеүек тойола.

Нисек кенә булмаһын, донъяла йәшәгән кешеләрҙе ниндәй йондоҙлоҡ аҫтында тыуыуына ҡарап, бер ҡалыпҡа һалып, уларҙың оҡшаш яҙмышы тураһында һөйләп булмай. Мәҫәлән, аҙналыҡ йондоҙнамәлә "арыҫландар"ҙы эшендә юғары үрләтәләр, тигән фараз бар, ти. Нисек инде ошо билдә аҫтында тыуған бөтөн кеше бер осорҙа етәксе булып китһен!

Йондоҙнамәгә һуҡырҙарса ышаныу кешегә үҙ ҡылығы, эше һәм тормошо өсөн яуаплы булыуға теләге ҡамасаулай. "Ни өсөн һеҙ минән әүҙемлек, шат кәйеф талап итәһегеҙ, мин тәбиғәтем менән пессимист, ялҡау һәм меланхолик. Ышанмаһағыҙ, ана минең йондоҙнамәмдә уҡып ҡара", - тап ошолай яуап бирергә мөмкин һеҙгә йондоҙҙар ҡоло.

**Ә шулай ҙа йондоҙнамә тураһында ни уйлауҙарын һорап, бер нисә кешегә мөрәжәғәт итеп ҡарарға булдыҡ:**

***Гөлсинә Сөнәғәтова, эшҡыуар:*** Мин йондоҙнамәгә ышанмайым. Күҙәткәнем бар: хәҙер һәр бер гәзит битендә сыҡҡан күҙаллауҙар бер-береһенән бик ныҡ айырыла. Әллә нисә сығанаҡтан төрлө мәғлүмәтте уҡыған кешенең башы әйләнеп, ҡайһыһына ышанырға белмәй тик йөрөй. Өҫтәүенә, ҡайһы бер йондоҙнамәлә һинең киләсәгеңде шул тиклем шомло итеп яҙып ташлайҙар. Ә бит бер ҡатлы кеше ошо кире мәғлүмәтте күңеленә яҡын алып, унын тормошҡа ашыуын көтөп йөрөй. Тимәк, ошо рәүешле ул үҙен хәүефле тулҡындарға көйләй, насар тойғолар менән йәшәй башлай. Минең өсөн бөтәһе лә үҙ ҡулымда, үҙ көсөмдә, тип иҫәпләү ышаныслыраҡ. Һәр кем киләсәк тормошон яҡты уйҙары, ниәт-маҡсаттары менән үҙе төҙөргә тейеш.

***Сәлиә Ғәйнетдинова, шәфҡәт туташы:*** Мин йондоҙнамә менән ҡыҙыҡһыныуын ҡыҙыҡһынам. Тик артыҡ мауығып, бар йәшәү рәүешенде йондоҙҙар ҡулына тапшырыуҙы аҡылһыҙлыҡ тип һанайым. Үҙемдең тормош тәжрибәмдән сығып, шуны әйтә алам: ир һәм ҡатындың астрология күҙлегенән тап килеү-килмәүе кеүек мәғлүмәттәргә ышанырға ярамай. Мин ҡасандыр, ошоға алданып, яратҡан кешем менән килеп тыуған аңлашылмаусанлыҡты йондоҙҙарға япһарып, унын менән ташлаштым. Бөгөн иһә ғәйептең үҙемдә булыуын аңланым. Мөхәббәт - ул ике йөрәк бөтөнлөгө, йәндәр берлеге, ә күк есемдәренең бер ниндәй ҙә ҡыҫылышы юҡ был изге бәйләнештә. Мин Павел Глобаның китаптарын уҡыйым һәм бер йылға яһалған күҙаллауҙарға ышанғандаймын. Төрлө гәзиттә баҫылғандарҙың авторҙары һәм аныҡлығы булмағанлыҡтан, уларҙы уҡып та тормайым.

***Сәлимә Бәҙғетдинова, эшҡыуар:*** Ҡасандыр бер районда радиола эшләнем. Ул ваҡытта йондоҙнамәләр саҡ модаға ингән осор. Интернет тигән нәмә юҡ. Аптырағас, һәр бер йондоҙлоҡ өсөн үҙем күҙаллауҙар яһай торғайным, йә булмаһа, иҫкеһен файҙаланам. Әлбиттә, был ялған, әммә халыҡҡа бик оҡшай торғайны. Үҙемде аҡлап шуны әйтә алам: һәр кемгә мин тик яҡшы, ыңғай яҙмыш вәғәҙә иттем, йәшәүгә булған ҡараштарын матурлыҡҡа көйләнем. Минең ялған астролог икәнемде белгән яҡындарым да, шулай уҡ мин үҙем дә ошо хәлдән һуң йондоҙнамәләргә бөтөнләй ышанмайым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йондоҙнамәләр бик үк насар ҙа, шулай уҡ абсолют дөрөҫлөк тә түгел. Астрологтар әйтеүе буйынса, ысынбарлыҡҡа тап килгән фараздарҙы кешенең тыуған айы, көнө, сәғәте, хатта минуты менән генә бәйләп, унын индивидуаль һыҙаттарын күҙ уңында тотоп ҡына төҙөп була. Иң һәйбәте - үҙ-үҙеңә астролог булыу. Көн һайын иртән тормошоғоҙҙо мөхәббәткә, һаулыҡҡа һәм, әлбиттә, хыялдарығыҙҙың тормошҡа ашыуына көйләһәгеҙ, барыһы ла һеҙ тигәнсә уң булыр.**

**Әлиә ИСМӘҒИЛЕВА әҙерләне.**

✓ *Шулай итә Көнбикә. Күп уйлап тормай. Атып алынған ҡуянды тотҡан шикелле итеп тәпәйҙәренән эләктерә лә ус аяһы менән ике-өс ҡат арҡаһына һуға. Ул арала тын алып ебәргән бала ла көр тауыш менән һөрәнләп ебәрә.*



Хәлде аңлаған Көнбикә, ҡолағанда бер аҙ ҡаймыҡтырған аяғында сатанлай биреп, ситкә йүгерҙе. Әммә уны аңғарып ҡалдылар һәм берәү артынан һыбай төштө. Һаман йүгереүенән туҡтамай, етеп килгәндең ҡайһы яғынанырaҡ тәңгәлләшерен күҙ ҡыры менән самалап, бая эләктергән ҡылыс ҡынын усында ҡыҫты ҡыҙ. Ағаслыҡҡа етәрәк кенә, ҡыуыусының ат тыны елкәһенә бәрелде, бына-бына уның суҡмары ла башына төшә тигәндә генә, йөнтәслим ҡасып барыусы ҡапыл боролдо ла, ҡыҙып килгән менгенең йүгәненә йәбешеп, бөтөн көсө менән аҫҡа тартты. Бындайға әҙер булмаған бахыр ат, туҡтап өлгөрә алмай, һөрлөгөп барып ҡолап китте. Атынан алғараҡ тәгәрәгән һуғышсыһы ҡалҡынып маташҡайны ла, арттан елкә тәңгәлен сыйып үткән ҡылыс уны кире ауҙарҙы. Сабыусы ҡоралын шул кәүҙә өҫтөнә ташланы ла шырлыҡҡа инеп сумды.

Тал-муйыл араһын көскә айырып, эйелә-бөгөлә, һуғыла-бәрелә төпкәрәк ашыҡты Көнбикә. Баҫҡынсыларҙың ҡалғандарҙы ҡырып бөткәс тә, ҡасышҡан ҡатын-ҡыҙҙы эҙәрлекләргә тотоноролон белә. Шулай ҙа йәйләүҙекеләрҙе үҙҙәренекенән бер нисә ир яландың икенсе осо тапҡырынан эйәртеп алып киткәнен дә аңғарҙы. Тимәк, былар шул яҡҡа юлланасаҡ. Бында, бәрелеш булған тәңгәлдә, эҙләмәстәр ҙә әле, тигән өмөт тә бар. Шулай ҙа ҡабаланырға кәрәк. Ул бит Баҙыянды ошо яҡҡа ебәргәйне. Һыу буйына төш тигәйне. Тыңланымы икән? Әллә йоҡо аралаш аңлап етмәй ҡалдымы? Әллә башҡалар менән бергә киттеме?

Йылғаға килеп сыҡҡас, яр буйлап бер аҫҡараҡ, бер өҫкәрәк йүгерҙе. Унда ла түҙмәй, шаптырлап һыуға төшөп китте. Ағым ыңғайына аҫҡа атланы. Апаһына ағым буйлап төшөргә ҡушҡайны, көн ярым тирәһе атлағанда үҙҙәренең йәйләүенә барып сығырға була. Шулай итһә, аҙашмаç, тигәйне. Тик Баҙыян, тирмә янынан ике аҙым китеп өйрәнмәгән Баҙыян, быны беләме инде?

Көҙгө һыу һалҡыны күн итектәрен ебетеп инеп, ҡыҙҙы алыш ярһыуынан айнытып ебәрҙеме, ул арыуыҡ атлағас ҡына әлеге иртәлә булған хәлдәрҙе төшөнөр хәлгә етте.

- Нимә булды был? Хоҙайым! Был ниткән яу булды?.. Баҙыян!.. Баҙыян... - тип, теленә нимә килә шуны һамаҡлап, берсә балтырҙарына ҡәҙәр батып, берсә яр ҡойоһонда тая-тая тәнтерәкләй бирҙе. Күпмелер барғас, ҡолағына ниндәйҙер ауаздар салынды. Ҡыҙ, ярға һикереп, шырлыҡҡа шыуышты. Теге ауаз тағы ҡабатланды:

- А-а-а! Ы-ыһ!..

Ҡатын-ҡыҙ тауышы ине был. Яралы ҡатын-ҡыҙ. Көнбикә тауыш сығарыусының ҡайҙалығын самалап, сырмалсыҡтарҙы йырып, шул яҡҡа ыңғайланы. Үҙе шулай ҙа ҡайышындағы хәнйәрен һәрмәне.

- Әсә-әй!.. А-аһ...

- Баҙыя-а-ан! - апаһының тауышын таныған ҡыҙ, һаҡлыҡты ла онотоп, ҡысҡырып ебәрҙе. - Баҙыян тейем! Баҙыян!

Ҡаңғырып йөрөй торғас, өҫтөнә лә барып сыҡты. Муйыл төбөндә салҡан ятҡан ҡатындын ҡобараһы осҡан, күҙ алмалары түгелеп сығырҙай булып аҡайған ине. Ул хатта Көнбикәне лә ҡапылда танparam.

- Нимә булды? Ҡайһы ереҥ? - ҡыҙ, апаһы янына сүгәләп, уның ни еренә тотонорға ла белмәне. - Нимәнән яраландың, Баҙыян, уҡтанмы? Нимәнән?..

- А-а-а... - апаһының ҡанлы итәген аңғарып, шунда ынтылғайны, тегеһе уның ҡулдарына сат йәбеште:

- Асма... Ы-ыһ..

- Яраңды ҡарайым, Баҙыян, йыуып бәйләйем дә ҡуҙғалайыҡ бынан.

- Яраланманым мин... Бала тыуа...

Көнбикә артына ҡолап китә яҙҙы:

- Нисек тыуа? Тыуҙырмай тор! Китә һалайыҡ, һуңғараҡ тыуыр!

Баҙыян тулғаҡ араһында йыш-йыш тын алды:

- Ҡалайтып тыуҙырмай торайым һуң?.. Килә бит бын...а-а-аһ!

Көнбикә апаһының эсендә бер нәмәһе өҙөлгәндәй булып асырғанып ауыртыныуына, ятҡан ерендә ҡыу үләнде сапсып-йолҡоп тулауына хайран булып, йоҙроғон ауыҙына тығып ыуаланыуҙан башҡа сара тапманы. Был ни хәл? Уның бит әле бала тапҡанды ла күргәне булманы. Бейә ҡолонлағанда ҡатнашты, хатта ҡолонға сығыуға ярҙамлашып та йөрөнө. Һарыҡтар бәрәсләгәнен дә ҡарай ине. Тик ҡатын-ҡыҙ донъяһынан алыҫ булып, усаҡ-түшәк тирәһендә йөрөүҙе өнәмәгәс, уны бындай донъяуи хәлдәрҙә ҡатнаштырмағандар ҙа икән шул. Еңгәләре күпме бәпестәр тапты, исмаһам, шуларҙың береһенең янында ултырһа ни булған...

- Терәле арҡамды, - Баҙыян ағас олононан ярҙам эҙләне. Көнбикә уны ҡултыҡ аҫтарынан алып һөйрәне лә, артындағы муйылға терәтә биреп һалды, биле аҫтына бишмәтен сисеп тыҡты. Ҡыҙ апаһын һөйрәп килтергән юлда ҡалған




ҡыҙыл эҙҙе лә, яланғас боттарҙы япҡан итәктең дә инде һығып алмалы ҡанға мансылыуын аңғарҙы.

- Баҙыян, ҡанға баттың бит! Шулай булырға тейешме ул? Баҙыян, ә, Баҙыян?

- Ю-уҡ... Улай булыуы насар...

- Нишәп насар, Баҙыян, нишәп? - Көнбикә ауырыу ҡатын тирәләй себешен ҡурсыған тауыҡтай өйөрөлдө.

- Ҡан улай... күп булырға тейеш түгел...

- Ҡалайтайым һуң? Ә? Баҙыян, ҡалайтып туҡтатайым ҡаныңды?

- Көнөкәй... ултыр әле... - апаһы уға хәлһеҙ ҡулын һуҙҙы.

- Йә, - ҡыҙ ултырып, уның нәҙек бармаҡтарын ҡайнар устарына ҡыҫты, - Йә, апайым...

- Мин... ныҡ хәлһеҙләнһәм... эсте ҡырҡып... баланы сығар...

- Нисек? Ҡырҡып?..

- Хәнйәрең менән... кендектән аҫҡа... ныҡ терәмәй... осо менән... генә...

- Баҙыян, нимә һөйләйһең һин? Һарыҡ бәрәсләй әле... ана... бейәләр ҡолонлай... һин дә, хәҙер, ҡо... бәпәйләрһең...

Апаһы уның ҡулын һындырып алып бара, ҡайҙан ундай көс килгән тиһең үҙенә:

- Көнөкәй, һүҙеңде бир миңә... Бир һүҙеңде!

- Ниндәй? Ниндәй һүҙҙе?

- Баланы үлтермәйем... Сығарып алам... тигән.

- ...

- Көнөкәй!.. Көнөкәй!.. - тип өҙгөләнде ҡатын, - Ы-ы-ыһ! А-ай!.. Көн...

- Ярай! Ярай, апай, - тип, башҡа бер нисек тә ярҙам итә алмауына әсенеп, апаһының һыуланып туҙғыған сәстәрен ипләне, тирләгән маңлайын, сикәләрен һөрттө, үҙенең ике күҙенән тупырлап йәштәре ҡойолдо. Был хәтлем ҡурҡҡаны һәм сараһыҙ ҡалғаны юҡ ине уның. Хатта... хатта Тоҡан бейҙе сәнскәндә лә.

- Илайһыңмы?.. - Баҙыян, ғазаплы йөҙөн көскә яҙып, йылмайғандай итте, - Һинең дә... илағаныңды... күрҙем бына... Мин һине... илай белмәйҙер... тиһәм.

- Баҙыян... Баҙыя-ян... һин үлеп ҡуйма инде... - апаһына ныҒыраҡ эйелде. - Һин үлһәң, мин дә үләм.

- Юҡ... Һин үлмәйһең... Һин бит көслө. Баланы ҡарайһың... Атаһы ҡайтһа, бирерһең.

- Ҡарамайым! Үлеп ҡара! Һыуға ташлайым балаңды... үлһәң!

- Улай тимә... Көнөкәй?.. Әйт... ҡарайым, тип.. Әйт... А-а-айй...

Көнбикә апаһының битен күкрәгенә ныҡ итеп ҡыҫа, шулайтһа, исмаһам, ыңғырашҡаны ишетелмәй. Ә уныһының хәле бөтөп барғанында әллә эше юҡ, һаман үҙенекен һөйләй:

- Әйт әле... Көнөкәй... әйт...

- Ҡарайым. Ҡарайым балаңды, апай, тик һин тыуҙыр әле уны. Йә инде, ныҒыраҡ көсән. Йә...

Көнбикә, бейәләргә ярҙам иткән саҡтағы әмәлдәрен иҫләп, Баҙыяндың күлдәк түшен хәнйәре менән биленә ҡәҙәр уйып ебәрҙе лә аҫҡа төшә биреп ҡатҡан ҡорһағын баҫҡыланы. Эстә бала һауытына һыя алмай тулай. Тулғаҡтың яйын тотоп алып, шул ыңғайға эсте аҫҡа һыпыра, һылай башланы. Бармаҡтары менән баланың кәүҙәһен һәрмәп, уға этелергә, сығыу юлына көслөрәк һөжүм итергә ярҙам итте. Ул да булмай, бишмәтен сискәндә алып ташлаған күн билбауын табып алып, ҡорһаҡ өҫтөн шуның менән быуа биреп ҡуйҙы. Көтөүселәр бейә ҡолонлай алмағанда шулай иткәндәрен күргәне булғайны. Был эштәрҙе башҡарғас, тулғаҡ тын алғыһыҙ булып ҡыҙыуланды, Баҙыян да, аҡтыҡ көсө менән ҡалҡына биреп, һеңлеһенең беләктәрен өҙгөләне:

- А-а-аааhhh!

Унан ҡапыл тынды ла артына ҡоланы. Итәк аҫтында нимәлер "бүлк-бүлк" итте. Имгәкләп килеп асып ебәрһә... ҡан һәм лайла араһында, тын алырға маташып, бала буталана!

- Баҙыян! Баҙыян бында бәпәй! - үҙе һаман, итәкте тотҡан килеш, ҡарап ҡатҡан.

- Ал... ала һал!.. Кендеген ҡырҡ! - апаһының ҡушҡанына буйһоноп, хәнйәр осо менән кендеген өҙөп ебәреп, баланы сирҡанып ҡына тотоп күтәрҙе. Тас ҡан, сей булып, шунда ла аяҡ-ҡулын болғап, ҡороға сығарып ташланған балыҡтай ауыҙын асҡылаған был нәмәне ибәтәйһеҙ итеп өҫкә күтәрҙе.

- Баш түбән тотоп... арҡаһын ҡаҡ!.. Тиҙерәк бул! - Баҙыян, ағасҡа һөйәнеп, ярымасыҡ күҙҙәре менән һөҙөп ҡарай. - Тон-соға... Йәһәт... терәк...

Шулай итә Көнбикә. Күп уйлап тормай. Атып алынған ҡуянды тотҡан шикелле итеп тәпәйҙәренән эләктерә лә ус аяһы менән ике-өс ҡат арҡаһына һуға. Ул арала тын алып ебәргән бала ла көр тауыш менән һөрәнләп ебәрә:

- Үә-ә-ә! Әүүә-ә-ә!

Был тауыштан үҙенә лә йән инеп киткән Көнбикә, бар донъяһын онотоп, көлөп ебәрә:

- Ҡара, Баҙыян! Илай был, ҡара!

Баҙыяндың йонсоған йөҙөндә йылмайыуға оҡшаған бер сырай һыҙылғандай итә. Тик уның бөтөнләй генә лә хәле юҡ. Уны тиҙерәк йәйләүгә алып ҡайтып ҡына ҡотҡарып буласаҡты аңлаған ҡыҙ, апаһы аҫтындағы бишмәтен һөйрәп сығарып шуға баланы урай ҙа ипләп кенә әсәһе ҡуйынына һала.

- Баҙыян, мин йәһәт кенә һал яһайым, һеҙ ятып тороғоҙ. Хәҙер.

Хәнйәр менән нәҙегерәк тал-муйылдарҙы ҡырҡып-тумырып алып, кәүҙә оҙонлоғонда итеп үлсәп, ботаҡ-ярыһынан таҙалап, ҡамыш үләндәрен ишеп, ҡуша бәйләп сыҡты. Бер кешелек урын әтмәләгәс, уны һөйрәп алып барып, йылғаға төшөрҙө. Унан кире ярға тарта бирҙе лә тегеләр янына килде. Бында эштәр көйләнгәндәй ине. Баҙыян бәпесенә имсәк ҡаптырған, тегеһе мыҡырлай-мыҡырлай имергә өйрәнеп маташа.

- Әйҙә. Башта һине... - тиһә лә, апаһы балаһын ҡулынан ысҡындырманы. Уны шул килеш саҡҡа торғоҙоп, яртылаш күтәреп тигәндәй, һалға алып барып һалды. Һалды ағымға төшөргәс, бер ҡулы менән тотоноп, йәнәш атланы. Әсәһенең асыҡ түшендә ятҡан бәпәй, һаман ауыҙын асҡылап, имсәкте һәрмәне.

- Мәскәй әле ул, яңы тыуһа ла, - тип көлгән булды Көнбикә, уның был ҡыланышынан.

Йәш әсә сабыйының башынан һыйпаны:

- Ашамһаҡ булмаҡсы. Атаһы ла ашамһаҡ уның...

- Атаһы?.. - шул ваҡыт Көнбикә баланың атаһы кем икәнен иҫләне. Йөрәге тулап китте. Айыухан!.. Айыухан... Ҡайҙаһың һин? Нишләп беҙҙе был михнәттәрҙән ҡотҡармайһың?..

* * *

Шаптырлап шулай төш ауғанға тиклем йөҙҙөләр. Ағым өҫтөндәге һал алдынан йүгергән шаршылағы ҡыҙылһыу юлаҡҡа ҡараған һайын Көнбикәнең эсе өҙөлдө. Ҡаны туҡтамай ине Баҙыяндың. Шулай ҙа ул, өҫтөндәге йоморсоғон түшенә ҡуша ҡыҫып тотҡан килеш, тыныс ҡына ята. Күҙҙәре лә асыҡ. Һауалағы болоттар ағышын ҡарапмы, аҫтағы йылға тауышын тыңлапмы килә. Балаһы ла, донъяһы теүәл булып, йоҡлай, күрәһең. Тағы ла күпмелер килгәс, һыу һурыуҙан сәңкегән аяҡтарын ял иттереп алмаҡ булып, һалды ярғараҡ тартты ҡыҙ.

- Аҙ ғына ярҙа ултырып алайым да. Итекте сисеп, яланаяҡланмаһам, табанды иҙҙе бит.

Һалды ярғараҡ һөйрәп ҡуйып, һөҙәк ташлыҡҡа терәлеп, арыған аяҡтарын һуҙҙы. Рәхә-әт! Хәҙер, саҡ ҡына... Тик һалдағыларға күҙ һалғас, ял ҡайғыһы китте. Баҙыяндың күккә төбәлгән ҡараштары... туңған ине...

- Баҙыян! Баҙыя-а-ан!

Өҫтөндәге баланы йолҡоп алып, ҡатынды һелкетте:

- Баҙыян, тейем! А-а-а! Баҙ-ҙыя-ан... - инде ни эшләтһә лә, һалдағыға барыбер. Үлгән ине апаһы. Быны аңлауҙан ҡыҙ аҡылын юйғандай булды. Шаптырлап һал тирәләй әйләнде, һыңар ҡулында һелкkeләгән сабыйҙың бауылдап илауын да ишетмәне, арғы яр буйлап теҙелгән тауҙарҙы яңғыратып, ҡысҡырҙы ла ҡысҡырҙы:

- А-а-ай! А-ай! Әсә-әй! Баҙыян! Баҙыян үлгә-ән!..

**(Дауамы бар).**

ӘҘИП ӘЙТҺӘ...

# ТУРА ҺҮҘ

**Мин фекер-уйланыу-күҙәтеүҙәремдә ошондай уймаҡтай ғына ҡалыпҡа һалырға яратам. Шуларҙың береһен генә "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға тәҡдим итәйем әле, тинем...**

Башҡалар иҫәбенә, бурысҡа йәшәргә эйәләшкән әҙәмдәрҙе йәки тотош илдәрҙе бөтәнсә - тир түгеп, үҙ хеҙмәте иҫәбенә көн итергә өйрәтеү айыуҙы бейергә өйрәтеүгә тиңдер, моғайын. Улар тарафынан тормош алып барыуҙың бер ысулы итеп ҡулланылған алдашыу, эҙ яҙҙырыу, күҙ буяуҙар тора-бара тирә-йүндәгеләрҙе туйҙыра, алдашыусыларға ышаныс юғала. Шулай итеп, был ысулдың көсө бүҫкәрә һәм, теләһәң - теләмәһәң дә, Тура һүҙ өҫкә сыға.

*Дөрөҫөн тура әйткән ғүмер баҡый*
*Туғанына, дуҫҡа ярамай.*
*Бөгөн яу ҡоралы - тик Тура һүҙ*
*Көслө, көсһөҙлөккә ҡарамай.*

*Намыҫ юғалтҡандың бөгеренә*
*Үткер хәнйәр, уктыр - Тура һүҙ.*
*Күңеленә тынғы бирмәҫ шырау,*
*Аяҡ аҫтарына утлы ҡуҙ.*

*Тамыр тармаҡтары тәрәнәйгән*
*Алдыҡ сәйәсәте ғәйрәтен*
*Шиңдерерме әммә ҡыйыу әйткән*
*Тура һүҙҙең генә шөһрәте?*
*Яһалмалыҡ ялын көйҙөрҙәй*
*Бармы уның көсө, ҡөҙрәте?*

Ер шары, унда йәшәгән ете миллиард тирәһе халыҡ менән идара итеү теләгенең, инде тулышып, ғәмәлгә ашырылыу хәрәкәттәренең көсәйгән мәле - XXI быуат. Сыңғыҙ хан, Гитлер кеүек шәхестәрҙән ҡала ошо ымһындырғыс теләк менән янған Ҡушма Штаттарҙың мин-минлеге Ер шарының именлегенә, илдәр бөтөнлөгөнә, халыҡтар тыныслығына янай. Диңгеҙ ҡуйынында ла, ер өҫтөндә лә, һауа киңлектәрендә лә "ҡылыс" уйнай, "йәшен йәшнәй", тамуҡ уты тоҡанырға ғына тора бөгөн:

*Илдәр араһында бәйләнештәр-*
*Үрмәкестең һиҙгер ауылай;*
*Тигеҙләнеш китһә, ҡупмаҫ, тимә,*
*Ерҙә ғәрәсәттәр, дауылдар…*

*Ер шарыбыҙ туңҡәрелмәҫ, тимә,*
*Шарлап аҡмаҫ, тимә, океан.*
*Ерҙең аҫты өҫкә ҡалҡмаҫ, тимә,*
*Яҡламаһа беҙҙе Изге аң!*

*Тик һай аҡыл, һантый ғына баҫыр*
*Баҙнат итеп "Ҡыҙыл төймәгә"…*
*Именлекте яҡлап, яуға ҡалҡты*
*Тура һүҙлек кеше һөймәгән.*

*Беҙ именлек яҡлы!*
*Үткән һуғыштарҙан*
*Әле һыҙлай, һыҡрай күңелдәр;*
*Халҡым һаман түләй һуғыш хаҡын …*
*Былдай хәлдә белмәй күп илдәр.*

Эйе, Бөйөк Ватан һуғышы хаҡын бөгөнгә көнгә тиклем түләүсе Рәсәй халҡы "Тура һүҙ" ҡоралын ҡулланырға мәжбүр. Ер йөҙөндәге илдәрҙе, халыҡтарҙы берберенә һөскөртөп, һуғыш, үлтереш-ҡыйралыштар тыуҙырыу - үҙҙәрен әллә кем итеп тотҡан илдәр өсөн табыш, килем сығанағы. Беҙ быңдай ғәрәсәттәргә Ғыйраҡ, Ливия, Сүриә һәм башҡа илдәр миҫалында шаһиттарбыҙ. Миллиардлаған халыҡтар шаһит.

*Бөгөн Ер йөҙөндә халыҡ*
*Миллиардлаған.*
*Бик күп беҙ!*
*Әммә байтаҡ хакимдарға*
*Халыҡ - масса!*
*Тик сүп - беҙ.*
*Ябайҙың аңы тәрәндән,*
*Тик күпте белә алмай,*
*Өҫтән яуған хәбәр-ямғыр*
*Ышанысын яуламай.*
*Эфирҙарҙан буш һүҙ көн-төн*
*Зиһен өсөн ярышта.*
*Ергә һөйкәлгән йөрәкле,*
*Зирәк, ябай ҡарыша.*
*Белә: Хоҙай биргән ғүмер*
*Әллә ни оҙон түгел,*
*Яһалмалыҡ серен асып*
*Бунт күтәрә күп күңел.*
*Ә инде яһалмалыҡтың*
*Ялтырына инанған,*
*Намыҫына ҡаршы төшөп*
*Бер көн ҡыйыҡ юл алған*
*Ни иленә, ни халҡына…*
*Зыяны ла етерлек…*
*Был донъяла һынау үтә*
*Һәр кем!*
*Иҫтәр китерлек!*

Кеше аҡылы әүәләгән бөгөнгө цивилизация һәр илдең, һәр кешенең тормошон үтә күренмәлегә, тынысլығын юғалтҡан, тәбиғилеген юя барған көнкүрешкә әйләндерҙе. Кешелектең тыумышынан һалынған тәбиғи сифаттар юҡҡа сығып, яһалма донъяла яһалма аҙыҡ йыйып, яһалма идеяларға ымһынып, яһалмалыҡҡа буйһоноп көн итеү еңеп бара. Кешелектең гүзәл сифаттары юйылып бөтмәҫ элек, Тура һүҙҙе, дөрөҫлөктө ҡурҡмай әйтеү зарур! Ул, ялғанлыҡтың маңлайына бәреп, зиһенде һиҫкәндерерлек, уятырлыҡ, уйландырырлыҡ булһын, фекер офоҡтарын киңәйтһен, аң-аҡылыбыҙҙы хәрәкәткә килтерһен! Кеше, кешелеклелеген юғалтмаҫ элек, үҙ-үҙен яңынан асып, аптыраһын, һөйөнһөн һәм гүзәл асыштарын балаларының күңеленә һеңдерһен ине...

**Фирҙәүес БӘШИРОВА.**

ЗАУЫҠ

### КҮҢЕЛ КҮГЕМ АЯҘ ӘЛЕ...

Күңел күгем аяҙ әле, яҡты,
Көттөрмәйсә сыға ҡояшым,
Йырлы, нурлы итә тирә-яҡты,
Ялҡын утын үҙе ҡоя шым.

Күҙ алдарым яҡты әле минең,
Зарланырлыҡ түгел донъяма,
Илһам ҡанаттарын елпеп тора,
Ләйсән ямғырылай моң аға!

Моң менән бит кеше күңелдәре
Нескәрә лә һағыш кисерә,
Онотолмаҫ хәтирәләр тыуа,
Мөхәббәте төшә иҫенә.

О һөйөүҙең ҡөҙрәттәре көслө,
Бәндә балҡый ошо хис менән,
Ялҡынлана ошо тойғо менән,
Түбәнһенмәҫ әммә һис кенә,
Башын эймәҫ әммә һис кемгә!

### КҮҢЕЛ СӘМЕ

Ҡөҙрәте булыр һүҙеңдең,
Әгәр сыҡһа йөрәктән,
Тик был аҫыл мөғжизәгә
Эйә була һирәктәр.

Һүҙең бәндә рәнйетмәһен,
Уйлап табып нахаҡты,
Йә ҡыймаһын барған юлын,
Үҙең тапҡан юл яҡты.

Эҙләгән юл - үҙеңдеке,
Хәләл булыр тапҡаның,
Тыныс атыр таңдарың да,
Уңышһыҙлыҡ ялтаныр.

Һүҙ ҡөҙрәте, һүҙ ҡеүәте
Балҡыта тормош йәмен,
Күтәрәйек һүҙ ҡәҙерен,
Талапсан күңел сәме!

### РӘСЕМДӘРГӘ ГЕНӘ ҠАРАП...

Рәсемдәргә генә ҡарап,
Ҡалды һине иҫләргә,
Йәнем сығып барған саҡта,
Бик күңелһеҙ кистәрҙә.

Әсәй, мине берәй ваҡыт
Кисерерһең микән һин,
Үкенестәр быуа, быуа,
Үҙ йәнемдә теткән мин.

Һинең йәште күптән үттем,
Аҡыл индеме миңә?

**Миңлегөл ХИСАМОВА**

Ҡара ҡандарымды йоттом,
Тик ҡаҙалды миң энә.

Илама, әсәй, илама,
Минең өсөн бошонма,
Кәңәш биреп йыуат әле,
Рәсемең баш осонда.

Оло йәшкә еткәндә лә,
Кәрәк һинең өгөтөң,
Йыуат, әсәй, ауыр саҡта,
Юғалмаһын өмөтөм.

### ҮҘЕ БЕЛЕР...

Сөм-ҡараға сумды көндәрем,
Алҡымымдан алды төндәрем,
Миңә тейеш ошо язалар,
Хаталарым йәнгә ҡаҙала.

Ҡасан да бер көндәр ағарыр,
Ауыр төштәр елдә тағалыр,
Төндәремә килер мәрхәмәт,
Уңалыр, тим, бәлки, йәрәхәт.

Кем үткәргән ҡара көндәрҙе,
Кем үткәргән упҡын-төндәрҙе,
Үҙе күрер яуап күперен,
Үҙе белер нисек үтерен.

ТОРМОШ КҮРЕНЕШТӘРЕ

**Хәйҙәр ТАПАКОВ**

### Ауыҙ бешеү

Исламғәле ағай замана ауырыуы менән яфаланды. Һин дә мин, һәүетемсә генә йәшәп яткан бер көндә, көтмәгәндә-уйламағанда эскегә һабыша ла китә, ҡоромағыр. Тормош ҡәҙерен, көн матурлығын, тормош йәмен күрмәй, тоймай, ҡырҡыу еҫ борхотоп, ҡайҙа етте шунда тинтәкләнеп һөйрәлеп йөрөй. Аҙ тигәндә ай самаһына һуҙыла йонсоткан, миктәткән ҡәһәрле сире. Ауыҙына икмәк валсығы ла ҡапмағанлыҡтан, ҡаҡ һөйәккә ҡала, ҡырынмаҫ, битйөҙөн һаҡал-мыйыҡ баҫа, күҙ менән ҡаш араһында ҡурҡыныс баҡса ҡараҫҡыһына, өркөткөс албаҫтыға, бала-сағаҡото осоп ҡасыр бапаҡҡа әүерелә. Һөйәк темеҫкенгән бурҙайҙай әйенселәп арыған, тамам хәлдән тайған, кинәт кенә башына аҡыллы уй-фекер төшә әллә, эсеүенән шып туҡтай. Ҡырҡа туҡтай. Шунан тағы ла ниндәйҙер арауыҡ әҙәм рәүешле көн итә башлай: тәүҙә картуфлыҡ осондағы ҡара мунсаһын яғып йыуынып, таҙарынып, ах та ух килеп эләүкәлә аунап сабынып, тәненә сихәт, йәненә көс ала, ҡырынғас, еңгә йәшереп-тыҡшырып тотҡан одеколонды аҫҡалаҡ битенә бөркҡәндән һуң, өйләнгән саҡтағы яңы фасонда тегелгән костюм салбарын, Гагарин Йыһанға осҡан йылда үткенсе сиғандар һатҡан, эре биҙәк төшкән күлдәген кейеп, йышылып бөткән, имсәк быҙау муйынсаһына тартым галстугын таға ла, ҡыҫҡа ҡамыт аяҡтарын кирә баҫып, сафтан саф фәрештәләй ишек алдына, урамға сығып, таш балбалдай ҡайҡая. Һәм тирә-яғына яңы тыуған сабыйҙай айыҡ, ҡыҙыҡһыныусан, тикшереүсән, һәммәһенә йәне көйөп үсеккән ҡарашын ата. Бәйләнсек тексәйеүгә, ғәҙәттә, гонаһ шомлоғона ҡаршы, эсеп йөрөгән ир-ат эләгә. Уға шул ғына кәрәк тә! Аҙып-туҙған, ауылдың йәмен, тотош районды ҡәҙерен ебәргән теге йүнһеҙҙәрҙе эттән алып эткә һалып һүгергә тотона, ҡыҙған табала бейетә генә. Ошоноң менән генә сикләнһә, ҡана ла һуң, юҡ, ауыл Советына барып, ауылдың барлыҡ эскеселәрен йыйып алып, район үҙәгендә милиция пунктына 15 тәүлеккә ебәреүҙе талап итә. Талап итеп кенә ҡалмай - янаулы тауыш менән бойора!

Ниндәйҙер сара айҡанлы ойошторолған йәмәғәт табынында ултырабыҙ. Сираттағы оҙайлы эсеүен башлап өлгөрмәгән Исламғәле ағай янымда ата күркәләй ҡабарған, эргәһенә яҡын юларлыҡ, һүҙ ҡатырлыҡ түгел. Оло кеше бит, уныһын-быныһын алдына шылдырып һалған булдым да ипле генә, түбәнселекле генә тәҡдим иттем тегеңә:

- Ағай, бынау һаумал ҡымыҙҙан ауыҙ ит, әллә Әбйәлил буҙаһын ҡойоп бирәйемме?

- Был ниндәй урынһыҙ тәҡдим, мырҙа, абзыйыңды эскегә димләмәксеһеңме, ҡотортмаҡсыһыңмы!

- Нишләп улай тиһегеҙ, аңлап етмәнем бит әле?

- Юғары белемле була тороп, ҡымыҙҙа ла, буҙала ла алкоголь барлығын белмәйһеңме ни, наҙан!

Шулай инде, ҡайнарға ауыҙы бер бешкән әҙәм һалҡын һыуҙы ла өрөп эсеүсәнгә әүерелә.

### Аҡылһыҙлыҡ

Бер әсә ике йылдан ашыу улының әрменән ҡайтырын көттө. Түҙемһеҙләнеп, көндәрен генә түгел, сәғәттәрен һанап көттө. Әсә күңеле балала, бала күңеле далала, тиҙәр бит, тегеһе ҡайтты ла, күп тә тормаҫтан, уны тағы ла ике йылға яңғыҙын ҡалдырып, район үҙәгенә эшкә китте, сөнки елғыуарға ҙур ер, йәштәр күп булған урын кәрәк ине. Ошо хаҡта улыма һөйләп алдым.

- Ҡалай бәғерһеҙ, ҡаты күңелле, аҡылһыҙ булған икән ул егет, - тине улым.

- Килешәм, ғәзел баһа бирҙең, - тим ситкә ҡарап. - Ә һин беҙҙе бер ваҡытта ла иғтибарыңдан ҡалдырма, барлығыбыҙҙы, ярҙамыңа, иғтибарыңа мохтаж икәнлегебеҙҙе онотма, хәтереңдән сығарма!

Ул бәғерһеҙ, ҡаты күңелле, аҡылһыҙ кеше мин инем бит! Улыма ошо хаҡта әйтһәм, ҡәҙерем китер, уға кәрәгем бөтәр һымаҡ. Өсөнсө затта һөйләп, сит кешене яманлау еңел, ә бына үҙеңде ғәйепләү...

ИНТЕРНЕТТАН



# СӘЙҘӘН ДӘ ҺИМЕРӘЛӘР

■ Кокос сәтләүеге майы артыҡ һимеҙлекте дауалау, шулай уҡ инсульт һәм Альцгеймер ауырыуын иҫкәртеү өсөн файҙалы. Был турала Квинсленд (Австралия) ғалимдары белдерә. Уларҙың фекеренсә, кокос майы диабет һәм йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән яфаланыусыларға ярҙам итәсәк, сөнки был продукт холестерин кимәлен түбәнәйтә һәм инсулин кимәлен нормаға килтерә. Быға тиклем фәндә Британия ғалимдарының кокос майының криесты булдырмаҫка булышлыҡ итеүе тураһындағы асышы билдәле ине. Бынан тыш, кокос майы еңел үҙләштерелә һәм матдәләр алышыныуын әүҙемләштерә.

■ Йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарына килтереүсе төп сәбәптәрҙең береһе булып юғары холестерин тора. Етмәһә, бөгөн был ауырыуҙар йәшәрә һәм 52 процент осраҡта ваҡытынан алда үлемгә йәки инвалидлыҡҡа килтерә. Статистика буйынса, 30-50 йәштәге ир-егеттәрҙең холестерин кимәле күпкә юғарыраҡ, был инде миокард инфарктына тура юл. Майлы кислоталар организмда барлыҡҡа килмәй, шуға ла дөрөҫ туҡланыу кәрәк. Аҡ майҙа, иттең майында булған ауыр майҙар организмға файҙа килтермәй.

■ Хәҙер ас студенттар юҡ, ти Америка ғалимдары. Фән менән шөғөлләнеүсе йәш кешеләрҙә һимеҙлек йышыраҡ күҙәтелә. Америка студенттары колледжда 4 йыл белем ала. Әгәр ҙә уҡый башлаған ғына осорҙа 23 процент егет һәм ҡыҙ һимеҙлектән яфаланһа, уҡып бөткән мәлдә ундайҙарҙың һаны 41 процентҡа етә. Уртаса 4 йыл эсендә студенттар 4,5 килограмм ауырлыҡ йыя. Билдең артыҡ йыуанайыуының сәбәбе ғәҙәти - уҡыуға һәм социаль тормошҡа баштан сумған йәштәр йәшелсә кеүек файҙалы ризыҡтар менән туҡланмай һәм спорт менән шөғөлләнмәй.

■ Кемдең үҙәге көйә - һул ҡабырғаға ятып йоҡларға ғәҙәтләнһен. Һул яҡҡа ятып йоҡлағанда гравитация нәҙек эсәктәге ризыҡ ҡалдыҡтарын йыуан эсәккә этеп сығара. Тимәк, аш һеңдереү эшмәкәрлеге яҡшыра. Йөрәк - кеше организмындағы иң мөһим ағзаларҙың береһе. Һул ҡабырғала йоҡлаһағыҙ, тартыу көсө йөрәк йүнәлешенә ҡарай ҡан йөрөшөнә "ярҙам итә", тимәк, йоҡлаған саҡта йөрәкте көсөргәнештән арындыра. Был ғәҙәт талаҡты ла сәләмәтләндерә. Лимфа төйөндәре кеше һаулығында ҙур роль уйнай. Тәндең һул өлөшө өҫтөнлөклө лимфатик яҡ тип иҫәпләнә, һул ҡабырғала йоҡлаған саҡта организм лимфаны әүҙемерәк фильтрлаясаҡ. Варикоз менән яфаланыусыларға мотлаҡ һул ҡабырғала йоҡларға кәрәк, ҡан әйләнеше яҡшыра. Ауырлы саҡта һул ҡабырғала йоҡлау йөрәктең ҡан әйләнешен яҡшырта, был әсәгә лә, балаға ла яҡшы тәьҫир итә.

■ Америка ғалимдары ябыҡырға теләүселәргә сәйҙән баш тартырға кәңәш итә. Дөрөҫөрәге, сәйҙең зыяны юҡ та, әммә уны йыш, етмәһә, нимәгәләр ҡушып эсеү диетаны юҡҡа сығара. Шәкәрләп тә эсһәгеҙ, артыҡ калориялар йыясаҡһығыҙ. Көн һайын биш сынаяҡ татлы сәй эсәһегеҙ икән, йылына бер килограмм артыҡ ауырлыҡ йыяһығыҙ.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# ДҮРТ ФӘРИҘӘ МЕНӘН НУРИЯ...

## ауылыбыҙға ҡот бирә

**Ғәҙәттә, йәштәрҙең ауылда төпләнеп ҡалыуын уның киләсәге менән бәйләйбеҙ. Ауылда атай нигеҙен һыуытмай, шыңғырлап торған ҡарағай йорттар һалып инеүселәргә, итәк тултырып балалар үҫтереүселәргә ҡарап, тимәк, ауыл йәшәй әле, тип фекер йөрөтөргә ғәҙәтләнгәнбеҙ. Был да хаҡ. Әммә, төптән уйлап ҡараһаң, ошо йәштәргә өлгө, үрнәк булып торған инәй-олатайҙар иңендә бит беҙҙең бәләкәй төбәктәребеҙҙең киләсәге. Улар тыуған ерендә ерегеп, хатта әллә ниндәй аҡсалы эштәр булмаған ваҡытта ла, шәхси хужалығына ғына күҙ терәп, мал көтөп, баҡса үҫтереп, колхозда бил бөгөп донъя нығытҡан, балалар уҡытҡан, бынамын тигән итеп етеш тормошта йәшәгән, хәҙерге көндә иһә матур ҡартлыҡ көндәре менән башҡаларға, шул иҫәптән йәштәргә өлгө булып торалар. Күгәрсен районы Һапаш ауылына ҡот биреп йәшәп ятыусы шундай ағинәйҙәрҙең бер нисәһе менән аралашыу, хәтирәләр уртаҡлашыуҙан бер эпизод тәҡдим итәбеҙ.**



### Нурия инәй

**Биш уланға ғүмер һәм матур тәрбиә биреп, үҙаллы тормош юлына аяҡ баҫтырған Нурия инәй Әминева 83 йәшен тултырған.**

- Икешәр гектар сөгөлдөр алып утай торғайным, - тип һөйләп китте ул үткәндәрен хәтерләп. - Бер йылы хатта районда сөгөлдөр утау буйынса чемпион да булдым. Заманы шулай булғандыр инде, еңеллеккә өмөт итмәнек. Хәҙер генә, уйлап ҡараһаң, нисек күтәргәнбеҙ икән ул хәтлем эште, ауырлыҡты тип уйлап ҡуйһың. Бөгөнгө һымаҡ шарттар булманы. Иҙелдән һыу ташыныҡ: мунсаға ла, кер йыуырға ла, эсергә лә, тигәндәй. Малын да ҡараныҡ, балаларын да үҫтерҙек, колхоз эшенә лә өлгөрҙөк, донъя ла көттөк, ауыл кешеһе бит инде беҙ...

Улдары күҙле-башлы булып, өйләнеп, донъя нығыта башлағас, әсәләренә еңел булһын тип, инәйҙе Мәләүезгә күсереп алып китәләр. Йәнәһе, ҡала ерендә оло кешегә йәшәүе күпкә рәхәтерәк: һыу ташып йөрөргә түгел, ишек алдында сүпләнеп, бил бөгөргә кәрәкмәй, бөтә уңайлыҡтар ҙа бар. Шулай ҙа ҡала кешеһе булып китә алмай Нурия инәй. Күп тә тормай, Һапашта үҙенең элекке йортона күршеләш кенә йорт һатып алып, ҡайтып та төшә. Уландары Нурия инәйҙе матур ҡарай. Бер емерелеп торған ере юҡ йорт-ҡураһының, ишек алды йәм-йәшел ҡаҙ бәпкәһе үләне. Ә баҡсаһы тураһында инде айырым һөйләрлек. Бер ҡый үләне юҡ түтәлдәрҙә.

- Иртүк торам да, ҡош-ҡортҡа ем биреп, ул-был эшемде бөткәс, баҡса утарға сығам. Көн эҫеһендә йөрөп булмай, шуға иртәле-кисле үҙ яйыма ғына йөрөп эшләйем. Әлдә кире ҡайтҡанмын ҡаланан, тип ҡыуанам хәҙер. Ҡартайған көндә үҙ ерендә рәхәтләнеп, көнгөр-ҡаңғыр килеп йәшәп ятыу -үҙе бәхет инде. Балалар аҙна һайын тиерлек ҡайтып тора, унылын-быныһын эшләп, ярҙам итеп китәләр. Ҡапҡа алдына сығып, күрше-тирә менән һөйләшеп ултырһаң да, йәнгә рәхәт бит ул. Бала-сағалар ҙа байтаҡ ауылда. Уйнап йөрөгән балалар "Һаумы, инәй!" тип ҡысҡырып үтһәләр ҙә, ҡыуанып тороп ҡалаһың, - тип эске ҡыуанысын йәшермәй һөйләй Нурия инәй.



### Рәфҡәт Фәриҙәһе

**Рәфҡәт олатай менән 55 йылға яҡын донъя көткән Фәриҙә инәй ҙә ысын мәғәнәһендә өлгөлө ғаилә хужабикәһе.** Мине оҙатып йөрөгән Мөслимә апай менән барғанда, ул ҡарты менән баҡсала ҡурай еләге йыя ине. Ҡуйы булып үҫкән ҡыуаҡлыҡ араһынан үҙ-ара ипле генә итеп һөйләшкән тауыш ишетелеп-ишетелеп ҡала. Беҙ улар эргәһенә ынғайлайбыҙ.

Ике балаһын юғалтыу ҡайғыһын кисерһәләр ҙә, ауырлыҡтар алдында бөгөлөп ҡалмай, мосолмандарға ғына хас сабырлыҡ менән күтәреп, тәҡдиргә күнгән инәй менән олатайҙың ошолай матур йәшәп ятыуҙары ысын мәғәнәһендә һоҡландыра.

- Баҡса үҫтерәбеҙ, мал да тотабыҙ, - тип һүҙен башлай Фәриҙә инәй.- Һыйырҙы быйыл ғына бөтөрҙөк. Өйрәгән, ҡаҙын йыл да ҡарап үҫтерәбеҙ былай. Тауыҡтар тураһында әйтеп тә тормайым. Тауыҡ, тигәндән, элек эште лә беҙ нәҡ шул хөкүмәт тауығын ҡарауҙан башланыҡ. Аҙаҡ инде һарыҡ ҡарауға күстек. Етем үҫтем, уҡыу эләкмәне. Бабайым ғүмер буйы механизатор булды, тракторҙа йөрөнө. Матур эшләнек. Үҙебеҙҙе йәлләмәй, колхоз тип бил бөктөк. Шөкөр, эшебеҙҙе тейешле баһалап торҙолар. Физакәр хеҙмәтебеҙ миҙал-ордендар, маҡтау ҡағыҙҙары, рәхмәт хаттары, почет грамоталары менән билдәләнде. Абруйлы булдыҡ, икебеҙ ҙә хеҙмәт ветераны, - тип бәйән итә Фәриҙә инәй. Һүҙ ҙә юҡ, тормоштан ҡәнәғәттәр.

### Наил Фәриҙәһе

**Ауылдаштары Наил Фәриҙәһе тип йөрөткән был инәйебеҙ Наҙаргол ауылында тыуып үҫә, ҡыҙ етеп, күрше генә йәшәгән егеткә тормошҡа сыға.** Наил олатай менән өс ҡыҙ, бер улға ғүмер биргәләр улар. Фәриҙә инәйҙең атаһы Ғаяфетдин олатай заманында бик көслө мулла була. Йәш йәшенә етеп, йәш ҙә бер йәшендә баҡыйлыҡҡа күскән олатайҙы әле булһа һағынып иҫкә алалар Һапашта.



- Ҡөрьәнде яттан белде атайым. Һапашта ғына түгел, күрше-тирә ауылдарға ла бата уҡырға, балаға исем ҡушырға, аяттарға саҡырып торҙолар. Атайым никах уҡыған ғаиләләрҙең береһе лә тарҡалманы, матур, бәрәкәтле тормошта йәшәйҙәр, ул исем ҡушҡан балалар ҙа тәүфиҡлы, иманлы, оҙон ғүмерлеләр. Быңа шундай хикмәте бар ине уның доғаларының. Уның доғалары, ризалығы мине әле булһа Аллаһы Тәғәлә ҡурсыуынан һаҡлап тора, - Фәриҙә инәйҙең һүҙҙе атаһынан башлауы ла ниндәй ҙур тәрбиәүи әһәмиәткә эйә икәнен аңлауы ауыр түгел.

Тормош иптәше Наил олатайҙың да вафатына 22 йыл үткән. 4 балаға ғүмер биреп, аяҡҡа баҫтырып ғына өлгөрөп, инде хаҡлы ялға сығып үҙ яйҙарына йәшәр ваҡытта ғына яңғыҙ ҡалыуҙары, әлбиттә, еңел булмағандыр. Фәриҙә инәй 96 йәштә фани донъяны ҡалдырған ҡәйнһын да алты йыл үҙе ҡарап, һуңғы юлға оҙата. Ошондай киң күңелле инәйгә нисек һоҡланмайһың! Түшәк тартып ятҡанын түгел, аяғөҫтө йөрөгән атай-әсәйҙәрен дә ҡарттар йортона илтеп ҡуйған балалар аҙмы ни хәҙерге замана...

Фәриҙә инәйҙең ишек алдындағы гөл-баҡсаның бер мөйөшөндә ҡына гөлдәре үҫһә, ҡойма буйлап ҡыңғырау, лалә сәскәләре, ярангөлдәр, үрмәгөлдәр тирбәлә. Настурция, газания, мирабилис кеүек ят исемле сәскәләр ҙә хуш еҫ бөркә. Фәриҙә инәй ҡул эштәренә лә оҫта булып сыҡты. Беҙ килгәс тә, уның йөн тетеп ултырған сағына тура килгәйнек. Баҡтиһәң, яҡын-тирәлә Фәриҙә инәй биҙәк һалып тороп бәйләгән бирсәткәләргә еткәне юҡ икән.

Фәриҙә инәй ауылға килгән бер концерт-тамашаны ла ҡалдырмай булып сыҡты.

- Яҡын ара түгел даһа, йәйәү ҡалай йөрөйһегеҙ?- тип һорайым.

- Күрше-тирәлә машиналы кешеләр күп бит, әйҙүкләһәләр, бергә ултырам да китәм. Мин бит сәпиттә лә йөрөйөм, - тип һалдырҙы инәй хәс тә балаларса. - Үрге осҡа йыш сыҡҡылайым велосипед менән. Һыйыр һауырға донъя ташлап китәләр минә күптәр. Йәйәү йөрөгәнсе, тип, "тимер атҡа" атланам. Быңа ошондай йәшәү дәрте ташып тора 72 йәшен тултырған Наил Фәриҙәһенән дә.

### Фуат Фәриҙәһе

**Үрҙә яҙған Фәриҙә инәйҙәрҙең барыһының да фамилияһы Ишкинина булһа, был инәйҙеке Кирәева.** 81 йәшлек Фәриҙә инәй ҡарты менән 6 бала үҫтергән. Хәтирәләр ебен һүтеп, тормошо тураһында бәйән иткәндә инәй күҙ йәштәрен тыя алмай. Аслыһын да, яланғаслығын да күрергә тура килә бит улар быуынына.

✓ *Ҡорбан малы булып һарыҡ, кәзә, шулай уҡ дөйә йәки үгеҙ тора ала. Малдың енесе мөһим түгел, ләкин һарыҡты ҡорбан итеп салғанда тәкә булһа, яҡшыраҡ. Һарыҡ һәм кәзә бер йәшлек булырға тейеш.*





- Атайымдың һуғышҡа һыбай киткәне һаман күҙ алдымда. Унан башҡа тағы 7-8 ағай атҡа атланды. Миңә өс йәштәр самаһы ине. Аҙаҡ уның хәбәрһеҙ юғалыуы тураһында хәбәр килде...

Бабайым да етем генә үҫкәйне. Илле бишенсе йылда һалдаттан ҡайтты, өйләнештек, килен булып төштөм. Йыйған донъяһы юҡ, мине колхоз өйөнә алып ҡайтты. Илле етенсе йылда колхоз тауыҡ фермаһы ойошторҙо, мин шунда эшләнем. Бабай ат ҡараусы ине. Шунан улай-былай итеп, бәләкәй генә өй һатып алдыҡ. Элек бит аҡса түләмәнеләр. Көн өсөн генә эшләнек. Матур эшләнек, намыҫ менән. Беҙҙең тырышып эшләгәнде күреп, колхоз етәкселеге бер быҙау бирҙе. Шунан маллы булып киттек, - тип һөйләй Фәриҙә инәй. - Мамыҡ шәл бәйләп кенә йәшәгән ваҡыттар ҙа булды. Айына ике шәл тамамлайым. Уныһы ла өй эше, бала ҡарау араһында ғына бәйләнә. Иң ҡиммәте 70 һум ине. Шунан алтмыш етенсе йылдарҙа эш аҡсалата түләнә башланы. Хатта 15 көн һайын эш хаҡы бирерҙәр ине.

Фәриҙә инәйҙең ҡарты Фуат олатай ҙа вафат. "Бабайым бик һәйбәт кеше булды. Тырыш, егәрле ине. Икебеҙ ҙә хеҙмәт ветераны булдыҡ", - ти ул тормош иптәшен ҡылыҡһырлап. Бер үҙе генә торһа ла, балалары һәр саҡ янында. Кемеһе булһа ла килеп, хәл белеп, ярҙам итеп тора. Таяҡҡа таянған әбей булһа ла, әле булһа ҡош-ҡортон көтә, баҡсаһын да үҫтерә.

## Рәшит Фәриҙәһе

**Һапашта тағы ла бер Фәриҙә инәй бар. Ул да Ишкинина. Уны ла ауылдаштары тормош иптәшенең исемен ҡушып йөрөтә. Рәшит Фәриҙәһе ул.** Теләүембәт ауылында тыуып үҫкән ҡыҙ ҙа ун йәшенән төрлө эштәргә егелә. Үрҙә яҙған инәйҙәр һымаҡ, ул да сөгөлдөр баҫыуында ла бил бөгә, көнбағыш һуғыуҙа ла эшләй. Фәриҙә инәй Сайыр ауылы егетен әрмегә оҙатып, 4 йыл буйы көтөп ала. Рәшит олатай ил алдындағы бурысын үтәп ҡайтҡас, сәстәрен-сәскә бәйләп, өйләнешәләр. Быйыл кәҙ уларҙың бергә йәшәүҙәренә 65 йыл була икән. Ике улға һәм ике



ҡыҙ балаға ғүмер һәм тәрбиә биргән инәй һәм олатайҙың 9 ейән-ейәнсәре, 4 бүләсәре бар.

- Бейемем 86 йәшен тултырһа ла, донъяһының ҡото бар, өйөндә нур уйнап тора. Тәҙрә төбө һайын - гөл-сәскә. Бөхтәлекте, таҙалыҡты яратҡан бейемем олоғайып китһә лә, бөтә эшен йәйләп йөрөп үҙе эшләргә тырыша, - ти Фәриҙә инәйҙең килене Хәлиҙә апай.

Был инәй ҙә башҡалар һымаҡ ауылынан бер ҙә ситкә китергә атлығып тормаған. Ҡайҙа тыуған - шунда береккән.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әле бәйән иткән инәйҙәр Һапашта бер-береһенә күрше генә йәшәйҙәр. Рәфҡәт олатай менән Рәшит олатайҙың Фәриҙәләре - килендәштәр.**

**Ауылдың ҡотон һаҡлап, уның киләсәгенә хәстәрләгән, уңған, тормошто, ауылды яратҡан, барған еренә ташҡа тай баҫҡан, торған еренә тоғро ҡалған, йөҙҙәренән нур бөркөлөп торған Нурия һәм Фәриҙә инәйҙәр ябайлыҡтары менән бөйөктөр. Ундайҙар йәштәрҙе өгөтнәсихәт уҡымайынса ғына, үҙенең булмышы, йәшәү рәүеше, тормошҡа ҡарашы, донъя асылын ҡабул итмеше аша тәрбиәләй, тәртиптә тота. Ауылдарҙың ҡото, йәмғиәттең алтын тотҡаһы, йәшәү ҡашы, илебеҙҙең нурлы биҙәге ул инәйҙәр. Уларҙың матур ҡартлығына ҡарап ҡына ла киләсәктең ышанысы ҡулда икәненә инанаһың.**

**Айгөл АЙЫТҠОЛОВА.**
**Күгәрсен районы.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ХӘЛЕҢДӘН КИЛГӘНСӘ...

## йола башҡар

**Ҡорбан салыу йолаһы ни өсөн башҡарыла? Ҡорбан салыу - Исламда Аллаға табыныуҙың иң мөһим төрө һанала. Ҡорбан салыу - Аллаға биргән яҡшылыҡтары өсөн рәхмәт әйтеү ул. Ҡорбан салыуҙың төрлөһө була.**

**Бала тыуғас ҡорбан килтереү.** Был йоланы бала тыуғас та, ул балиғ булғансы ла башҡарырға мөмкин. Әммә бала тыуғандың етенсе көнөндә ҡорбан салыу - иң сауаплыһы һанала. Шулай уҡ был көндә балаға исем ҡушыу ҙа иң яҡшыһы. Ҡорбан итен уны салыусы ла, уның ғаиләһе лә ҡуллана ала, саҙаҡа итеп таратып бирергә лә ярай. Бер өлөшөн ярлыларға таратып биреү фарыҙ.

**Шулай уҡ әйтелгән нәҙер буйынса ҡорбан салыу бар.** Был осраҡта салынған итте нәҙер әйтеүсегә лә, яҡын туғандарына ла ашарға ярамай. Ит, йәки шул ит хаҡына торошло аҡса мотлаҡ ярлыларға таратылып бирелергә тейеш. Аллаға нәҙер әйткән мәлдә ниәтендә ихлас күңелдән әйтеү, шәриғәт нормаларын һаҡлау бик мөһим.

**Бөгөнгө көндә кемгә ҡорбан салыу мотлаҡ?**

Ғалимдар фекеренсә, Исламда 90 грамм алтыны, йәиһә шул алтындың аҡса эквиваленты булһа, ул кеше бай һанала. Ҡорбан салыусы кешенең бурыстары булмаҫҡа тейеш.

**Кем ҡорбан салырға тейеш?**

Аллаһы Тәғәләгә яҡынайыу ниәтенән ҡорбан салыусы айыҡ аҡыллы, ирекле, балиғлыҡ йәшендәге хаҡ мосолман булырға тейеш.

Имам Ағзам Абу Хәниф фекеренсә, балиғ булыу һәм айыҡ аҡыллылыҡ был йолала иң мөһиме түгел. Мәҫәлән, йола үтәү өсөн кәрәкле байлығы булған балалар өсөн опекундары ҡорбан сала ала. Ләкин, күпселек ғалимдар балиғ булыу һәм айыҡ аҡыл - ҡорбан салыуҙың үҙгәртелмәй торған шарты, тип һанай. Юлсылар өсөн ҡорбан салыу мотлаҡ түгел.

**Ҡорбан салыу нисек башҡарылырға тейеш?**

Ҡағиҙә булараҡ, бер кеше ҡорбанға бер мал салырға тейеш, әммә Ислам бер нисә мосолманға (ете кешегә тиклем) бер ҙур хайуанды (дөйә, үгеҙ) салырға рөхсәт итә. Ҡорбан ҡабул ителһен өсөн был кешеләрҙең бер уйҙа булыуы мөһим. Әгәр ҙә уларҙың береһе генә малды Алла өсөн түгел, мәҫәлән, ит алыу маҡсатында һуя икән, ҡорбан ҡабул ҡылынмаясаҡ.

Күмәкләп ҡорбан салыусылар итте үлсәүҙәр ҡулланып бүлергә тейеш була. Малды салыусының был төркөмдән булмауы ла рөхсәт ителә.

**Ҡорбанға килтерелгән мал нindәй булырға тейеш?**

Ҡорбан малы булып һарыҡ, кәзә, шулай уҡ дөйә йәки үгеҙ тора ала. Малдың енесе мөһим түгел, ләкин һарыҡты ҡорбан итеп салғанда тәкә булһа, яҡшыраҡ. Һарыҡ һәм кәзә бер йәшлек булырға тейеш, әгәр ҙә ете-һигеҙ айлыҡ һарыҡ малы бер йәшлек малдан кәм түгел икән, уны ла ҡорбан малы итеп һайлай алаһығыҙ. Иттәре ашарға яраҡлы ҡыр йәнлектәре, мәҫәлән, болан, йәки йорт ҡоштары ҡорбан салыу йолаһын атҡарыу өсөн яраҡлы түгел. Ҡолағы ҡырҡылған, бер йәки ике мөгөҙө лә һынған, һуҡыр, тештәре, шулай уҡ ҡойроғо булмаған малды ҡорбан килтерергә ярамай.

Әгәр ҙә малдың мөгөҙөнөң бәләкәй генә өлөшө һынған, бер нисә теше зарарланған, йәки аҙыраҡ аҡһай икән - был ҙур кәмселек һаналмай. Ҡорбан малы һимеҙ булырға тейеш.

**Ҡорбан нисек салынырға тейеш?**

Ҡорбан итеп салынасаҡ малға яҡшы мөғәмәлә булыу мөһим. Уны ҡиблаға ҡаратып һалырға кәрәк. Бысаҡ үткер булырға, ҡорбанды ғазаплamaҫҡа тейеш. Һәр мосолманға ҡорбанды үҙенә салырға тырышырға кәрәк. Әммә ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында ул быны үҙе башҡара алмай икән, малды салыуҙы башҡа кешегә ҡуша ала. Ул кеше "Бисмилла" һәм "Аллаһу Әкбәр" тигән һүҙҙәрҙе әйтеп, малдың муйын венаһын киҫә. Ә ҡорбан салдырыусы кеше малдың баш осонда тороп, 162 тапҡыр: "Был донъяла минең барлыҡ доғаларым, дин тотоуым, Аллаға буйһоноуым һәм табыныуым, үлгәс, Аллаһ алдына бергә баҫасаҡ ҡылған изге эштәрем - барыһы ла Аллаһҡа, барлыҡ нәмәне барлыҡҡа килтереүсегә арнала. Ысынында, Ул - һәр ваҡыт Уға табыныу һәм буйһоноуға лайыҡ!" - тип ҡабатлай. Әгәр ҙә ҡорбан салғанда кеше белеп тә "Бисмилла, Аллаһу Әкбәр" тип әйтмәй икән, был салынған итте ҡулланыу тыйыла.

**Ҡорбан малының итен һәм тиреһен нимә эшләтергә?**

Ҡорбан салыусы итте үҙенең ғаиләһе, туғандары һәм мохтажлыҡта йәшәүселәргә таратып бирә ала. Ҡорбан итен өс өлөшкә бүлеү мөһим: ғаиләнә, туғандарыңа һәм күршеләреңә, мохтажлыҡта йәшәүселәргә. Әгәр ҙә берәй ғаилә күп балалы һәм был иткә нык мохтажлыҡ кисерә икән, ҡорбан салыусы итте тотошлай уларға бирә ала. Фәҡир кешеләр был итте саҙаҡа итеп ҡабул итә һәм үҙҙәре теләгәнсә ҡуллана, шулай уҡ һата ала. Хәлле кешеләргә ҡорбан итен, тиреһен, йөнөн һатыу ярамай. Һатҡан хәлдә лә, был аҡсаны ярлыларға таратып биреү мотлаҡ.

Үлгәндәр исеменән ҡорбан салыуҙың сауабы ла үлгән кешегә яҙыла. Ҡорбан итен ҡорбан салыусы ла, ғаиләһе лә ҡуллана ала.

**Искәндәр МОРАТОВ әҙерләне.**

*СӘЛӘМӘТ БУЛ!*



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

Ярымфабрикаттарҙан тыш, хәүеф төркөмөнә көнсығыш кухняһының барлыҡ тоҙло ризыҡтары, консерваланған аштар һәм йәшелсәләр, балыҡ һәм балыҡ консервалары, чипсылар, тоҙло сәтләүектәр, сей килеш ыҫланған ҡабымлыҡтар инә. Тоҙҙан ғына баш тартыу ҡан баҫымы күтәрелеүҙе көйләмәй әле.

**Күнекмәләр.** Әгәр диета иҫәбенә генә артыҡ ауырлығығыҙҙан ҡотолһағыҙ, тирегеҙ һәленеп төшәсәк. Шуға күрә диетаны мотлаҡ физик күнекмәләр менән бер рәттән алып барырға кәрәк. Шулай итеп һеҙ мускулдарығыҙҙы тонуста тотаһығыҙ, ә мускулдарығыҙ ни тиклем күп, хәрәкәт ваҡытында шул тиклем күберәк калория яндыраһығыҙ. Бит өсөн зарядка - массаж. Шулай уҡ ябығыу мотлаҡ массаж курсы менән бергә барырға тейеш.

**Йөҙө туйһа - оҙағыраҡ йәшәрһегеҙ.** Көнсығыш медицинаһы буйынса белгес Савелий Кашницкий, ҡартайыу йөҙөнһеҙлоктан башлана, тип раҫлай. Тибет медицинаһы ошо хәҡиҡәткә өйрәтә. Шуға күрә, йөҙһөҙлоктоң беренсе билдәләре күренеү менән уны тергеҙергә тырышығыҙ. Әйткәндәй, ғәҙәттә яңы ай ҡалҡҡанда, ай тулғанда, айҙың дүртенсе фазаһында тынғыһыҙлыҡ һәм йөҙһөҙлоҡ көсәйә. Бигерәк тә йөрәк йәки ҡан тамырҙары сирҙәре менән интегеүселәрҙә.

**Йөҙһөҙлоктан рецепт.** Бындай көндәрҙә йоҡлар алдынан бер стакан йылы һыуға 1 балғалаҡ бал, бысаҡ осонда ғына онталған имбер һалып болғатып эсергә кәрәк. Сәй ҙә, кофе ла йәки организмға һыуытыусы Ин энергияны хаҡында хәбәр итеүсе башҡа эсемлек тә түгел, ә тап организмға Ян энергияһын биреүсе йылы һыу. Бал йөҙөнө яҡшырта. Имбер - актив Ян-продукты айҙың Инь энергияһына ҡаршы торасаҡ.

Тибет медицинаһына яҡын булған монгол халыҡ медицинаһы йоҡлар алдынан ҡайнаған һөт эсергә тәҡдим итә. Көнбағыш майына тығып алынған мамыҡ киҫәген ике яҡ ҡолаҡҡа ҡуйып йоҡлау ҙа ярҙам итә.

**Йөҙһөҙлоктан Тибет массажы.** Тибет табиптары йөҙө алдынан яға зонаһын - ҡолаҡ арттарын да индереп, алмашлап елкә мускулдарын ыуырға кәңәш итә. Был массажды бармаҡтарҙы йылытылған үҫемлек, аныҡлап әйткәндә кунжут майында майлап эшләргә кәрәк. 2-15 минут эшләнгән массаж муйын мускулдарын йомшарта, ҡан баҫымын төшөрә, ҡан әйләнешен яҡшырта, стресты бөтөрә.

**Йөҙһөҙлоктан арҡаға компресс.** Ҡулбаштар араһына алдан әҙәтелгән (40 градусҡа тиклем) үҫемлек майына тығып йылытылған таҫтамалды һығыпябығыҙ, өҫтөнә полиэтилен ҡаплап, ҡоро таҫтамал һалығыҙ һәм һыуынғанса тотоғоҙ. Шул уҡ урынға медицина банкылары ярҙамында массаж эшләргә мөмкин. Яңы, пластик банкалар ҡулланыу яҡшы. Икәү булһа, етә.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**



## 20 АВГУСТА
## ПОНЕДЕЛЬНИК
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.50 Модный приговор.
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 Премьера. "Видели видео?"
19.00 "На самом деле". [16+]
20.00 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Ищейка". [12+]
23.30 Т/с Премьера. "Красные браслеты". [12+]
0.30 "Время покажет". [16+]
1.30 Модный приговор.
2.35 "Мужское / Женское". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]
3.35 "Давай поженимся!" [16+]
4.25 Контрольная закупка.

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Вести.
9.15 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
13.00 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 Т/с "Московская борзая". [12+]
17.00 Вести.
17.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
19.00 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Искушение". [12+]
23.40 Т/с "Катерина. Другая жизнь". [12+]
1.40 Т/с "Вольф Мессинг: видевший сквозь время". [16+]
3.40 Т/с "Семнадцать мгновений весны". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Выборы-2018. [12+]**
**10.10 Т/с "Цезарь". [16+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Учим башкирский язык. [0+]**
**12.00 Выборы-2018. [12+]**
**12.10 Счастливый час.**
**13.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.40 Выборы-2018. [12+]**
**14.50 Весело живем. [12+]**
**15.00 Наука 102. [12+]**
**15.30 "Книга сказок". [0+]**
**15.45 "Борсаҡ". [0+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 Выборы-2018. [12+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Современник. [12+]**
**17.00 Наши годы. [12+]**
**17.25 Выборы-2018. [12+]**
**17.30 Орнамент. [6+]**
**17.45 Учим башкирский язык. [0+]**
**18.00 "Йәйләү". [0+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**18.45 Интервью.**
**19.15 Бизнес-проба. [12+]**
**19.30 Бай баҡса. [12+]**
**20.00 Финал чемпионата РБ по киберхоккею.**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Интервью. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Автограф. [12+]**
**23.30 Весело живем. [12+]**
**0.00 Х/ф "Мистер Пип". [16+]**
**2.45 "Любви все возрасты покорны". [12+]**
**4.45 Автограф. [12+]**
**5.15 Весело живем. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 21 АВГУСТА
## ВТОРНИК
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.10 Модный приговор.
10.15 "Жить здорово!" [16+]
11.25 "Курбан-Байрам". Трансляция из Уфимской соборной мечети.
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 Премьера. "Видели видео?"
19.00 "На самом деле". [16+]
20.00 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Ищейка". [12+]
23.30 Т/с Премьера. "Красные браслеты". [12+]
0.25 "Время покажет". [16+]
1.30 Модный приговор.
2.35 "Мужское / Женское". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]
3.35 "Давай поженимся!" [16+]
4.25 Контрольная закупка.

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 "О самом главном". [12+]
10.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
11.00 Вести.
11.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.50 Праздник Курбан-Байрам. Прямая трансляция из Московской Соборной мечети.
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 Т/с "Московская борзая". [12+]
17.00 Вести.
17.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
19.00 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Искушение". [12+]
23.40 Т/с "Катерина. Другая жизнь". [12+]
1.40 Т/с "Вольф Мессинг: видевший сквозь время". [16+]
3.40 Т/с "Семнадцать мгновений весны". [12+]

### БСТ

**7.00 "С праздником Курбан-байрам!" Концерт. [12+]**
**7.45 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 Выборы-2018. [12+]**
**8.10 Учим башкирский язык. [0+]**
**8.15 "100-летний азан". [0+]**
**9.00 "Курбан-байрам".**
**10.00 Концерт группы "Йатаган". [12+]**
**10.45 "Йома". [0+]**
**11.00 Д/ф "Вижу сны..." [12+]**
**11.30 Орнамент. [0+]**
**11.45 Бизнес-проба. [12+]**
**12.00 Х/ф "Кинзя". [12+]**
**13.15 Выборы-2018. [12+]**
**13.30 Х/ф "Кинзя". [12+]**
**15.45 "Добрые дела". [0+]**
**16.00 День болельщика ХК Салават Юлаев.**
**18.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Автограф. [12+]**
**19.30 "Бай". [12+]**
**20.15 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.30 "Курбан-байрам". [0+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.15 Выборы-2018. [12+]**
**23.20 Д/ф "Полюс времени". [12+]**
**0.00 Х/ф "Земля обетованная". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 "Любовь на троих". [12+]**
**5.00 Автограф. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**
**6.50 Выборы-2018. [12+]**

## 22 АВГУСТА
## СРЕДА
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.50 Модный приговор.
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 Премьера. "Видели видео?"
19.00 "На самом деле". [16+]
20.00 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Ищейка". [12+]
23.30 Т/с Премьера. "Красные браслеты". [12+]
0.25 "Время покажет". [16+]
1.30 Модный приговор.
2.35 "Мужское / Женское". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]
3.35 "Давай поженимся!" [16+]
4.25 Контрольная закупка.

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Вести.
9.15 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
13.00 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 Т/с "Московская борзая". [12+]
17.00 Вести.
17.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
19.00 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Искушение". [12+]
23.40 Т/с "Катерина. Другая жизнь". [12+]
1.40 Т/с "Вольф Мессинг: видевший сквозь время". [16+]
3.40 Т/с "Семнадцать мгновений весны". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Выборы-2018. [12+]**
**10.10 Т/с "Цезарь". [16+]**
**11.00 Наука 102. [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Выборы-2018. [12+]**
**12.10 Счастливый час.**
**13.00 Тәмле. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.40 Выборы-2018. [12+]**
**14.50 Весело живем. [12+]**
**15.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**15.30 "Городок АЮЯ". [0+]**
**15.45 "Ал да гөл". [6+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 Выборы-2018. [12+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Замандаш. [6+]**
**17.00 Дознание. [16+]**
**17.25 Выборы-2018. [12+]**
**17.30 Орнамент. [6+]**
**17.45 Имею право. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**18.45 Интервью.**
**19.15 Дорожный патруль. [16+]**
**19.30 Алтын тирмә. [0+]**
**20.15 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.30 Барбекю со звездой. [12+]**
**21.00 Историческая среда. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Интервью.**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Бала-саға. [6+]**
**23.45 Весело живем. [12+]**
**0.00 Х/ф "Охотник на лис". [18+]**
**2.45 Бәхетнамә. [12+]**
**3.30 "Неравные". [12+]**
**5.15 Весело живем. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**
**6.50 Выборы-2018. [12+]**

## 23 АВГУСТА
## ЧЕТВЕРГ
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.50 Модный приговор.
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 Премьера. "Видели видео?"
19.00 "На самом деле". [16+]
20.00 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Ищейка". [12+]
23.30 Т/с Премьера. "Красные браслеты". [12+]
0.25 Д/ф "Курская битва. И плавилась броня". [12+]
1.25 Модный приговор.
2.30 "Мужское / Женское". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]
3.30 "Давай поженимся!" [16+]
4.20 Контрольная закупка.

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Вести.
9.15 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
13.00 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 Т/с "Московская борзая". [12+]
17.00 Вести.
17.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
19.00 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Искушение". [12+]
23.40 Т/с "Катерина. Другая жизнь". [12+]
1.40 Т/с "Вольф Мессинг: видевший сквозь время". [16+]
3.40 Т/с "Семнадцать мгновений весны". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Выборы-2018. [12+]**
**10.10 Т/с "Цезарь". [16+]**
**11.00 Д/ф "Моя планета - Башкортостан". [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Выборы-2018. [12+]**
**12.10 Счастливый час.**
**13.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.40 Выборы-2018. [12+]**
**14.50 Весело живем. [12+]**
**15.00 У дачи. [12+]**
**15.30 Байтус. [6+]**
**15.45 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 Выборы-2018. [12+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Интервью. Выборы-2018. [12+]**
**17.00 Д/ф "Легенды Далмации". [12+]**
**17.25 Выборы-2018. [12+]**
**17.30 Барбекю со звездой. [12+]**
**18.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**18.45 Интервью.**
**19.15 Күңелем моңдары. [12+]**
**19.30 Башҡорттар. [6+]**
**20.15 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.30 "Деловой Башкортостан". [12+]**
**20.45 Криминальный спектр. [16+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Интервью.**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Погружение". [16+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 "Заноза". [12+]**
**5.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**
**6.50 Выборы-2018. [12+]**

## 24 АВГУСТА
## ПЯТНИЦА
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.50 Модный приговор.
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 Премьера. "Видели видео?"
19.00 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
20.00 "Поле чудес". [16+]
21.00 Время.
21.30 Премьера. Международный музыкальный фестиваль "Жара". Творческий вечер Валерия Меладзе . [12+]
23.55 Х/ф "Дьявол носит Prada". [16+]
1.55 Х/ф "Бенни и Джун". [16+]
3.50 Модный приговор.
4.50 "Мужское / Женское". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Вести.
9.15 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
13.00 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 Т/с "Московская борзая". [12+]
17.00 Вести.
17.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
19.00 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Аншлаг и Компания. [16+]
23.55 "Сто причин для смеха". Семён Альтов.
0.25 Х/ф "Бесприданница". [12+]
2.10 Д/ф "Ким Филби. Моя Прохоровка". [12+]
3.10 Х/ф "Привет с фронта".

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Выборы-2018. [12+]**
**10.10 Т/с "Цезарь". [16+]**
**11.00 Автограф. [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Выборы-2018. [12+]**
**12.10 "Сваха". [12+]**
**14.15 Күңелем моңдары. [12+]**
**14.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.40 Выборы-2018. [12+]**
**14.50 Бала-саға. [6+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**15.45 "Шәп арба". [6+]**
**16.00 "Выше всех". [6+]**
**16.15 Выборы-2018. [12+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Замандаш. [6+]**
**17.00 Д/ф "Моя планета - Башкортостан". [12+]**
**17.25 Выборы-2018. [12+]**
**17.30 Орнамент. [6+]**
**17.45 Учим башкирский язык. [0+]**
**18.00 "Йома". [0+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**18.45 Хазина о Хазине. [0+]**
**19.15 Күңелем моңдары. [12+]**
**19.30 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**20.15 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.30 Барбекю со звездой. [12+]**
**21.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Наука 102. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 "Байыҡ-2018". [12+]**
**0.00 Х/ф "Выстрел в пустоту ". [18+]**
**2.30 "Гильмияза". [12+]**
**4.30 Весело живем. [12+]**
**4.45 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**5.45 Д/ф "Тамерлан. Архитектор степей ". [16+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 25 АВГУСТА
## СУББОТА
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Новости.
6.10 Ералаш.
6.40 М/с "Смешарики. Новые приключения".
6.55 Т/с "Мама Люба". [12+]
9.00 Играй, гармонь любимая!
9.45 Слово пастыря.
10.00 Новости.
10.10 Д/ф Премьера. "Николай Еременко. На разрыв сердца". [12+]
11.10 Д/ф "Теория заговора". [16+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 "Идеальный ремонт".
13.25 Х/ф "Приходите завтра..."
15.20 Д/ф "Трагедия Фроси Бурлаковой". [12+]
16.30 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.15 "Видели видео?"
19.50 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 Время.
21.20 "Сегодня вечером". [16+]
23.00 "КВН". Премьер-лига. [16+]
0.35 Х/ф "Развод". [12+]
2.45 Модный приговор.
3.50 "Мужское / Женское". [16+]
4.40 Контрольная закупка.

### РОССИЯ 1

5.15 Т/с "Лорд. Пёс-полицейский". [12+]
7.10 "Живые истории".
8.00 Россия. Местное время. "Говорит и показывает Уфа". [12+]
9.00 "По секрету всему свету".
9.20 Сто к одному.
10.10 "Пятеро на одного".
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
14.00 Х/ф "Подсадная утка". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести.
20.50 Х/ф "Верить и ждать". [12+]
1.20 Х/ф "Стерва". [12+]
3.15 Т/с "Личное дело". [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.45 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 Выборы-2018. [12+]**
**8.10 М/ф "Битва за планету Терра". [12+]**
**10.00 "У дачи". [12+]**
**10.30 "Большой чемодан. [6+]**
**11.15 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**11.45 Орнамент. [6+]**
**12.00 Тәмле. [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.00 Замандаш. [6+]**
**13.15 Выборы-2018. [12+]**
**13.30 Бай бакса. [12+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**16.00 "Байыҡ-2018". [12+]**
**16.55 Хоккей. Кубок РБ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Автомобилист" (Екатеринбург).**
**19.30 Барбекю со звездой. [12+]**
**20.00 Весело живем. [12+]**
**20.15 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.30 "Песня года". [12+]**
**21.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Посмотрим... [6+]**
**22.15 Следопыт. [12+]**
**22.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 Выборы-2018. [12+]**
**23.25 "Башҡорт йыры-2018". [12+]**
**0.00 Х/ф "Любой ценой ". [18+]**
**1.45 Итоги недели (на баш. яз.).**
**2.30 "Мою жену зовут Морис". [12+]**
**4.45 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**5.45 Д/ф "Документальный фильм". [12+]**
**6.30 Новости (на рус.яз.). [0+]**

## 26 АВГУСТА
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.15 Т/с "Мама Люба". [12+]
6.00 Новости.
6.10 Т/с "Мама Люба". [12+]
7.30 М/с "Смешарики. Пин-код".
7.45 "Часовой". [12+]
8.15 "Здоровье". [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.00 Новости.
10.10 Д/ф "Инна Макарова. Судьба человека". [12+]
11.15 Честное слово с Юрием Николаевым.
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 Д/ф "Николай Рыбников. Парень с Заречной улицы". [12+]
13.20 Х/ф "Высота".
15.10 Д/ф "Раймонд Паулс. Миллион алых роз". [12+]
16.10 Юбилейный концерт Раймонда Паулса.
18.45 "Клуб Веселых и Находчивых" . [16+]
21.00 Воскресное "Время".
22.00 "Клуб Веселых и Находчивых" . [16+]
23.10 Х/ф "Перевозчик-2". [16+]
0.45 Х/ф "Подальше от тебя". [16+]
3.10 Модный приговор.
4.15 Контрольная закупка.

### РОССИЯ 1

4.55 Т/с "Лорд. Пёс-полицейский". [12+]
6.45 "Сам себе режиссёр".
7.35 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
8.05 Утренняя почта.
8.45 Местное время. Вести-Башкортостан. События недели.
9.25 Сто к одному.
10.10 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
11.00 Вести.
11.20 Т/с "И шарик вернётся". [16+]
20.00 Вести.
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
0.30 Д/ф "Мегаполис". [12+]
2.10 Д/ф "Москва на высоте". [12+]
3.10 Т/с "Пыльная работа". [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.45 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 Выборы-2018. [12+]**
**8.10 М/ф "Фиксики". [0+]**
**9.00 "Йома". [0+]**
**9.30 "Бай". [12+]**
**10.00 "Перекличка". [6+]**
**10.15 "Выше всех". [6+]**
**10.30 "Ал да гөл". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 Байтус. [6+]**
**11.15 "Сулпылар". [0+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Алтын тирмә. [0+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 Выборы-2018. [12+]**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**15.30 Башҡорттар. [6+]**
**16.00 Дорога к храму. [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**16.55 Хоккей. Кубок РБ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Нефтехимик" (Нижнекамск).**
**19.30 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**20.00 Моя Республика. [12+]**
**20.15 Имею право. [12+]**
**20.30 Лидеры региона. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15 Международный фестиваль искусств "Сердце Евразии". [12+]**
**23.15 Выборы-2018. [12+]**
**23.25 Свидание с джазом. [12+]**
**0.15 Х/ф "Хотел бы я быть здесь". [16+]**
**2.15 "Трамвай "Желание". [12+]**
**5.00 Д/ф "Легенды Далмации". [12+]**
**5.30 Историческая среда. [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**6.45 Учим башкирский язык. [12+]**
**6.50 Выборы-2018. [12+]**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 15 АВГУСТ - АРХЕОЛОГТАР КӨНӨ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**31-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Умрау. Деникин. Брусилов. Хазина. Анчар. Егет. Сабата. Янут. Сыртланов. Ағас. Арба. Ужым. Ныҡлыҡ. Ыуа. Уйһыл. Ысыҡ. Сана. Аран. Аҙан. Апай.

**Вертикаль буйынса:** Аласабыр. Бочкарева. Раҫлаусы. Даос. Сысҡан. Илеш. Монгол. Муҡса. Ява. Руна. Ватан. Һауа. Утиль. Нужа. Христианлыҡ. Асҡыс. Инша. Аҡбалсыҡ.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Август (Зөлхизә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 20 (9) дүшәмбе | 4:32 | 6:02 | 13:30 | 19:05 | 20:35 | 22:05 |
| 21 (10) шишәмбе | 4:34 | 6:04 | 13:30 | 19:03 | 20:33 | 22:03 |
| 22 (11) шаршамбы | 4:36 | 6:06 | 13:30 | 19:01 | 20:31 | 22:01 |
| 23 (12) кесе йома | 4:37 | 6:07 | 13:30 | 18:58 | 20:28 | 21:58 |
| 24 (13) йома | 4:39 | 6:09 | 13:30 | 18:56 | 20:26 | 21:56 |
| 25 (14) шәмбе | 4:41 | 6:11 | 13:30 | 18:54 | 20:24 | 21:54 |
| 26 (15) йәкшәмбе | 4:43 | 6:13 | 13:30 | 18:51 | 20:21 | 21:51 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

# ХӘЛӘЛ БУЛҺЫН!

Ҡөрьән-Кәримдә һәм Мөхәммәт бәйғәмбәр хәҙистәрендә мосолмандар өсөн тыйылған өммәттәр аныҡ билдәләнә. "Үләкһә, ҡан, сусҡа ите, шулай уҡ мосолманламайынса (аҫып, бәреп үлтерелгән, бейектән ҡолап, һөҙөлөп, йыртҡыстан тамаҡланып үлгән мал) һуйылған ит ашау тыйыла..." - тиелә Ҡөрьәндә. Бәйғәмбәр хәҙистәрендә кеше сәләмәтлегенә зыян килтереүсе ризыҡ менән туҡланған һәм кешелә ерәнеү тойғоһо уятҡан йәнлек-хайуандар хәрәм тип иҫәпләнә. Улар - йылан, ҡомаҡ, сысҡан, ташбаҡа, һуҡыр сысҡан, терпе, себен, селәүсендәр. Саранчанан тыш, башҡа бөжәктәр ҙә хәрәм. Хәнәфи мәҙһәбенә ярашлы, йыртҡыстар - айыу, бүре, шәшке, һуҫар, эт, бесәй, төлкө ите лә, ҡарға менән ябалаҡ кеүек йыртҡыс ҡоштар ите лә хәрәм һанала. Сөнки улар үҙҙәре шикелле йылы ҡанлы йәнлектәр менән туҡлана. Аңды томалаған, ағыулаған һәм сәләмәтлеккә башҡа төрлө зыян килтергән иҫерткес эсемлектәр, наркотиклы матдәләр шулай уҡ тыйыла.

*АФАРИН!*



**Ошо көндәрҙә Дәүләкән районының Яңы Яппар ауылы эргәһендәге киң яланда Башҡортостан мосолмандары диниә назаратының йәштәр бүлеге тарафынан ойошторолған "Дим буйы йәштәре йыйыны" уҙғарылды. Сара тәүге тапҡыр үткәрелеүгә ҡарамаҫтан, яҡын-тирәләге ауылдарҙан ғына түгел, күрше райондарҙан да төрлө йәштәге кешеләр йыйылды.**

# ХӘҠИҠӘТ ЕТКЕРЕЛДЕ

Йыйындың төп маҡсаты - ир-егеттәргә һәм ҡатын-ҡыҙҙарға ғына ҡағылған актуаль мәсьәләләр буйынса халыҡты айырым йыйып, матур фекер алышыу майҙансыҡтары ойоштороу булып торҙо. Шуға күрә, сараны асыу тантанаһы тамамланғас та, төп сәхнә эргәһендәге эскәмйәләрҙә тик ир-аттар ғына ултырып ҡалды, ә ҡатын-ҡыҙҙарҙы саҡ ҡына алыҫтараҡ урынлашҡан махсус майҙансыҡҡа саҡырып алдылар. Ир-егеттәр өсөн үткәрелгән "Бөгөнгө йәштәр һәм заман һынауҙары" тигән тема буйынса фекер алышыуҙа беренсе булып Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Әмир Ишемғоловҡа һүҙ бирелде. Ул йәштәрҙе динле-динһеҙ тип айырып ҡарамаҫҡа, бөтәһенә лә берләшеп эшләргә кәрәк булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Ауыл халҡын борсоған мәьәләләрҙе яҡшы белгән Әмир Миңлеәхмәт улына ир-азаматтар ер тураһында ла, ауылдарҙа дин әһелдәренең абруйы тураһында ла һорауҙар бирҙе. Ирҙәрсә һөйләшеүҙә шулай уҡ Башҡортостан мосолмандары диниә назараты рәйесенең беренсе урынбаҫары Айнур Арыҫланов, билдәле тарихсы Салауат Хәмиҙуллин, социология фәндәре кандидаты Илгиз Солтанморатов, "Мәргән уҡсы" хәрәкәтендә ҡатнашыусы Илдар Абыҙгилдин, "Меңсе" йәштәр берлеге рәйесе Вәзир Ҡотләхмәтов сығыш яһаны. Сараның әһәмиәте тураһында ойоштороусыларҙың береһе Айнур Арыҫлановтан һораштыҡ. "Ислам дине - ул мәсет, намаҙ уҡыу ғына түгел, ул тәү сиратта ғилем, мәғрифәт, аҡыл, халыҡҡа хеҙмәт итеү дине, - тип һөйләне Айнур Нурғәли улы. - Халыҡҡа бына ошо хаҡиҡәтте еткерергә ниәтебеҙ. Ир-егеттәргә көнүҙәк проблемаларҙың береһе - дини фанатизм, экстремислыҡ һәм террорлыҡ низән барлыҡҡа килеүен аңлатып, киҫәтергә тейешбеҙ. Былар наҙанлыҡтан, динде, фәлсәфәне белмәүҙән килә, китаптар ҙа уҡымай башланыҡ бит хәҙер. Йәштәрҙең фекерҙәре берҙәм, үҙҙәре аңлы, донъяға киң ҡарашлы бөгөн..."

Ир-егеттәр үҙ хәҡиҡәтен эҙләгәнсе, ҡатын-ҡыҙҙар айырым фекер алышыу майҙансығында Өфөнән килгән әүҙем йәмәғәт эшмәкәрҙәрен, ғалимәләрҙе, шағирәләрҙе тыңланы. "Был майҙанда фекер алышыуҙа ҡатнашыусыларға бөтә сығыштар ҙа оҡшаны, ә иң мөһиме, фәһемле булды, - тине ҡатнашыусыларҙың береһе Наилә Фазуллина. - Ғаилә ҡиммәттәре, бала тәрбиәһе, туған телдә һөйләшеү, дин һәм халыҡ йолалары кеүек кәрәкле темалар күтәрелде бөгөн. Ошондай аралашыуға ҡоролған, йәштәрҙе йәлеп иткән айыҡ йыйындар йышыраҡ булһын ине".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Дим буйы йәштәре йыйыны" халыҡты борсоған мәсьәләләр күтәрелгән, фекер алышыуға ирек ҡуйған сараларҙың береһе булды. Күп осраҡтарҙа үҙен бөтөнләй онотолған кеүек тойған ауыл халҡы өсөн ошондай саралар күңел бушатып ҡалыу форсаты бит. Ябай эшсенең хәлен ил ағалары, халыҡ вәкилдәре лә белә икән, тип ҡыуанды был юлы ла йыйынға килеүселәр.**

**Ғәлиә ШӘМСЕТДИНОВА.**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# ҘУР БАЙРАМДАР КӨТӨЛӘ

**Башҡортостанда республиканың 100 йыллығын билдәләү сиктәрендә үтәсәк мәҙәни сараларға әҙерлек башланды.**

Мәҙәниәт министрлығы киләһе йылда ойоштороласаҡ мәҙәни сараларҙың исемлеген төҙөнө. Уларҙың иң ҙурҙары - Р. Нуриев исемендәге Халыҡ-ара балет сәнғәте фестивале, Башҡортостандың Балалар хоры концерты, URAL PRINT TRIENNAL-2019 Халыҡ-ара Урал баҫма станоклы графика күргәҙмәһе, башҡорт бейеүен башҡарыусыларҙың "Байыҡ" республика телевизион конкурсы.Шулай уҡ планда республика алдындағы ҙур хеҙмәттәре һәм юғары ҡаҙаныштары булған кешеләрҙе хөрмәтләү, уларҙың хәтерен мәңгеләштереү, Рәсәй милләтенең берҙәмлеген нығытыу һәм халыҡтарҙы этномәҙәни үҫтереү өлкәһендәге, Башҡортостан тарихының әһәмиәтле ваҡиғаларына арналған саралар, Рәсәй төбәктәрендә һәм сит илдәрҙә уҙғарылған халыҡ байрамдарында ҡатнашыу ҡаралған. Планға ярашлы, Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең 100 йыллығына уның әҙәби мираҫын үҫтереү буйынса Халыҡ-ара китапхана проекттары конкурсын һәм инвалид балалар араһында "Башҡортостан! Һин - минең яҙмышымда нур" тигән республика ижади бәйгеһен үткәреү күҙаллана.

# "БЕРЕНСЕ РЕСПУБЛИКА"

**Өфөлә Башҡортостандың 100 йыллығына арналған "Беренсе Республика" тарихи нәфис фильмын төшөрөү тамамланды.**



Эш 15 майҙа старт алғайны. Фильм башлыса "Башҡортостан" киностудияһы павильонында төшөрөлгән, Өфөнөң тарихи үҙәге лә кадрға эләккән. Кино төшөрөү менән бер рәттән, материалды монтажлау һәм компьютерҙа эшкәртеү ҙә барған. Октябрҙә тауыш яҙҙырыу эше башланасаҡ. Таҫманы 2019 йылдың мартында күрһәтеү күҙаллана. "Барыһы ла план буйынса барҙы. Мәҙәниәт министрлығы, "Башҡортостан" киностудияһы һәм уның директоры Юнир Эминев беҙгә төрлө яҡлап ярҙам күрһәтте, - тип һөйләне "Башинформ" агентлығына фильмдың режиссеры Булат Йософов. - Күп кенә республика театрҙары актерҙары ҡатнашты". Режиссер әйтеүенсә, фильм, "Бабич" картинаһы кеүек үк, аҡлы-ҡаралы булыр, моғайын. "Беренсе Республика" фильмы нигеҙендә - республиканың ысын тарихы, күренекле ижтимағи-сәйәси эшмәкәрҙәр, ғалимдар, шағирҙар, яҙыусылар һәм композиторҙарҙың яҙмышы. Фильм 1920-1950 йылдарҙағы тарихи осорҙо үҙ эсенә ала. Персонаждар араһында - яҙыусылар Дауыт Юлтый, Ғабдулла Амантай, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары араһында беренсе булып роман яҙыусы Һәҙиә Дәүләтшина, башҡорт милли театрына нигеҙ һалған Вәлиулла Мортазин-Иманский, композитор Ғәзиз Әлмөхәмәтов, актриса Зәйтүнә Бикбулатова, милли театр реформаторы Мәкәрим Мәһәҙиев һәм башҡалар.

# ЯҢЫ ИЖАДИ МИҘГЕЛ

**М. Ғафури исемендәге Башҡорт драма театры труппаһы йәйге ялдан һуң эшкә сыҡты. Ижади составты тәүге эш көнө менән мәҙәниәт министры урынбаҫары Рәнис Алтынбаев һәм Мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре профсоюзы комитеты рәйесе Александр Кузьменко ҡотланы.**

Театрҙың художество етәксеһе Олег Ханов театрҙың 99-сы миҙгелгә ижади пландары хаҡында һөйләне. Режиссер Айрат Абушахманов Урал Ғәлиевтың "Тамамланмаған повесть" пьесаһы буйынса эшләй башлаған. Ошо көндәрҙә Азат Нәҙерголов Сыңғыҙ Айытматовтың "Сыңғыҙхандың аҡ болото" әҫәренә тотона. 14 сентябрҙә Өфөгә яҡут режиссеры Андрей Борисов киләсәк. Ул "Урал батыр" эпосы буйынса спектакль өсөн яуаплы. Был проект 2018 йылда Башҡортостан Башлығы грантына лайыҡ булғайны. Режиссер менән бергә шулай уҡ ҡуйыусы-рәссам, инсценировка авторы һәм костюмдар буйынса рәссам килә. Ижади төркөм дүрт көн эшләйәсәк. Репетициялар сентябрь аҙағында башлана. "Андрей Борисов - ЮНЕСКО-ның Евразия халыҡтары эпостарын һаҡлау комиссияһы вәкиле. Ул Алтайҙа ошо эпос буйынса спектакль ҡуйҙы. Беҙҙә - "Урал батыр", Әрмәнстанда "Давид Сасунский"ҙы сәхнәләштерә. Эпостар буйынса әлеге спектаклдәр берләшмәһен халыҡ-ара кимәлгә тәҡдим итергә йыйына, был - ЮНЕСКО-ның ҙур программаһы", - тип хәбәр итте "Башинформ" агентлығына Олег Ханов. Алдан хәбәр ителгәнсә, театр бинаһын ремонтлау сәбәпле, ноябрҙә театр ваҡытлыса Башҡорт опера һәм балет театрының Кесе залына күсеп тора.

# БЕҘҘЕҢ ЗӨҺРӘ!

**Минскиҙа үткән "Йәш королеваһы-2018" XXVII Халыҡ-ара вуз-ара нәзәкәтлелек һәм артислыҡ оҫталығы конкурсында Башҡортостан һылыуҡайы Зөһрә Мөхәрәмова бер юлы ике титулға: "Нәзәкәтлелек королеваһы" һәм "Дуҫлыҡ королеваһы" исемдәренә лайыҡ булды. Әгәр беренсе номинацияны жюри билдәләһә, иң дуҫ бәйгесе исеме өсөн ҡатнашыусылар үҙҙәре тауыш бирҙе.**



Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты студенты, Ленара Таһированың "Һылыуҡай-Bashkirian beauty" студияһы тәрбиәләнеүсеһе Зөһрә Мөхәрәмова Рәсәйҙән өс вәкилдең береһе булды. Таж һәм "Йәш королеваһы" исеме өсөн Рәсәйҙән, Әрмәнстандан, Беларустан һәм Латвиянан һигеҙ студент көрәште. Бәйгеселәр дефиле, бейеү, интеллектуаль һәм ижади, шулай уҡ милли кейемдәр конкурстарында һәм спорт ярыштарында ҡатнашты. Был Зөһрәнең беренсе генә уңышлы сығышы түгел. Ул Ҡытайҙа "Матурлыҡ илсеһе" конкурсында ҡатнашты, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәрендә "Miss perfect beauty universe" халыҡ-ара конкурсында еңде; "Рәсәйҙең Мисс һәм Мистер студенты 2017" конкурсында вице-мисс титулына лайыҡ булды.

# ИҢ ТӘМЛЕҺЕ - СӘК-СӘК!

**Испанияла 32-се Халыҡ-ара мәҙәниәт фестивале бара. Мьяхадас ҡалаһында фестивалдә ҡатнашыусыларға үҙҙәренең милли ризыҡтарын күрһәтеү мөмкинлеге бирелде.**

Перуҙар - текила менән мохито, рустар - окрошка, мексикандар һәм парагвайҙар - һалҡын ҡабымлыҡтар, грузиндар тарталеткалар әҙерләгән. Башҡортостан вәкилдәре килгән кешеләргә сәк-сәк менән таң ҡалдырҙы. Йәштәр театры һәм "Өйҙәштәр" ситкомы актрисаһы Зөлмәрә Ҡарабулатова тамашасылар алдында оҫта итеп татлы тәмлекәс бешерҙе.

"Беҙгә сәк-сәкте кукуруз таяҡсаларынан әҙерләргә тура килде, сөнки плитә юҡ ине, - тип һөйләне "Башинформ" агентлығына Зөлмәрә. - Иң матур ризыҡ беҙҙеке булды, уны күргә һәм сәтләүектәр менән дә биҙәнек. Тәме лә бик татлы. Ойоштороусыларға сәк-сәк бик оҡшаны, "беллиссимо" тигән һүҙҙәр яңғырап торҙо. Бер батмусы дуҫлыҡ билдәһе итеп грузиндарға һәм икенсеһен ойоштороусыларға бүләк иттек".

Ойоштороусылар ҡатнашыусыларға аҙыҡ-түлекте үҙҙәре алһа ла, бал Башҡортостандан ине. Бөтәһе биш батмус сәк-сәк өйгәндәр. Зөлмәрә әйтеүенсә, ул сәк-сәк бешереү оҫталығына әсәһенән өйрәнгән һәм уны бала саҡтан һәр байрамға бешерә икән. Фестивалдә Башҡортостан вәкилдәре һәм сәк-сәк менән фотоға төшөргә теләүселәр бик күп булған.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠАТЫНЫҢ ЯҠШЫ БУЛҺА...

## ожмах кәрәкмәй

Аҡылыңды камиллаштырыу өсөн күп йәтларға түгел, ә күп уйларға кәрәк.

**(Рене Декарт).**

Буйҙаҡ тормош - тамуҡ, ишле тормош - чума.

**(Роберт Бартон).**

Бай булырға теләһәң, аҡса табырға ғына түгел, аҡсаны тотонорға ла өйрән.

**(Бенджамин Франклин).**

Барыһын да ярат, айырым кешеләргә генә ышан, бер кемгә лә яуызлыҡ эшләмә.

**(Уильям Шекспир).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер төркөм халыҡ урлашыу менән шөғөлләнгән бурҙы тотоп, уны хөкөм итеү өсөн Уҡытыусыға алып килә: "Беҙ өйҙәребеҙгә төшкән, ҡош-кортобоҙҙо урлаған бурҙы тоттоҡ, - ти улар. - Уның менән ни ҡылырға икәнен әйтсе, хөрмәтле Уҡытыусы: баҙға төшөрөп ябып ҡуйырғамы, әллә хөкөм итер өсөн судья ҡулына тапшырырғамы?"**

**- Был кеше ысынлап та яуыз булһа, уның менән ни эшләһәгеҙ ҙә эшләрһегеҙ. Әгәр ҙә ул яуыз булмаһа, мин нисек теләйем, шулай эшләрһегеҙ, - ти Уҡытыусы.**

**Халыҡ уның әйткәне менән килешә, сөнки улар был бурҙың яуыз икәненә ныҡлап инанған була. Уҡытыусы бур эргәһенә килә һәм: "Һин ысынлап та бурмы?" - тип һорай. "Эйе", - ти бур. "Һин был кешеләрҙең өйҙәренә төшеп, әйберҙәрен, ҡош-ҡортон урланыңмы?" - тип һорай Уҡытыусы. "Эйе" - тип яуаплай бур. Халыҡ: "Ниңә уның менән тел әрәм итәһегеҙ. Үҙенең бур икәнен үҙе үк әйтеп тора бит..." тип шаулаша башлай. Уҡытыусы һорау алыуҙы дауам итә һәм: "Ә ни өсөн һин урлаштың?" - ти. "Минең балаларым ашарға теләй. Ҡатынымдың йүнле кейеме лә юҡ, һыуыкта ла яланаяҡ йөрөй. Уларға ҡарап, йөрәгем өҙөлә. Мин балаларымды ас итмәҫ өсөн урлашыуға барҙым..." - ти бур. Шул саҡ Уҡытыусы ҡарашын халыҡҡа йүнәлтә һәм былай ти: "Әгәр ҙә был кешенең урлашыу сәбәбе уҫал ниәттән тип иҫәпләйһегеҙ икән, уны баҙға төшөрөп ябып ҡуя алаһығыҙ. Әгәр ҙә был кешенең урлашыу сәбәбе изге ниәттән икән, тимәк, уны яуыз тип атап булмай. Ул саҡта һеҙ мин сығарған хөкөм менән килешергә тейешһегеҙ..."**

**Халыҡ тынып ҡала, берәү ҙә Уҡытыусының әйткәненә ҡаршы килергә батырсылыҡ итмәй. Уҡытыусы дауам итә: "Был кешегә кейемдәр һәм аҙыҡ килтерегеҙ. Уға үҙегеҙҙең ышаныслығыҙҙы белдерегеҙ һәм ярҙам ҡулы һуҙығыҙ. Шул саҡта һеҙҙең хөкөмөгөҙ ғәҙел булыр. Үс алыуҙы икейөҙләләргә, Алла хәҡикәтен белмәгәндәргә ҡалдырайыҡ. Һеҙ артабан да шулай итегеҙ: кемдер юлдан яҙа икән, уға бәләгә ҡалған үҙ ағайығыҙға ҡараған кеүек ҡарағыҙ. Шул саҡта йөрәгегеҙ ғәҙел хөкөмдө үҙе сығарыр..."**

1582218911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 август 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4077
Заказ - 1447/08